КИТАП

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

7

З. М. Ғәбитова, М. Ғ. Усманова

# 7 БАШҠОРТ ТЕЛЕ



З. М. Ғәбитова, М. Ғ. Усманова

# 7 БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

2-се баҫма

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
F68

## Шартлы тамғалар

- ?? — тикшереү эше
- П — проект эше
- Т — төркөмдә эш
- ⇆ — үтелгәндәрҙе ҡабатлау
- — коммуникатив күнекмәләрҙе үҫтереү өсөн эш төрҙәре
- !! — ауырлыҡ тыуҙырыусы эш төрҙәре
- ? — һораүҙар
- — һүҙлек эше
- — актив үҙләштереү өсөн һүҙҙәр

**Ғәбитова, З. М., Усманова, М. F.**
F68 Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. — 2-се баҫма / З. М. Ғәбитова, М. F. Усманова. — Өфө : Китап, 2017. — һүрәттәре менән 136 бит.

ISBN 978-5-295-06807-2

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП—2017**

**ISBN 978-5-295-06807-2**

© Ғәбитова З. М., Усманова М. F., 2015
© Василов А. Ә., һүрәттәр, 2015
© Голубев Г. Е., дизайн, 2015
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# ЯҢЫНАН МӘКТӘПКӘ
## VI класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау

**1.** Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Үҙегеҙгә оҡшағандарын һайлап алып, һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

1) мәктәп, уҡыусылар, өҫтәл, ултырғыс, аҡбур, ҡыңғырау, дәфтәр, дәреслек, уҡытыусы, таҡта, класс

2) минең мәктәбем, матур көн, һалҡын көн, һауа торошо, уның китабы, бал ҡорто, белем көнө

**2.** Һүрәткә ҡарап, «Беренсе сентябрь — Белем көнө» тигән темаға, 1-се күнегеүҙәге һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, хикәйә төҙөгөҙ.



**3.** Өҙөктө дөрөҫ итеп уҡығыҙ.

## Мәктәпкә тәү барған көн

Кемдең генә хәтеренә мәңгелеккә яҙылып ҡалмай ул көн. Бәхетле, тылсымлы көн! Минең хәтеремдә лә шул көйө һаҡлана ул. Эйе, бик матур, сыуаҡ көн ине. Урам төрлө-төрлө күбәләктәр менән тулы яҙғы баҡсаға оҡшаған. Мин, матур кейемдәр кейеп, ҡулыма портфель тотоп, мәктәпкә барам.

*(З. Биишева)*

**тылсымлы** — волшебный
**хәтер** — память
**мәңгелеккә** — навечно
**һаҡлана** — сохраняется

1. Тексҡа нигеҙләнеп, мәктәпкә тәү тапҡыр барған көнөгөҙ тураһында һөйләгеҙ.
2. Тексығыҙҙа ҡулланыу өсөн терәк һүҙҙәр уйлап яҙығыҙ.

**4.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ. Дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

1. Башҡорт телендә нисә һуҙынҡы һәм нисә тартынҡы өн бар?
2. Башҡорт алфавитында нисә хәреф?
3. Башҡорт телендә ниндәй һуҙынҡы өндәр бар?
4. Омоним, синоним, антонимдар нимә ул? Миҫалдар яҙығыҙ.



*Мостай Кәрим (1919—2005) — Башҡортостандың халыҡ шағиры. Ул Шишмә районы Келәш ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан.*

*Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс таған» повестарын һәм башҡа әҫәрҙәрен уҡыусылар яратып уҡый.*

*Мостай Кәрим — Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, М. Шолохов исемендәге халыҡ-ара премиялар лауреаты.*

## Уҡытыусыма

Иҫемдә алтын һуҡмаҡҡа
Тәү аяҡ баҫҡан көнөм —
Тәү башлап мәктәп ишеген
Үрелеп асҡан көнөм.

Һин, уҡытыусым, шундай наҙлап
Ҡараның күҙҙәремә,
Һүнмәҫлек ҙур дәрттәр һалдың
Бәләкәс йөрәгемә.

Һин етәкләп минән мине
Тауҙарҙың бейегенә,
Алып киттең далаларға,
Диңгеҙҙәр киңлегенә...

Һин яратырға өйрәттең
Һәр бер биҙәген ерҙең,
Йондоҙло зәңгәр күктәрҙең
Серҙәрен асып бирҙең.

Иҫемдә алтын һуҡмаҡҡа
Тәү аяҡ баҫҡан көнөм,
Һәм тормошом китабының
Тәү битен асҡан көнөм.

**һуҡмаҡ** — тропинка
**наҙлап** — ласково
**дала** — степь
**биҙәк** — узор
**үрелеп асҡан** — открыл(а) дотянувшись

1. Шағир һуҡмаҡты ни өсөн *алтын* тип атай?
2. «Алтын һуҡмаҡ», «тормошом китабы» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
3. *«Һин етәкләп минән мине
Тауҙарҙың бейегенә,
Алып киттең далаларға,
Диңгеҙҙәр киңлегенә...»* тигән строфаны аңлатығыҙ.
4. Уҡытыусығыҙ тураһында нимәләр әйтер инегеҙ?
5. Шиғырҙы ятлағыҙ.
6. Композитор Айрат Ҡобағошов был шиғырға көй яҙған. Йырҙы өйрәнегеҙ.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Сифат дәрәжәләре** — Степени прилагательных

**Основная степень (төп дәрәжә)** — исходная форма прилагательного:

**аҡ** яулыҡ — белый платок,
**матур** өй — красивый дом.

**Сравнительная степень (сағыштырыу дәрәжәһе)** обозначает, что какой-то признак проявляется в этом предмете или лице в большей или в меньшей степени, чем в другом и образуется посредством прибавления к прилагательным аффиксов – **-раҡ/-рәк** (после основ на гласный звук), **-ыраҡ/-ерәк, -ораҡ/-өрәк** (после основ на согласный звук):

ағы**раҡ** яулыҡ — платок белее,
матур**ыраҡ** өй — дом красивее.

**Превосходная степень (артыҡлыҡ дәрәжәһе)** обозначает, что какой-то признак проявляется в этом предмете или лице в наибольшей степени:

**ап-аҡ** яулыҡ — белый-пребелый платок.

**Уменьшительная степень (аҙһытыу дәрәжәһе)** образуется с помощью аффиксов **-ғылт/-гелт; -ғолт/-гөлт; -ҡылт/-келт, -ҡылтым/-келтем, -көлтөм, -ғылтым/-гелтем; -ғолтом/-гөлтөм; -ғусҡыл, -елйем, -һыл/-һыу, -һел; мыс/-мес, -са.** При присоединении этих аффиксов отбрасывается конечный слог слова или его часть:

**ҡыҙыл** — красный; ҡыҙ**ғылт**, ҡыҙ**ғылтым** — красноватый; **йәшел** — зеленый; йәш**келт**, йәш**келтем** — зеленоватый; **ҡара** — черный; ҡара**һыу**, ҡара**ғусҡыл** — черноватый; **ал** — розовый; ал**һыу** — розоватый.

**5. I.** Бирелгән һүҙҙәргә, көҙ билдәләренән сығып, сифаттар өҫтәп яҙығыҙ.

ел — көслө, ...
көн — һалҡын, ...
ямғыр — ..., ...
япраҡ — ..., ...

**II.** «Синонимдар» һүҙлеген ҡулланып, ҡылымдарға синонимдар өҫтәп яҙығыҙ.

шатланыу — ..., ...
барыу — ..., ...
йөрөү — ..., ...
күңелһеҙләнеү — ..., ...

**6.** Уҡығыҙ. Тексты нисек аңланығыҙ? Башҡортса һөйләгеҙ.

Сотни тысяч слов в нашем языке, но на первое место я поставил бы три слова: хлеб, труд, народ. На этих трех корнях держится наше государство. Эти три корня так прочно переплелись, что нельзя ни разорвать их, ни разделить. Кто не знает, что такое хлеб и труд, тот перестает быть сыном своего народа, теряет лучшие духовные качества своего народа. Кто забывает, что такое труд, пот и усталость, тот перестает дорожить хлебом. Если будет поврежден хоть один из этих корней человека, он перестает быть настоящим человеком. *(По В. Сухомлинскому)*

**духовные** — рухи
**дорожить хлебом** — икмәк ҡәҙерен белеү
**перестает** — туҡтай

1. *Хлеб, труд, народ* һүҙҙәрен башҡорт телендә яҙығыҙ. Был һүҙҙәр менән:
   а) һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ;
   б) мәҡәлдәр табып яҙығыҙ.
2. «Русса-башҡортса» һүҙлектән *государство, прочно, пот, усталость, корень* һүҙҙәренең тәржемәһен табып яҙығыҙ.
3. Үҙегеҙ белгән профессия атамаларын яҙығыҙ.

**7.** *Һары, йәшел* сифаттарын дәрәжә менән үҙгәртегеҙ. Улар менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

Төп дәрәжә: ...
Сағыштырыу дәрәжәһе: ...
Артыҡлыҡ дәрәжәһе: ...
Аҙһытыу дәрәжәһе: ...

| |
|---|
| уңыш<br>тамыр<br>хеҙмәт<br>баҫыу |

**8.** 1. Бер-берегеҙҙе яңы уҡыу йылы менән ҡотлағыҙ, теләктәр теләгеҙ.
2. Йәйге каникулдарҙа ҡайҙа ял итеүегеҙ, нимәләр эшләүегеҙ, күреүегеҙ тураһында һөйләгеҙ.

**9.** Тексты тасуири уҡығыҙ, күсереп яҙығыҙ.

Тел — халыҡтың иң ҙур хазинаһы. Бик тә ҡәҙерле нәмәне хазина тиҙәр. Ул берәмләп, бөртөкләп йыйыла. Мәҫәлән, алтын, көмөш — ер байлығы. Ә тел — халыҡ байлығы. Ул быуаттар буйына тупланған, халыҡты халыҡ итеп, милләт итеп туплаған. *(Х. Назар)*

**быуат** — век, столетие
**ҡәҙерле** — дорогой
**бөртөкләп** — по крупицам
**тупланған** — копился
**туплаған** — соединил, объединил

1. Ни өсөн автор: «Тел — халыҡтың иң ҙур хазинаһы», — тип әйтә? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?
2. Яҙылғандарға өҫтәп, нимәләр әйтер инегеҙ?
3. Өҫтәлмә сығанаҡтарҙан тел тураһында мәғлүмәт табығыҙ.
4. Бөйөк шәхестәрҙең туған тел тураһында әйткәндәрен яҙып алығыҙ.

**10.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Миҙгелдәр

Һәр миҙгелдең үҙ йәме бар,
Үҙ төҫө бар һәр айҙың.
Зәңгәр сирень, йәшел үлән
Бигерәк йәмләй яҙҙы!

Йәй айҙарын аллы-гөллө
Хуш еҫле сәскә биҙәй.
Ҡыуанып һайраған ҡош та
Шул гүзәллекте һиҙә.

Уңған көҙ урманды биҙәй
Ҡыҙыл, һары төҫтәргә.
Шунан ҡышҡа ҡала инде
Ергә аҡ төҫ өҫтәргә.

Сиратлап миҙгелдәр ергә
Сағыу биҙәктәр һала.
Шуға йылдың һәр бер айын
Һағынып көтөп алам.

*(Т. Дәүләтбирҙина)*

?

1. Шиғыр йөкмәткеһе буйынса, һәр миҙгелде нимә биҙәй?
2. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә итегеҙ.
3. Һеҙ нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ?

**11.** Тәкдим ителгән схемаға ярашлы һүҙҙәр уйлап яҙығыҙ.

**В**
- **в** — рус һүҙҙәрендә
- **(уы)** — ҡалын ижекле һүҙҙәрҙә
- **(үе)** — нәҙек ижекле һүҙҙәрҙә

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

һалҡын, ваҡыт, тауыҡ, мүк, Вәсилә, тейен, тауыш, ваҡ

**12.** Тексты уҡығыҙ. Унда һүҙ нимә тураһында бара? Текста яҙылғандар менән килешәһегеҙме? Төп фекерҙе белдергән һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Әсә теленә булған мөнәсәбәтенә ҡарап, һәр кешенең мәҙәни кимәленә генә түгел, ә уның граждансылыҡ ҡиммәтенә лә баһа бирелә. Тыуған илгә булған ысын мөхәббәтте әсә теленә ҡарата булған мөхәббәттән тыш күҙ алдына килтереү мөмкинме һуң? Әсә теленә вайымһыҙ ҡараған кеше — ҡырағай кеше, зарарлы кеше. Сөнки ошоноң менән ул халҡының үткәненә, хәҙерге хәленә һәм киләсәгенә ғәмһеҙ, битараф булғанын, үҙенең моңһоҙ икәнен күрһәтә. *(К. Паустовскийҙан)*

**мөхәббәт** — любовь
**вайымһыҙ** — беспечно, беззаботно
**ҡырағай** — дикий
**баһа** — оценка
**ғәмһеҙ** — беспечный, беззаботный
**битараф** — равнодушно, равнодушный
**моңһоҙ** — беспечный

**13.** Һүрәттәрҙе иғтибар менән ҡарағыҙ. Белешмә өсөн һүҙҙәрҙе ҡулланып, бирелгән план буйынса хикәйә төҙөгөҙ.

## Урман аптекаһында


Юл япрағы


Үгәй инә үләне


Меңьяпраҡ


Аҡ сәскә


Һары мәтрүшкә


Гөлйемеш


Мәтрүшкә


Йүкә сәскәһе

### План

1. Шифалы үләндәрҙе йыйыу ҡағиҙәләре.
2. Аҡланда.
3. Аптекала.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *«Шифалы үләндәр» китабы, лагерь, ҡайсы, мәтрүшкә, бысаҡ, киҫеп алыу, «Ҡыҙыл китап», меңьяпраҡ, ярҙам итеү, йыйыу ҡағиҙәләре, һалҡын тейгәндә, аңлатыу, рәхмәт әйттеләр, юл япрағы, аҡ сәскә, шатланыу, дарыу урынына, изге эш, тәбиғәтте һаҡлау, гербарий яһаныҡ, бәләкәстәргә һөйләнек.*

**14.** Һынамыштарҙы уҡығыҙ. Бер-ике һынамышты әйттереп, иптәштәрегеҙгә яҙҙыртығыҙ.

## Һынамыштар

Беренсе октябрҙә торналар көньяҡҡа осоп китһә, ун дүртенә һыуытыр; осмаһалар, ҡыш һуң килер, икенсе ноябргә тиклем һыуытмаç.

Ҡар япраҡтар ҡойолоп бөтмәç элек яуһа, тиҙ иреп бөтөр.

Өсөнсө октябрҙә үрмәксе ауы күпләп осһа, көҙ оҙон килер, ҡар һуң ятыр.

Имән сәтләүеге уңһа, ҡыш йылы килер, уңыш мул булыр.

14 октябрҙә көн ниндәй булһа, ҡыш та шулай килер.

**15.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Ни өсөн шиғыр «Хушлашыу» тип атала?

## Хушлашыу

Ағастар һары төçкә кейенде,
Илемде иңләп, алтын көҙ килде.
Зәңгәр һауала тынмай тауыштар —
Тыуған ер менән хушлаша ҡоштар.
Хушлаша барыһы — йылға, үҙәндәр,
Урал тауҙары, урмандар, күлдәр:
«Хушығыҙ, беҙҙең йырсы ҡошҡайҙар,
Таңды уятҡан һандуғасҡайҙар.
Тыуған яғығыҙ — Уралығыҙға
Һеҙ һағынышып ҡайтығыҙ яҙға.
Тағы йырлағыҙ, данлап Ватанды,
Гел ҡаршылағыҙ һайрап ал таңды!»

*(Ә. Әсәҙуллина)*

**таң** — заря
**данлап** — восхвалять

1. Шиғырҙа һүҙ нимә тураһында бара?
2. Ниндәй картина күҙ алдына баçа? Һөйләгеҙ.
3. Һуңғы ике юлға ниндәй мәғәнә һалынған?
4. Урманға сығып, көҙгө тәбиғәтте күҙәтегеҙ. Унда ниндәй үҙгәрештәр булыуын һөйләгеҙ.
5. «Көҙгө урман» темаһына һүрәт төшөрөгөҙ.

**16. I.** Диалогты дауам итегеҙ. Ҡыҙҙар нимә тураһында һөйләшә тип уйлайһығыҙ?

## Мәктәп ишеге алдында

— Һаумы, Әлфиә. Һине йәй буйы күрмәнем, һағынып бөттөм.

— Сәләм, Гөлдәр. Ҡайһылай үҫеп, матурланып киткәнһең. Йә, Гөлдәр, һөйлә әле, һин нисек ял иттең?

— ... ... ...

**II.** Диалогтарҙы уҡығыҙ. «Иртәнге аш ваҡытында», «Урманда», «Гардеробта», «Тәнәфестә», «Мәктәп китапханаһында» темаларының береһе буйынса диалог төҙөгөҙ.

## Урамда

— Әйтегеҙ әле, Үҙәк балалар китапханаһына нисек барырға була?

— Ғәфү итегеҙ, белмәйем.

— Мин беләм. Һеҙ 6-сы трамвай менән «12-се мәктәп» туҡталышына тиклем барығыҙ. Ә унан китапхана күренеп тора.

— Рәхмәт.

## Китапханала

— Һаумыһығыҙ.

— Хәйерле көн.

— Миңә Рауил Бикбаевтың әҫәрҙәр йыйынтығын, зинһар, бирегеҙ әле.

— Ҡыҙғаныска ҡаршы, йыйынтыҡ башҡа кешелә. Һеҙгә шағирҙың ниндәй әҫәре кәрәк һуң?

— «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы.

— Был поэма айырым китап булып сыҡты бит. Бына алығыҙ. Ә 16 октябрҙә китапты тапшырырһығыҙ.

— Рәхмәт, һау булығыҙ.

— Һау булығыҙ.

**17.** Тексты тәржемә итегеҙ. Үҙ һүҙҙәрегеҙ менән башҡортса һөйләгеҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе һүҙлектән ҡарағыҙ.

## Осенний день

С самого утра идет мелкий дождь. Это не летний грозовой дождь, который шумит и низвергается, подобно водопаду. Он льет беспрестанно, тихими, тонкими струйками. Ветер дует без устали, далеко разнося созревшие семена деревьев и трав. Первая распустилась береза, и она первая пожелтела. А осина расцветилась красными, багровыми, золотистыми листьями. Но порывистый осенний ветер сбрасывает и это последнее убранство: крутя в воздухе легкие иссохшие листья, он расстилает их по мокрой земле. Цветы исчезли: как будто мертвая рука осени сжала и измяла их. Измокшие заборы смотрят уныло из-под бесконечной сетки дождя. Галки стаями летят из побуревшего сада и, сталкивая одна другую, усаживаются на крышах. Все позже восходит солнышко, все раньше нисходит оно к краю земли. *(По К. Ушинскому)*

**18.** Йомаҡтарҙың яуабын табып, дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ. Ике йомаҡ өҫтәп яҙығыҙ.

1. Бәләкәй генә йорт,
   Эсе тулы ҡорт.

2. Ҡыяғы үҫә өҫтә,
   Ҙурая үҙе ерҙә.
   Сисендерһәң — илата,
   Иламай үҙе бер ҙә.

3. Ҡат-ҡат тунлы,
   Ҡарыш буйлы.

4. Бер ҡуҙаҡта йөҙ малай.

5. Башы йәшел япраҡ,
   Ятҡан ере тупраҡ,
   Үҙе ҡыҙыл ит кеүек,
   Тик ашарға ҡатыраҡ.

**Беләһегеҙме?**

«Мәктәп» — латин һүҙе. Иң ҡыҙыҡлыһы шунда: «сколэ» тигән грек һүҙенең мәғәнәһе «ял», «байрамса», «буш ваҡыт», «туҡтап тороу» тигәнде аңлатҡан. Күрәһең, уҡыусыларҙың мәктәптә уҡыуы төп эш тип һаналмаған.

**төп** — основной
**мәғәнә** — смысл
**һаналмаған** — не считалась

**19.** Түбәндәге күрһәтмәләр ярҙамында «Мәктәп» темаһына ҡараған һүҙҙәрҙе табып, дәфтәрҙәрегеҙгә яҙығыҙ. Һүҙҙәр теҙмәһен дауам итегеҙ.

### Башватҡыс

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| л | ә | м | у | ы | ҡ | у |
| ә | к | ы | с | т | ы | к |
| ҡ | и | т | ө | ҫ | т | е |
| р | ы | а | п | л | ә | л |
| ғ | т | л | у | н | а | ә |
| ы | ә | с | к | ө | т | а |
| с | ғ | ә | т | а | т | ҡ |

1. Яҙыу ҡоралы (5 хәреф).
2. Белем ала торған сығанаҡ (5 хәреф).
3. Класс әйбере (8 хәреф).
4. «Ваҡыт батшаһы» (5 хәреф).
5. Белем биреүсе (8 хәреф).
6. «Икеле»ләр ҙә, «бишле»ләр ҙә яҙыла торған дәфтәр (8 хәреф).
7. Мәктәптә эш урыны (5 хәреф).
8. Класс әйбере (5 хәреф).

**20. I.** Белем, тел тураһында мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе уҡығыҙ. Үҙегеҙгә оҡшаған ике мәҡәлде яҙып алығыҙ, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

### Мәҡәлдәр, әйтемдәр

1. Китап — белем шишмәһе.
2. Күп уҡыһаң, күп белерһең.
3. Белем алыу — энә менән ҡойо ҡаҙыу.
4. Белеме барҙың ҡәҙере бар.

**II.** Рус мәҡәлдәренә башҡорт телендә мәғәнәһе менән тап килгәндәрен табып яҙығыҙ.

1. Что посеешь, то и пожнешь.
2. Куй железо, пока горячо.
3. Кончил дело, гуляй смело.
4. Кто не работает, тот не ест.
5. У страха глаза велики.

**21. I.** Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Һүҙбәйләнештәрҙе тәржемә итегеҙ.

1) Ватан, халыҡ, хөрмәт, мөғжизә, шишмә, быуат, йомшаҡ, йыраҡ, сыуаҡ, ваҡыт, сәғәт, хат, һағыныу, дәүләт теле, мәғәнә, дәрәжә, соҡор, зәңгәр, һоро, оҡшай, ҡыуаныу, тәбиғәт, хазина, ҡояш

2) тыуған мәктәбем, алтын һуҡмаҡ, фәндәр тауы, алтын көҙ, тәүге көн, нурҙар һибә, йәйге ял, осоп киттеләр, хәйерле юл, шаулап үҫ, шау-гөр килеп

**II.** Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, текст уйлап яҙығыҙ. Уға ниндәй исем бирерһегеҙ? Уйлағыҙ.

**22.** Тексты уҡығыҙ. Өфө ҡалаһындағы музейҙар тураһында башҡортса һөйләгеҙ.

В Уфе есть несколько музеев: национальный, художественный, археологический, интернациональной дружбы, истории культуры народов Башкортостана, Мемориальный дом-музей народного поэта Башкортостана Мажита Гафури, Дом-музей С. Т. Аксакова и другие. Из них самый старый и большой — Национальный музей Республики Башкортостан.

Важным культурным центром Уфы является Государственный художественный музей имени М. В. Нестерова. Здесь собраны большие коллекции картин русских и башкирских художников.

В музейной книге отзывов есть записи на башкирском, татарском, русском, английском, французском, чешском, японском, арабском и других языках. *(По Г. Пикуновой)*

1. Өфө ҡалаһында ниндәй музейҙарҙа булғанығыҙ бар?
2. Нимәләр хәтерегеҙҙә ҡалған?

**23.** Түбәндәге ситуацияларҙа нисек аралашыр инегеҙ?

1. Һеҙ Өфөлә йәшәйһегеҙ. Силәбе өлкәһендәге әхирәтегеҙ менән скайп аша һөйләшәһегеҙ. Ул һеҙҙән Өфө ҡалаһындағы музейҙар тураһында һөйләүегеҙҙе үтенә. Һеҙ уға нимәләр хаҡында һөйләр инегеҙ?

2. Һеҙ беренсе тапҡыр Өфө ҡалаһында. Һеҙҙе музейҙар, иҫтәлекле урындар ҡыҙыҡһындыра. Ниндәй һорауҙар бирер инегеҙ?

3. Һамар өлкәһендәге дуҫығыҙ Башҡортостан яҙыусылары тураһында мәғлүмәтте электрон почтаға яҙып ебәреүегеҙҙе һорай. Кем тураһында һәм нимәләр яҙыр инегеҙ?

# АУЫЛ ТОРМОШО

**1.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Ни өсөн икмәк кешелектең иң ҙур мөғжизәһе?



Кешелектең мең-мең йылдар буйы
Асыштарын теҙеп һалғанда,
Иң ҙур мөғжизәнең береһе булып
Ҡала килер икмәк һаман да.

*(З. Ҡотлогилдина)*

**мөғжизә** — чудо
**ҡала килер** — останется
**асыш** — открытие
**һаман** — до сих пор

**2.** Тексты уҡығыҙ. Уның төп фекерен билдәләгеҙ. Текст буйынса һорауҙар әҙерләгеҙ. Һөйләргә әҙерләнегеҙ.

Күпереп бешкән икмәк, табынға килгәнсе, бик оҙон, ҡатмарлы юл үтә. Тук башаҡтар үҙенән-үҙе үҫмәй. Ерҙе ашларға, еренә еткереп һөрөргә, тырматырға кәрәк. Сәсер өсөн трактор, һабан, культиватор, сәскес кеүек машиналар хәрәкәткә килә. Баҫыуҙы ҡый үләндәренән, ҡоротҡостарҙан һаҡлайһың. Унан башаҡтарҙы урырға, һуғырға кәрәк. Уңышты йыйып алыуҙы фронттағы утлы көрәшкә тиңләргә була. Һуғылған игенде елгәрәләр, сортҡа айыралар, киптерәләр. Аҙаҡ иген йәнә эшкәртелә, таҙартыла, тартыр алдынан дымландырыла. Он хәленә килгәнсе, ашлыҡҡа 30-ға яҡын төрлө машинанан үтергә тура килә. Ондан икмәк бешереү ҙә шулай уҡ күп, тынғыһыҙ хеҙмәт талап итә. *(«Икмәккә баш эйәйек» китабынан)*

**ҡатмарлы** — сложный
**тиңләргә була** — можно сравнить
**башаҡ** — колос
**дымландырыла** — увлажняется
**хәрәкәт** — движение
**он** — мука
**урырға** — жать
**һуғырға** — молотить

1. Тексты нисә өлөшкә бүлеп була? Беренсе өлөштө күсереп яҙығыҙ. Һәр өлөшкә исем бирегеҙ.
2. Икмәк тураһында мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе иҫкә төшөрөгөҙ.

**3.** Әкиәтте тасуири уҡығыҙ. Ни өсөн әкиәт «Алтын башаҡтар» тип атала?

## Алтын башаҡтар

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда бер ир менән ҡатын йәшәгән. Уларҙың биш улдары булған. Берҙән-бер көн быларҙың аталары, Тыуған илде яҡлап, яуға киткән. Ул кире әйләнеп ҡайтмаған, һуғыш яланында үлеп ҡалған. Яңғыҙ әсә биш баланы үҙе тәрбиәләп үҫтергән.

— Улдарым, — тигән әсә, егеттәрҙе янына саҡырып алған да, — мин һеҙҙе үҫтерҙем, хәҙер үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрегеҙ.

— Беҙ, — тигән егеттәр, — үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрер инек, аҡсабыҙ юҡ бит. Һин, әсәй, беҙгә берәр генә бөртөк булһа ла алтын бир.

— Алтын бирәм, — тигән әсәләре. — Бер бөртөк түгел, мең бөртөк. Тик ул алтындарҙы атайығыҙ йыйып ҡуйғайны, уны үҙегеҙ эҙләп табығыҙ.

— Табабыҙ, табабыҙ! — тигән егеттәр.

— Ана, — тигән әсә, — Ташлытау менән Ҡарлытауҙы күрәһегеҙме? Шул ике тау араһында киң баҫыуҙы күрәһегеҙме? Атайығыҙ алтын бөртөктәрен шул баҫыуға күмгән. Эҙләп табығыҙ шуны. Баҫыу ерен ҡаҙығыҙ. Ең һыҙғанып, тир сығарып эшләгеҙ.

Биш егет биш һабан менән күҙ күреме ерҙе һөрөп сыҡҡан. Унан кәҫтәрҙе ваҡлап, тырмалағандар. Ә алтын бөртөктәрен тапмағандар. Шунан егеттәр, бик күңелһеҙләнеп, әсәләре янына ҡайтҡан.

— Бер генә бөртөк тә алтын тапманыҡ, әсәй! — тигәндәр.

— Борсолмағыҙ, уландарым! — тигән әсә. — Табырһығыҙ алтындарҙы! Ана буралағы бойҙайҙы сәсегеҙ шул ергә, көҙ көнө алтын бөртөктәр алырһығыҙ.

Егеттәр әсәләре әйткәнсә эшләгән. Бойҙай шәп уңған, уны урғандар, һуҡҡандар.

— Алып килегеҙ миңә үҙегеҙ иккән игенде! — тигән әсә.

Егеттәр әсәләре алдына тоҡ-тоҡ игенде килтереп өйгән.

Әсә һары бөртөктәрҙе усына алып ҡараған да улдарына:

— Атайығыҙ ергә күмгән алтын бөртөктәре бына шулар инде, уландарым, һеҙ бына уларҙы эҙләп таптығыҙ хәҙер. Үҙегеҙ көн итә алырһығыҙ, — тигән.

Егеттәр бер-береһенә ҡарағандар ҙа бәхетле йылмайғандар.

**яу** — сражение
**үлеп ҡалған** — погиб (он)
**яңғыҙ** — одинокий (-ая)
**тоҡ** — мешок
**үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрегеҙ** — сами думайте о своем существовании
**баҫыу** — поле
**күмгән** — закопал
**ең һыҙғанып** — засучив рукава
**иген игеү** — заниматься хлебопашеством
**көн итеү** — жить

?

1. Әкиәттең төп фекерен әйтегеҙ. Әкиәт кешеләрҙе нимәгә өйрәтә?
2. *«Ең һыҙғанып, тир сығарып эшләгеҙ»* һүҙҙәрен нисек аңлайһығыҙ?
3. Әкиәт буйынса һорауҙар әҙерләгеҙ.
4. Түбәндәге фәһемле һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

### Ололар һүҙе

Ололарҙы ололау — яҡшылыҡтың билдәһе,
Кеселәрҙе кеселәү — кешелектең билдәһе,
Олоға ҡолаҡ һалмау — яманлыҡтың билдәһе,
Кесене һанға һуҡмау — насарлыҡтың билдәһе.

Ололарға кесе бул, кеселәргә оло бул,
Ололарҙың ише бул, илен һөйәр кеше бул.

**4. I.** Һүрәттәрҙе файҙаланып, икмәк юлы тураһында һөйләгеҙ. Белешмә өсөн һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ. Ниндәй һүҙҙәр өҫтәп яҙыр инегеҙ?

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *орлоҡ, башаҡ, иген, ер, трактор, һөрөү, йомшартыу, он, икмәк, бойҙай, бешереү, комбайн, йыйыу, элеватор, елләтеү.*

**II.** Тиҙәйткесте дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. *Мул уңышлы* тигән һүҙбәйләнеште нисек аңлайһығыҙ?



Уҫтергәнгә үҙебеҙ,
Мул уңышлы көҙөбөҙ.
Шатлана һәр беребеҙ,
Шуға балҡый йөҙөбөҙ.

*(Г. Юнысова)*







**5. I.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Икмәк бешерер өсөн нимәләр кәрәк?
2. Ҡамыр аштарынан ниндәй милли ризыҡтар беләһегеҙ?
3. Башҡа халыҡтың милли ризыҡтары тураһында һөйләгеҙ.

**II.**

1. Көҙ ниндәй миҙгел?
2. *Алтын көҙ* тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
3. Көҙгө пейзажды ниндәй төҫтәр ҡулланып төшөрөр инегеҙ?

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

Вы уже знаете, что общение между людьми происходит с помощью текстов. **Текст** — это речевое произведение в устной и письменной форме, характеризующееся единством замысла, смысловой целостностью, связностью, завершенностью. Текст содержит какую-то информацию, оказывает воздействие на читателей, имеет определенную структуру, композицию, делится на части.

В каждом тексте можно определить его тему (о чем пишет автор) и главную мысль (что хочет сказать автор).

Целостность текста обусловлена прежде всего замыслом автора, а также единством темы и ситуации (о чем говорится в тексте, что в нем изображается).

**6.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

## Көҙ уртаһы

Октябрҙә ағастар яланғаслана, көн һыуына башлай. Ямғыр йыш яуа. Шуға, халыҡ календары буйынса, уны бысраҡ ай тип тә йөрөтәләр. Һуңғы күсмә ҡоштар көньяҡҡа осоп китә. Ҡышларға ҡалған ҡоштар, аҙыҡ эҙләп, ауыл тирәһенә яҡын килә.

Хайуандар ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә. Туҙбаш, ҡара йылан һәм тәлмәрйендәр аулаҡ урындарға йәшеренеп, ҡышҡы йоҡоға тала. Айыуҙар, бурһыҡтар көҙ көнө һимерә, уларҙың майы ҡыш буйына өңдәрендә тыныс йоҡларға етә.

Октябрь айында тәбиғәт һаҡсылары — урмансыларға эш арта. Улар йәш ағастар ултырта, төрлө орлоҡтар йыя.

Баҡсасылар ҙа ҡыҙыу эш менән мәшғүл: емеш ағастарын бәйләй, олондарын ағарта, төптәрен ҡаҙа. *(«Мәктәп календары»нан)*

**Анализ текста.** Төп фекер: көҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен сағылдырыу. Тексттың темаһы: тәбиғәт һәм кеше. Ситуация: көҙ миҙгеле; һүрәтләү предметы: көҙ.

**Тулы текст булдырыу юлдары.**

Тематик һүҙҙәр: *октябрь, көҙ, ямғыр, бысраҡ, күсмә ҡоштар, ҡышлаусылар, йыландар, хайуандар, баҡсасылар, ағастар;* ҡабатланған һүҙҙәр: *октябрь, ҡоштар, ағастар;* күплек ялғауҙары ҡабул иткән исемдәр: *ағастар, ямғырҙар, ҡоштар, ҡышлаусылар, хайуандар, тәлмәрйендәр, айыуҙар, бурһыҡтар, урмансылар, баҡсасылар.*

**7.** Тексты уҡығыҙ. Тәржемә итегеҙ.

## Хлеб

Мы каждый день едим хлеб. Без хлеба и не сядем за стол. Какая еда без хлеба! Без него не наешься досыта, без него все невкусно. Хлеб дает людям силы для жизни и работы.

Все любят хрустящие баранки, пышные пироги и блины, сладкое печенье, медовые пряники, сушки и сухарики. Это тоже хлеб. Это все испечено из муки.

Хлеб — это богатство народа. Нужно уметь вырастить хлеб, а для этого надо много знать. *(По М. Белаховой)*

**8.** Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнегеҙ. Тыныш билдәләренә иғтибар итегеҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

## Илһам донъяһы

| |
|---|
| асыш |
| яңғыҙ |
| ҡамыр |
| ғорур |
| урмансы |

Тыуған ерем — баллы Башҡортостан.
Һиңә тиңдәш тағы ниҙәр бар?
Шыршыларың үҫә йәй төҫөндә,
Ҡыш аҡлығын һаҡлай ҡайындар.

Тыуған ерем — гөллө Башҡортостан.
Һиндә генә шундай матурлыҡ!
Ғорур тауҙарыңдың таштары ла
Мендәр итеп һалып ятырлыҡ.

*(Д. Булгакова)*

**9.** Мәҡәлдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе аңлатығыҙ.

1. Батыр ут булыр, ҡурҡаҡ юҡ булыр.
2. Ут менән һыу дуҫ булмаҫ.
3. Яманлыҡ иткәнгә лә яҡшылыҡ ит.
4. Аҙ һөйлә, күп тыңла.



*Тимер Йосопов — Башҡортостандың халыҡ шағиры. Ул 1938 йылда Дыуан районы Әпсәләм ауылында тыуған.*

*Шағирҙың «Снежное поле» исемле китабы Мәскәүҙә рус телендә сыҡты.*

*Тимер Йосопов — Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты.*

## Икмәк еҫе

Самауыр ҙа аҡ толомон һелкә —
Быуын бөркә оло табында.
Тәм-томдарың, әйҙә, ары торһон,
Күпереп торған икмәк алдында.

Оноторлоҡмо һуң,
Булды бит ул
Бик тилмергән саҡтар икмәккә.
Башаҡ сүпләп ҡамыл төптәренән,
Йөрөмәнек һис тә ирмәккә.

Үтте ул саҡ,
Арып эштән ҡайттым,
Һеңлем минең икмәк бешерә.
Күпереп кенә бешкән ошо икмәк
Үткәндәрҙе иҫкә төшөрә.

Өй эсенә тула икмәк еҫе —
Оло шатлығы ул тормоштоң.
Сеү, йөрәгем, ниңә бер минутҡа
Йомарланған ҡарҙай короштоң?

Ер — мәңгелек. Ер янмаҫҡа тейеш,
Тыныс булһын илем кистәре;
Тормош күрке булып һәр бер өйҙән
Гел таралһын икмәк еҫтәре.

**йомарланған ҡар** — снежок
**тормош күрке** — украшение жизни
**ҡамыл** — стерня, жнивье
**икмәккә тилмергән** — страдал, томился без хлеба
**ирмәккә** — ради забавы

1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Йөкмәткеһен аңлатығыҙ. Шиғырҙың төп фекерен билдәләгеҙ.
2. *«Сеү, йөрәгем, ниңә бер минутка Йомарланған ҡарҙай ҡороштоң?»* тигән юлдарҙы аңлатығыҙ.

**10. I.** Рус һәм башҡорт һүҙҙәрен сағыштырып уҡығыҙ. Һүҙҙәрҙең баҫымдарын билдәләгеҙ.

| *Рус телендә* | *Башҡорт телендә* |
| --- | --- |
| оса | оса |
| болото | болото |
| тормоз | тормош |
| теремок | теремек |
| отошло | отошло |

**10. II.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Ағастарҙы япраҡ биҙәй,
Сәскә биҙәй ҡакланды,
Төндәрҙе көмөш ай биҙәй,
Сулпан биҙәй ал таңды!

Йылғаны тулҡын матурлай,
Ҡояш нурлай көндәрҙе...
Минең дә гөл иткем килә
Тыуып үҫкән ерҙәрҙе.

*(А. Игебаев)*

1. Шиғырҙы уҡып сыҡҡандан һуң, йомғаҡлап нимә әйтерһегеҙ?
3. Шиғырҙың һуңғы ике юлы буйынса фекер алышығыҙ. Тыуып үҫкән ерҙәрҙе гөл итеү өсөн һеҙгә нимә эшләргә кәрәк?

**11. I.** Тексты уҡығыҙ. Тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып яҙығыҙ.

Тәбиғәтте һаҡлау — б__тә кеш__нең бурысы. Ошо маҡсат менән урм__нд__рҙы иҫәпһеҙ ҡырҡыу, й__лғ__ һәм күлдәрҙә ау менән балыҡ тотоу, урм__ндарҙа ҡош-ҡортҡа һәм кейеккә һунар итеү тыйыла. Йәш а__астар ул__ыртыр өсөн саралар күреү — кешел__рҙең бурысы. Бындай __штәрҙә уҡыусыларҙың да ҡатнашыуы мотлаҡ.

*(Н. Мусин)*

**бурыс** — долг  
**ау** — сеть  
**мотлаҡ** — обязательно  
**иҫәпһеҙ ҡырҡыу** — рубить без счета  
**саралар күреү** — принимать меры  
**һунар итеү** — охотиться

1. Тәбиғәтте һаҡлау буйынса һеҙҙең класс, мәктәп, ҡала (район) ниндәй саралар күрә?
2. Тема буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар бирегеҙ.
3. *Тәбиғәт* һүҙе менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

**11. II.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Яҙылғандарға өҫтәп, нимәләр әйтер инегеҙ?

Кешегә һәм тереклеккә тәбиғәтһеҙ йәшәү юҡ. Тәбиғәт — ул йәшәү, хеҙмәт, шиғриәт, бөтә нәмәнең нигеҙе. Тәбиғәт — ул һулаған һауабыҙ, эскән һыуыбыҙ, беҙҙе туйындырған тупрағыбыҙ. Шул тупраҡта үҫкән ағастар, емештәр, һоҡланғыс гөл-сәскәләр, төрлө-төрлө ҡоштар, йәнлектәр... *(С. Кулибай)*

**12.** Төрлө сығанаҡтар ҡулланып, «Башҡортостан тәбиғәте» темаһы буйынса проект эше ҡороғоҙ.

**13.** Тексты тасуири уҡығыҙ, төп фекерен аңлатығыҙ һәм ул фекерҙе дауам итегеҙ. Текстҡа исем бирегеҙ.

Алыҫ сәйәхәттән ҡайтып киләм. Түш кеҫәмдә бер семтем тупраҡ. Уны миңә юлға сығыр алдынан әсәйем биргәйне:

— Ал, улым. Тыуған тупраҡ — изге ул, юлда үҙеңде бәлә-ҡазаларҙан һаҡлар, һағыштарыңды таратыр, күңелеңде йыуатыр, ауырлыҡтарҙы еңергә өйрәтер, — тигәйне.

Эйе, донъяла йәшәүҙең оло мәғәнәһе — тыуған ереңде ихлас яратыу, үҙеңде уның ысын улы итеп тойоу ул.

Тыуған ер! Унан да ҡәҙерлерәк ни бар тағы был донъяла! *(Р. Ханнанов)*

**сәйәхәт** — путешествие
**семтем** — щепотка
**изге** — святой
**тойоу** — чувствовать
**ихлас** — от души
**бәлә-ҡаза** — беда

**14.** Тексты уҡығыҙ. Нөктәләр урынына кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. Тексты дауам итегеҙ.

Урман — беҙҙең милли ..., ғорурлығыбыҙ. ... 40 процент самаһы ере ... менән ҡапланған. Шулай ҙа ул төпһөҙ байлыҡ түгел. ... урмандарҙың ... ҡырҡып бөтөрөлгән. Шуға ла бөгөн ағас ... — беҙҙең бурыс. *(Н. Мусин)*

**төпһөҙ** — *зд.*: бесконечный
**самаһы** — около

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *яртыһы, Башҡортостандың, ултыртыу, беҙҙең, байлығыбыҙ, урман.*

*Бурыс, урман, ер* һүҙҙәрен ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**15.** Диалогтарҙы уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ.

— Ҡайҙа китеп бараһың, Дамир?

— Яланға, атайым менән ағайым янына. Төшкө аш алып барам. Улар тамаҡ ялғап алғансы, мин хатта бесән сабам әле!

— Ки-и-ит! Бесән саба беләһеңме? Көсөң етәме ни?

— Ауырыраҡ та, өйрәнә торам, үҫермен әле.

— Ә һине кем өйрәтте?

— Атайым.

— Ҡара әле, Дамир, ә ул мине лә өйрәтә алмаҫмы икән? Минең дә бесән сапҡым килә.

— Ә һиңә нимәгә ул?! Һин бит ҡала егете.

— Ҡыҙыҡ бит. Үҫә төшкәс, өләсәйемә ярҙам итермен.
— Була ул. Әйҙә минең менән.

1. Ҡайһы ваҡытты «Бесән өҫтө» тиҙәр? Ул нисек үтә?
2. Был диалогка тура килгән ниндәй мәҡәлдәр бар?
3. Ҡылым тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ. Текстан ҡылымдарҙы табып яҙығыҙ, заманын билдәләгеҙ.

**16.** Өҙөктө уҡығыҙ, төп фекерен аңлатығыҙ. Шул юлдарҙы күсереп яҙығыҙ.

Матур йәйге көн. Зәлифә умартальыкта эшләгән атаһы янына килде.

— Ә-ә-ә, килдеңме, бал ҡорто, — тине Ғәлләм ағай ҡыҙына.

— Атай, нишләп мине һәр ваҡыт бал ҡорто тиһең? — тип һораны ҡыҙ.



— Беләһеңме, ҡыҙым, был насар, кешене кәмһетә торған һүҙ түгел. Ана, сәскәгә ҡунған бал ҡорттары насармы ни? Ниндәй тырыш улар!.. Юҡһа кәрәҙҙәр буш ҡалыр ине. Ә балы булмаған кәрәҙҙең, белемһеҙ ҡалған кешенең бер файҙаһы юҡ, — тип аңлатты Ғәлләм ағай. *(«Аманат» журналынан)*

**17.** Һүрәттәрҙе иғтибар менән ҡарағыҙ. План төҙөп, ҡыҫҡа ғына хикәйә яҙығыҙ.



**18.** Тәҡдим ителгән тематик һүҙҙәр менән текст төҙөгөҙ. Уға исем бирегеҙ.

тыуған яҡ, бейек-бейек, күл, балыҡ, йылға, үҫә, тау, ҡош, сәскә, үлән, урман, тыуған тупраҡ, һаҡларға, йөҙә, тәбиғәт, матур, төрлө-төрлө, һоҡланғыс, саф һауа, ҡәҙерле, ғорурлыҡ, кешеләр, тыуған ер, яратыу

**19.** Тексты уҡығыҙ. Бал ҡорттарының файҙаһы тураһында һөйләгеҙ.

## Бал ҡорто

Бал ҡорто алдында кеше баш эйергә тейеш. Ул бит беҙгә үҙенең составы һәм дауалау көсө буйынса һирәк осрай торған уникаль продукт бирә.

Балда организмдың нормаль эшмәкәрлеге өсөн кәрәкле бөтә элементтар бар. Ауырыуҙы дауалар өсөн балдың тәүлек дозаһы кәүҙә ауырлығының бер килограмына бер грамм тәшкил итә. Шул уҡ дозала кәрәҙле бал файҙаланыу яҡшыраҡ. *(«Башҡортостан» газетаһынан)*

**эшмәкәрлек** — деятельность
**һирәк** — редко
**кәрәҙле бал** — сотовый мед
**дауалар өсөн** — для лечения
**тәүлек дозаһы** — суточная доза

1. Башҡорт балы тураһында тағы ла нимәләр беләһегеҙ?
2. Бал ҡортоноң һүрәтен төшөрөгөҙ.

**20.** Тексты уҡығыҙ. Текст исемендәге һорауға яуап бирегеҙ.

## Кто прав?

Шел август месяц. Погода чудесная. Ильгиз и его брат Ильдар с родителями на весь день выехали на отдых. Остановились у реки. Рядом лес. Вдали краснеют гроздья калины и рябины. Хорошо!

Вкусен обед у реки. Еще приятнее самим готовить его на костре. За это дело взялись мальчики. Вскоре послышались удары топора.

— Что вы там рубите? — спросил отец.

— Куст орешника, — доложил Ильгиз.

— А ну, скажите: что можно и что нельзя рубить в лесу?

— Для костра лучше всего сухие дрова. Но здесь их не видно. Придется брать орешник, калину и другие кустарники. Их здесь много, да и рубить легче, — рассудил Ильгиз.

— Нет, — возразил Ильдар. — Лучше срубить одно большое дерево, чем много кустарников. Ведь для костра их сколько надо! Давайте срубим вон ту высокую березу, — предложил он.

Спор продолжался. Каждый доказывал свое. Отец слушал молча.

— Папа, кто из нас прав? — спросил Ильгиз.

— Никто из вас не прав, — ответил отец и объяснил, почему нельзя рубить в лесу деревья и кустарники.

*(По Г. Муртазину)*

**гроздья калины** — балан тәлгәштәре

1. Текстың тулылығын булдырыу өсөн бирелгән тематик һүҙҙәрҙе башҡорт телендә яҙығыҙ.
2. Тексты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.
3. Тәржемә итегеҙ. Тәржемә иткәндә, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибенә иғтибар итегеҙ. Йөкмәткеһен башҡортса һөйләгеҙ.
4. Илгиз менән Илдар урынында һеҙ булһағыҙ, ни эшләр инегеҙ?
5. Нисек уйлайһығыҙ, малайҙарға атаһы нимәне аңлатты икән?

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

1) һөнәр, иген, хөрмәтле, баҫыу, тормош, хеҙмәт, оло, ҡәҙерле, эшмәкәрлек, йылға, бал ҡорто, мөһим, күл, һағыҙаҡ

2) наҙлап үҫтереү, тыуған тупраҡ (ер), оло бурыс, һунар итеү, балыҡ тотоу, егәрле бал ҡорто, бесән өҫтө, милли байлыҡ, бойҙай бөртөгө, иген игеү

## Ял минуттарында

**1.** Көләмәсте уҡығыҙ.

Әсәһе Булаттың күлдәген йыуғас:
— Улым, күлдәгеңде кибергә ҡояшҡа эл әле, — ти.
Булат сыға, ләкин бер аҙҙан, күлдәкте тотоп, кире инә.
— Ниңә элмәнең? — тип һорай әсәһе.
— Ҡояшҡа буйым етмәне, — тип яуап бирә Булат.

**2.** Шаярыуға ҡоролған халыҡ әкиәтен уҡығыҙ. Бер-берегеҙгә йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

### Һөйлә менән Һөйләмә

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән, ти. Уларҙың ике ҡыҙҙары булған икән: Һөйлә һәм Һөйләмә.

Бер көндө Һөйлә менән Һөйләмә йылғала кәмәлә йөҙөп йөрөйҙәр, ти. Ҡапыл көслө ел сыҡҡан һәм Һөйлә кәмәнән һыуға ҡолаған. Кәмәлә кем ҡалған?
— Һөйләмә.
— Ярай, улайһа һөйләмәйем.

**3.** Ребусты сисегеҙ. Килеп сыҡҡан яҙыу нисек атала?



**Беләһегеҙме?**

**Каникул**

Был һүҙ һәр уҡыусыла шатлыҡ тойғоһо уята. Ә «каникул» һүҙенең барлыҡҡа килеүе бигерәк тә ҡыҙыҡлы. Ул «канис» тигән латин һүҙенән алынған. Римляндар Сириус йондоҙон «Каникула» тип йөрөткән. Офоҡта «Каникула» — Сириус йондоҙо күренә башлау менән, Римда йәйге эҫе көндәр башлана икән. Шуға уҡыуҙар туҡталып торған көндәрҙе «каникул» тип атағандарҙыр инде. *(«Мәктәп календары»нан)*

**тип йөрөткән** — *зд.*: называли
**туҡталып торған** — приостанавливались

# БАШҠОРТОСТАН БУЙЛАП СӘЙӘХӘТ

## Башҡортостан

Донъяла төрлө илдәр бар. Бер ил үҙенең тауҙары, икенсеһе үҙенең далалары, өсөнсөһө һыуҙары, дүртенсеһе урмандары менән дан тота. Ә Башҡортостанда шуларҙың барыһы ла бар.

Урал... Был атаманы әйтеү менән, күҙ алдына әкиәт батшаһының алтын һарайына оҡшаған бейек ҡаялар, иге-сиге булмаған урмандар, таштан ташҡа һикереп аҡҡан һалҡын шишмәләр, сәскәле аҡландар, таҫма-таҫма булып һуҙылған тау юлдары килеп баҫа.

Урал... Унан көс алып, урау-урау юлдар үтеп, беҙҙең данлыҡлы Ағиҙелебеҙ, тынғыһыҙ, етеҙ Ҡариҙелебеҙ киң далаларға ашыға.

Уралдың йөрәгенә күҙ һалайыҡ. Ниндәй генә хазиналар юҡ унда! Алтын һәм баҡыр, тимер һәм аҫыл таштар, нефть һәм күмер...

Шуларҙың бөтәһе лә беҙҙең Башҡортостаныбыҙ бит.

*(М. Кәрим)*



**дала** — степь **иге-сиге булмаған** — бескрайний
**етеҙ** — ловкий **тасма** — лента

1. Урал тауҙарын картанан табып күрһәтегеҙ.
2. Башҡортостан нимә менән дан тота?
3. Текста яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табығыҙ, уларҙың яҙылышын аңлатығыҙ. Алфавит тәртибе буйынса күсереп яҙығыҙ.
4. Мостай Кәримдең ниндәй әҫәрҙәрен уҡығанығыҙ бар?
5. Һеҙ йәшәгән төбәктә ниндәй күл-йылғалар, тау-ҡаялар, иҫтәлекле урындар бар?

**1.** Тәҡдим ителгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөгөҙ һәм яҙығыҙ.

1. Башҡортостан, еребеҙ, гүзәл, беҙҙең, тыуған.
2. Матур, иҫ киткес, уның, тәбиғәте.
3. Яратабыҙ, ата-бабалар, төйәген, беҙ.
4. Тырыш хеҙмәт, ҡыуандырырбыҙ, менән, Тыуған илебеҙҙе.

**2.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Был шиғыр һеҙҙә ниндәй хистәр уятты?

## Урал

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы
Ата-олатайҙарҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап, ҡорбан булған,
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Ай Уралым, һинән ҡырҡып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,
Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.
Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ.

мәшһүр
эшмәкәрлек
бурыс
сәйәхәт

Күгәреп ятҡан Урал тауы —
Ете ырыу — илдең төйәге.
Ирек яулап үлгән ата-олатайҙарҙың
Шунда ята изге һөйәге.

**ҡорбан булған** — погибли  **йән** — душа
**ҡан** — кровь  **йәл** — жаль

1. Шиғырҙың төп фекерен билдәләгеҙ.
2. *«Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,*
   *Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары»* тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
3. Һеҙ башҡорт халҡының ниндәй батырҙарын беләһегеҙ? Береһе тураһында тулы итеп һөйләргә әҙерләнегеҙ.
4. Урал батыр, Урал тауы тураһында ниндәй легендалар беләһегеҙ?
5. Йырҙың ике строфаһын һайлап ятлағыҙ.

**Беләһегеҙме?**

«Урал» халыҡ йыры (көйө) — башҡорт халҡының милли гимны. Борон мәшһүр «Урал» йыры «Ете ырыу» исеме менән таралған булған.

**3.** Яңғыҙлыҡ исемдәр тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ. Бирелгән һүҙҙәр менән, яңғыҙлыҡ исемдәр ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

йылға, уҡыйым, тау, алдым, күл, ғорурланам, ҡала, яҙам

**4.** «Аҡбуҙат», «Аманат» журналдары тураһында һөйләгеҙ. Унда ниндәй рубрикалар бар? Үҙегеҙ журналға мәҡәлә яҙып ҡарағыҙ.

**5.** Һеҙгә башҡа республикала йәшәгән туғандарығыҙ килгән, ти. Уларҙың һеҙҙең йәштәге улы (ҡыҙы) бар. Ул һеҙҙән Башҡортостандың үткәне һәм хәҙергеһе тураһында һораша. Тәҡдим ителгән диалог шул турала. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе яҙып алығыҙ. Яҙылышын аңлатығыҙ (ҡағиҙәнең ҡайһы пунктына тура килә — уҡып ишеттерегеҙ). Йәйәләрҙе асығыҙ. Һүҙ ҙур йәки бәләкәй хәреф менән яҙыламы? Дөрөҫ яҙығыҙ.

— Башҡортостан (Рр)еспубликаһының баш ҡалаһы нисек атала?

— Башҡортостандың баш ҡалаһы — (Өө)фө.

— Өфө ҡалаһындағы (Сс)алауат Юлаев һәйкәленең авторы кем?

— Һәйкәлдең авторы — (Сс)кульптор Сосланбәк Тавасиев, архитекторы — И. Ғәйнетдинов.

— Республиканың иң бейек тау түбәләре нисек атала?

— (Яя)мантау, (Ии)рәмәл.

— Башҡортостанда ниндәй шифаханалар бар?

— Башҡортостанда (Йй)оматау, (Яя)нғантау, (Кк)расноусол, (Яя)ктыкүл, (Шш)афран, (Чч)ехов шифаханалары бар.

**?** 1. Текстағы географик атамаларҙы картанан күрһәтегеҙ.
2. Диалогты дауам итегеҙ.

**6.** Ауылығыҙҙағы (ҡалағыҙҙағы) урам атамаларын алфавит тәртибендә яҙығыҙ.



*Рәми Ғарипов (1932—1977) — Башҡортостандың халыҡ шағиры. Ул Салауат районы Арҡауыл ауылында тыуған. Бөтә тормошон туған тел, рух, милләт яҙмышына арнаған. Шағирҙың исеме Өфөләге үҙе уҡыған 1-се республика башҡорт гимназия-интернатына бирелгән.*

*Рәми Ғарипов — Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты.*

## Урал йөрәге

Урал күкрәгендә йөрәк кеүек
Башҡортостан — тыуған илкәйем.
Шул йөрәктең киң тамыры булып
Күкһелләнә Ағиҙелкәйем.

Йөрәгем, тим, изге төйәгемде, —
Хаҡ яҙмышым шунда ташланған,
Шунда минең бәхет таңым атҡан,
Шунда миңә Ватан башланған!

1. Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнегеҙ.
2. Шиғыр ни өсөн «Урал йөрәге» тип атала?
3. Шағир беҙгә нимә әйтергә теләгән?
4. Яттан яҙырға әҙерләнегеҙ.

**7. I.** Тексты күсереп яҙығыҙ. Уның төп фекерен билдәләгеҙ.

Дәүләтселек үҫһен өсөн күп көс, тырышлыҡ һалаһы бар әле. Бының өсөн белемле, бай рухлы кешеләр кәрәк. Балалар шуны аңлаһын ине: илен яратып үҫкән кеше генә кеше була ала. Илебеҙгә ҙур шәхестәр кәрәк! Тик улар ғына, үҙ илен ҡәҙерләй белгәндәр генә, башҡаларҙы аңлай һәм ихтирам итә. *(Х. Назар)*

**рух** — духовность
**башҡа** — другой
**шәхес** — личность
**ихтирам итә** — уважает

1. *Бай рухлы ҙур шәхестәр* ниндәй була? Миҫалдар килтерегеҙ.
2. Автор һеҙгә еткерергә теләгән фекерҙе аңлатығыҙ.
3. Бер-берегеҙ менән фекер алышығыҙ.

**7. II.** Кем күберәк белә? Үҙ-үҙегеҙҙе тикшерегеҙ.

1. *Һандуғас* һүҙенән кем күберәк һүҙ яһар?
2. Уҡыусының тышҡы ҡиәфәтен тасуирлаған сифаттарҙы кем күберәк әйтер?
3. Уҡыусының эске матурлығын сағылдырған сифаттарҙы кем күберәк белә?

**8.** Тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Тексты өлөштәргә бүлегеҙ, һәр береһенә исем бирегеҙ. Тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

## Урал имәне

Башҡ__рт халҡы борон-борондан Уралда йәшәй. Ул ошо __рҙә имән кеүек тамырланған. Ҡайындар ҙа, й__кәләр ҙә үҫә янында. Ләкин еребеҙҙең төп ағасы — Урал имәне!






Башҡа халыҡтарҙыҡы ке___ек үк, башҡорт халҡының да төп терәге — ғәзиз ере. Хал___ҡ үҙ ерендә генә ирекле. Башҡорт халҡы үҙенең бөтә т___рихында азатлыҡ өсөн көрәшкән. Азатлыҡ юҡ икән, ил дә юҡ!

Бәхет бит был: ил___беҙ бар, ул — Башҡортостан. Бәхет бит был: дәүләтебеҙ бар, ул — республикабыҙ! Үҙ___беҙҙең яҙм___ш үҙебеҙҙең ҡул___быҙҙа тигән һүҙ был.

1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителде. Хәҙер беҙҙең үҙ байрағыбыҙ, үҙ гербыбыҙ, үҙ гимныбыҙ бар.

*(Х. Назар)*

**имән** — дуб
**дәүләт** — государство
**терәк** — опора
**яҙмыш** — судьба
**байраҡ** — флаг, знамя
**азатлыҡ** — свобода

1. Башҡортостан Республикаһы флагындағы төҫтәрҙең нимә аңлатҡанын һөйләгеҙ.
2. Башҡортостан Республикаһы гербының авторын беләһегеҙме?
3. Суверенитет беҙгә нимәләр бирҙе? Фекер алышығыҙ.
4. Текста яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табығыҙ, яһалышын аңлатығыҙ.

**9.** Бирелгән ҡылымдарҙан һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.

Өлгө: *йүгер — йүгереп барған* бала, *йүгереп йөрөгән бала;*
*уйла — уйлап ултырған уҡыусы, уйлап һөйләгән уҡыусы*

йырла, көл, уҡы, һөйлә, бейе, һикер, уйла

Өс һүҙбәйләнеш менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**10.** Тексты тасуири уҡығыҙ һәм күсереп яҙығыҙ.

Беҙҙең Ватаныбыҙ, иң ҙур байлығыбыҙ — Башҡортостан. Ниҙәр генә юҡ унда: нефть, тимер, алтын, баҡыр... Уңыш йыйғанда, иген өйөмдәре тау кеүек ята. Болондарҙа мал-тыуар утлап йөрөй. Бай ил, гүзәл ил! Болоттарға ашҡан ҡаялар ҙа, өҫтәл һымаҡ тигеҙ далалар ҙа, ҡараптар йөҙгән йылғалар ҙа, дауылда диңгеҙҙәй ярһыған күлдәр ҙә бар унда. *(Б. Рафиков)*

**мал-тыуар** — домашний скот
**утлау** — пастись

1. Өҙөктән авторҙың тыуған иленә булған ниндәй мөнәсәбәтен күрәбеҙ?
2. Тексттың йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
3. Тексты нисек дауам итерһегеҙ? Һөйләгеҙ.

**11.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Ер йөҙөндә 30 меңгә яҡын һөнәр иҫәпләнгәнен беләһегеҙме?
2. Урмансы һөнәре тураһында нимә беләһегеҙ?
3. Һеҙ ҡайһы һөнәрҙе иң кәрәклеһе тип уйлайһығыҙ? Ни өсөн? Фекерегеҙҙе иҫбат итегеҙ.

**12.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

## Арҡайым

Яңыраҡ, Сибайҙан алыҫ түгел, бөтә донъяға билдәле булған Арҡайым тигән ҡаласыҡ табылды. Ул беҙҙең эраға тиклемге 17—16-сы быуаттарға ҡарай, был осорҙо бронза быуаты тип йөрөтәләр.

Арҡайым ағас менән балсыҡтан һалынған булған. Бик күп ваҡыт үтһә лә, уның эҙҙәре асыҡ һаҡланған. Боронғо төҙөүселәр алдан уйлап, план ҡороп эшләгән. Йорттар үҙәктәге төп майҙан тирәләй урынлашҡан. Икенсе түңәрәктә дошмандан һаҡланыр өсөн нығытмалар ҡоролған.

Боронғо төҙөүселәр металл ҡойор өсөн мейестәр ҙә һалған. Улары өсөнсө түңәрәктең эске яғында.

Арҡайымда йәшәгән халыҡ иген иккән, балсыҡ һауыттар яһаған, ике тәгәрмәсле еңел арба егеп йөрөгән, уҡ һәм йәйә менән ҡоралланған, йылҡы көткән, металл иретеү мейестәрендә эшләгән. Металды донъяның бөтә тарафтарына һатҡандар. Бик аҡыллы кешеләр йәшәгән Арҡайымда: улар Ерҙең шар кеүек булғанын, уның Ҡояш тирәләй әйләнгәнен дә белгән, хатта Ҡояш — Ай обсерваторияһы ла төҙөгәндәр.

Ағас юнып, көнкүреш әйберҙәре яһағандар. Ғалимдар Арҡайымда башҡорт ҡурайына оҡшаған «дудочка»лар ҙа тапҡан. Тимәк, ял минуттарында боронғо кешеләр ҡурайҙа — «дудочка»ла уйнаған.

Тик шуныһы аңлашылмай: ниңә кешеләр был ҡаланы ташлап киткән икән? Аҙаҡтан кемдәрҙер уны ут төртөп яндырған.

Бына шундай һорауҙарға яуап эҙләй был ҡаласыҡта эшләгән ғалимдар. Асыштар алда әле. *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

**металл ҡойор өсөн** — для литья металла
**ғалим** — ученый
**тирәләй** — вокруг
**үҙәк** — центр
**асыҡ һаҡланған** — хорошо сохранился
**ҡаласыҡ** — городок, городище
**эҙ** — след
**нығытма** — укрепление
**йәйә** — лук
**Ҡояш тирәләй** — вокруг Солнца
**тәгәрмәс** — колесо
**йылҡы** — конь, лошадь
**һатҡандар** — продавали
**юныу** — тесать топором
**көнкүреш** — обиход, бытовой
**яндырған** — сожгли
**уҡ** — стрела

?

1. Арҡайым ҡаласығы ниндәй осорға ҡарай? Ул ниндәй материалдан төҙөлгән?
2. Боронғо ҡаласыҡ — Арҡайымды һеҙ ҡайһылай итеп күҙ алдына килтерҙегеҙ?
3. «Ҡаласыҡтың бер көнө», «Металл ҡойоусыларҙың (йәки ағас юныусыларҙың) бер көнө», «Ҡатын-ҡыҙҙарҙың бер көнө» тигән темаларҙың береһенә ҡыҫҡа хикәйә төҙөгөҙ.
4. Нисек уйлайһығыҙ, ниңә Арҡайымдан халыҡ киткән икән?
5. Арҡайым тураһында тағы ла нимәләр беләһегеҙ?

6. Арҡайымда булғанығыҙ бармы?
7. Тексты өлөштәргә бүлегеҙ һәм исем бирегеҙ.

**13.** Һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ.

тыуған ер, тәбиғәт, боронғо ҡала, халыҡ, тыныс тормош, быуат, ата-бабалар, быуындан быуынға

**14.** Өҫтәлмә сығанаҡтарҙан Л. Н. Толстойҙың Башҡортостанда ҡымыҙ менән дауаланыуы тураһында мәғлүмәт туплағыҙ һәм картина буйынса эшләгеҙ.

*Бөйөк рус яҙыусыһы Лев Николаевич Толстой (1828—1910) башҡорттарҙа ҡымыҙ эсеп дауалана. Ул: «Башҡорттар байлыҡ йыймай, шуның өсөн үҙ-ара талаш юҡ уларҙа», — тигән һығымта яһай.*



«Лев Толстой башҡорт далаһында». Ә. Арыҫланов картинаһы.

**15.** Тексты уҡығыҙ. Тәржемә итегеҙ. «Тыуған ил ул...» һүҙҙәренән башлап ятлағыҙ. Тексттың төп фекерен аңлатығыҙ.

## Тыуған ил

Ҡайҙан башлана һуң Тыуған ил?! Ниҙән башлана һуң ул Тыуған ил?!

Бәләкәй саҡта ла, ҙурайғас та, ҡартайғас та кешеләр ошо һорауға яуап эҙләй. Ә яуап бик тә ябай — Тыуған ил ул һинең үҙеңдән, һинең өйөңдән, атайың менән әсәйеңдән, олатайың менән өләсәйеңдән, күрше йорттарҙа йәшәгән тиҫтерҙәреңдән, үҙең уҡыған мәктәп, ҡаланан йәки райондан, республиканан башлана.

Ҡошҡа осор өсөн күк, балыҡҡа йөҙөр өсөн йылға, үләнгә үҫер өсөн тупраҡ нисек кәрәк булһа, кешегә йәшәр өсөн Тыуған ил шулай кәрәк!

**16.** Һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе һүҙлектән табығыҙ. Уларҙы ҡулланып, бәйләнешле текст төҙөгөҙ.

1) донъя, һарай, Ағиҙел, Ҡариҙел, хазина, тәбиғәт, оҡшаған, хеҙмәт, Ватан, ваҡыт, мәшһүр, өлөш, ырыу, шифахана, ғорур, намыҫ, яза, Арҡайым, ҡәлғә, мейес, мәргәнлек, шәхес, Ер-әсә, ырыу

2) һалҡын шишмәләр, әкиәт батшалығы, хазиналар донъяһы, ҡорбан булған, мәшһүр йыр, сикһеҙ ғорурланыу, тоғро дуҫтар, ғәзиз ер, ҡәҙерләй белеү, баш күтәреү, тәбиғәт һәйкәлдәре, иҫ киткес, ҡымыҙ менән дауаланыу

**17.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Йөкмәткеһен нисек аңлайһығыҙ? Һөйләгеҙ.

Эй Уралым, ғәзиз
еркәйем,
Ысынлап та, булһам
ҡолон-тай,
Кешнәп аунар инем
иңеңдә.
Ҡыяҡ ярған саҡта
йәш ҡурай,
Ҡурай моңдарына тулышып,
Ҡалыр инем йәшел ҡыяҡта.

*(Й. Солтанов)*

**18.** Тексты уҡығыҙ.

Загир Исмагилов (1917—2003) родился в селе Серменево Белорецкого района в семье крестьянина. В середине 30-х годов был актером Башкирского государственного театра драмы. Окончил теоретико-композиторский факультет Московской государственной консерватории. Долгое время работал председателем Союза композиторов Башкортостана, ректором Уфимского государственного института искусств (ныне Академия искусств, названная его именем).

Песни, созданные композитором Загиром Исмагиловым на слова Рашита Нигмати, Баязита Бикбая, Мустая Карима, Назара Наджми, Абдулхака Игебаева и других башкирских поэтов, стали подлинно народными. Созданные им сочинения составляют золотой фонд башкирской музыкальной культуры.

**?**

1. Тексты тәржемә итегеҙ. Башҡорт телендә Заһир Исмәғилев тураһында һөйләгеҙ.
2. Заһир Исмәғилев тураһында өҫтәп нимәләр әйтә алаһығыҙ? Уның ниндәй йырҙарын беләһегеҙ?

**П**

**19.** «Тыуған ерем — Башҡортостан» темаһы буйынса проект эше ҡорорғоҙ. Өҫтәлмә материал ҡулланығыҙ.

**20.** Бирелгән һүҙҙәр эргәһенә кәрәкле ҡылым ҡуйып, һүҙбәйләнеш төҙөгөҙ. Ике һөйләм уйлап яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| барабан | гармун |
| скрипка | ҡурай |
| флейта | думбыра |
| ҡумыҙ | борғо |

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *сиртеү, һуғыу, тартыу, уйнау.*

# СПОРТ. СПОРТ КӘРӘК-ЯРАҠТАРЫ

**1.** Тексты тасуири уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ.

Спорт — ул һаулыҡ, көс, матурлыҡ. «Спорт» һүҙен белмәгән кеше юҡтыр. Инглиз теленән ингән был һүҙ «уйын» тигәнде аңлата.

Әгәр иҫән-һау һәм матур булғың килһә, спорт менән шөғөлләν. Спорт төрлө яҡтан сыныҡтыра. Тыуған илебеҙҙе һаҡлар һәм үҫтерер өсөн көслө, сыҙамлы кешеләр кәрәк.

**иҫән-һау** — здоровый
**шөғөлләν** — занимайся
**сыҙамлы** — выносливый

1. Һеҙ спорт менән шөғөлләнәһегеҙме? Ниндәй төрөн нығыраҡ яратаһығыҙ? Һөйләгеҙ.
2. Башҡортостандан сыҡҡан билдәле спортсыларҙан кемдәрҙе беләһегеҙ?

**2.** Текстағы тыныш билдәләренә иғтибар итеп уҡығыҙ.

## Беҙҙең ғаилә — ярышта

Мәктәптә ғаиләләр араһында ярыш булыуы тураһында иғлан күргәс, әсәйемде, атайымды һәм ҡустымды унда ҡатнашырға күндерҙем. Беҙ көн дә бергәләп мәктәптең спорт залына күнекмәләргә йөрөнөк, үҙебеҙҙең командаға исем менән девиз таптыҡ. Ҡаршы командаларға бүләк итеп таҫтамал һайланыҡ. Уны тапшырғанда: «Еңһәгеҙ — тирегеҙҙе, еңелһәгеҙ йәшегеҙҙе һөртөрһөгөҙ», — тип әйтергә булдыҡ.

Бына ярыш көнө килеп етте. Зал матур биҙәлгән. «Спорт һөйөүселәргә сәләм!», «Мәктәп ярыштарынан — Олимпия уйындарына!» тигән яҙыуҙар ҙа бар.

Командалар бер-береһен сәләмләгәндән һуң, ярыштар башланды. Унда тоҡ кейеп йүгерергә лә, алға ҡуйылған барьерҙарҙы етеҙ үтеп, арҡаңа ҡустыңды йөкмәп ярышырға ла, тупты баскетбол кәрзиненә тәҙ бәрергә лә, тағы әллә күпме ҡыҙыҡлы уйындар үтергә кәрәк булды. Беҙҙең



әҙерлек бушҡа үтмәгән икән — бөтә төр ярыштарҙа ла ғаиләбеҙ алда барҙы.

Бына беҙҙең команданы еңеүсе тип иғлан иттеләр! Бүләккә — күн туп менән торт! Барыбыҙҙан да нығыраҡ ҡустым ҡыуанды, ә мин үҙемде мәктәп ярышында ғына түгел, Олимпия еңеүсеһе кеүек тойҙом. Атайым менән әсәйем арҡамдан һөйөп: «Беҙҙең капитаныбыҙ шәп, шуға ла еңдек!» — тигәс, үҫеп киткәндәй булдым. *(«Мәктәп календары»нан)*

**күндерҙем** — уговорил
**йөкмәү** — взвалить на спину
**йәш** — слезы
**бушҡа үтмәгән** — не прошли даром
**күнекмәләр** — тренировки
**иғлан итеү** — объявить
**төҙ бәрергә** — кидать метко
**шәп** — хороший

1. Текст буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар бирегеҙ.
2. Тексты өлөштәргә бүлегеҙ, планын төҙөгөҙ һәм уның буйынса һөйләгеҙ.
3. Һеҙҙең мәктәптә ниндәй ярыштар үткәрелә? Берәй ярыш тураһында һөйләгеҙ.

**3.** Диалогтарҙы дауам итегеҙ.

1. — Мин йөҙөү секцияһына яҙылырға килдем. Миңә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?

— ...

— ...

2. Марат, һин хоккейға беренсе кластан алып йөрөйһөң. Әйт әле, ул һиңә нимәһе менән оҡшай?

— ...

— ...

3. Сания, «Һаулығың — байлығың» тигән сығышты әйҙә икәү бергә әҙерләйек.

— ...

— ...

**4.** Бирелгән һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен «Башҡорт теленең һүҙлеге» ярҙамында аңлатығыҙ.

юл, кино, аҡса, ҡунаҡ, ваҡыт, спорт, түңәрәк

**5.** Тексты уҡығыҙ, исем бирегеҙ. Беренсе абзацты һөйләмдәргә бүлегеҙ һәм тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.

Бөтә кеше лә бәхетле һау матур булыр өсөн тыуған әммә беҙ йәш саҡта һаулыҡтың да матурлыҡтың да ҡәҙерен белеп еткермәйбеҙ һаулығың булмаһа, йәшәүҙең йәме юғала.

Кешелекле һәм яҡшы мөнәсәбәттә булыу, иптәштәреңә, атай-әсәйеңә, үҙеңдән ололарға ярҙамсыл булыу — һаулыҡты һаҡлауҙа, ғүмерҙе оҙайтыуҙа иң беренсе шарт.

*(И. Мифтахова)*

**шарт** — условие
**һау булыр өсөн** — чтобы быть здоровым
**юғала** — исчезает, теряется
**ҡәҙерен белеү** — знать цену

Һаулыҡты һаҡлар өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?

**6.** Уҡығыҙ. Текста яҙылғандарҙан нимәләрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырырға тейешһегеҙ? Һөйләгеҙ.

13–15 йәшлек үҫмерҙәрҙең организмында ҡатмарлы физиологик үҙгәрештәр бара. Шуға күрә, киләсәктә шөғөлләнер өсөн спорт төрөн һайлағанда, врач менән кәңәшләшергә кәрәк.

Был йәштәге балаларға мәктәптә һәм спорт түңәрәктәрендә спорт менән ойошҡан рәүештә шөғөлләнеү бик яҡшы. Ҡыҫҡа ял итеү ваҡыттарын дөйөм үҫеш биргән күнекмәләр яһар өсөн файҙаланырға була. Спорт менән шөғөлләнеүселәргә иртәнге гимнастика кәрәкме һуң? Эйе, кәрәк. Ул һайлап алған спорт төрөнә һәм дөйөм үҫешкә ярҙам итеүсе күнегеүҙәрҙән торорға тейеш. *(«Мәктәп календары»нан)*

**үҫмер** — подросток
**кәңәшләшергә кәрәк** — необходимо посоветоваться
**ойошҡан рәүештә** — в организованной форме
**дөйөм үҫеш биргән** — дающие общее развитие
**һайлап алған** — выбранный
**үҫешкә ярҙам иткән** — помогающие развитию

**7.** Мәҡәлдәрҙе тасуири уҡығыҙ. Улар нимә тураһында?

1. Һаулығың — байлығың.
2. Байлыҡ башы — һаулыҡ.
3. Ауырымайынса — һаулыҡтың, ҡартаймайынса йәшлектең ҡәҙерен белмәҫһең.
4. Һаҡланған — һаулыҡҡа туйған.
5. Һөттә — һаулыҡ, майҙа — бәрәкәт, иттә — ҡеүәт.

**8.** Бирелгән һүҙҙәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә итегеҙ һәм хәтерҙә ҡалдырығыҙ. Улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

боксерские перчатки, гантели, очки, клюшка, кожаный мяч, очко, спортивная форма, ворота

**9.** Һүрәтте ҡарағыҙ. Хоккейсыларҙың спорт формаһы тураһында һөйләгеҙ.



**10.** Шиғырҙы ятлағыҙ.

## Беҙҙең катокта

Ялтыр боҙ шыжлай
Аяҡ аҫтында.
Шат йырҙар яңғырай
Алыҫ-алыҫта.
Ҡурҡытмай беҙҙе
Ҡышҡы һыуыҡ та.
Һәр саҡ күңелле
Беҙҙең катокта.

*(Н. Иҙелбай)*

**ялтыр боҙ** — блестящий лед
**аҫтында** — под
**ҡурҡытмай** — не пугает

**11.** Диалогты дауам итегеҙ.

— Һин ял көнө нимә эшләйһең?
— ...
— ...

**12.** Нөктәләр урынына кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, хикәйәне уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ. Үҙегеҙҙең иртәнге эштәрегеҙ тураһында һөйләгеҙ. Һеҙ өйҙә нимәләр эшләйһегеҙ?

Элек ... эшләй торған ... хәҙер инде Марат үҙе шәп башҡара. Көн дә ... елләтә, йоҡо урынын, бөтә ... йыйыштыра, көсө еткән эштәрҙә әсәһенә ... итә. Баштараҡ уға был ... күңелһеҙ, ялҡытҡыс тойола ине. Ләкин тора-бара күнегеп китте. Берәй эште эшләмәй ҡалһа, ул үҙен ниндәйҙер ҙур бурысты үтәмәгән кеүек хис итә.

Улында булған был ... үҙгәрештәр әсәһен бик ныҡ ҡыуандыра.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *иртәнсәк, булмәһен, эштәрҙе, әсәһе, эштәр, ярҙам, яҡшы, өйҙө.*

**башҡара, үтәй** — выполняет
**елләтә** — проветривает
**баштараҡ, башта** — вначале
**ялҡытҡыс тойолған** — казались утомительными
**күнегеп китте** — привык
**хис итә** — чувствует
**тора-бара** — постепенно, со временем

1. Марат иртәнсәк ниндәй эштәр башҡара? Яуапты дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.
2. Әсәһе Маратта ниндәй үҙгәрештәр күрә?
3. Марат ни өсөн үҙгәргән? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**13.** Диалогты уҡып сығығыҙ. Башҡортостандағы спортсыларҙан кемдәрҙе беләһегеҙ?

## Китапханала

— Һаумыһығыҙ.
— Хәйерле көн.
— Миңә Башҡортостандағы шашка уйыны торошо тураһында сығыш яһарға кәрәк ине. Зинһар, ярҙам итегеҙ әле.

— Мин һеҙгә «Спорт курьеры» тигән журналды уҡып сығырға кәңәш итәм. Журналдың был һанында Ишембай ҡалаһында спорт үҫеше тураһында яҙылған.

— Ә журналда шашка буйынса материал бармы?

— Бар. Ишембай ҡалаһы шашка буйынса Башҡортостанда ғына түгел, ә бөтә Рәсәйгә билдәле спортсылар тәрбиәләй. Унда Тамара Танһыҡҡужина хаҡында уҡый алаһығыҙ.

— Файҙалы мәғлүмәт өсөн рәхмәт. Журналды һеҙгә ҡасан тапшырырға?

— Бер аҙнанан.

— Һау булығыҙ.

**14.** Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

ял, уйын, еңеү, һыуыҡ, һыуыҡ көн, һаулыҡ, шөғөлләнеү, файҙалы кәңәштәр, ныҡлы һаулыҡ

**15.** Тексты уҡығыҙ. Ни өсөн футбол уйнарға кәрәк? Башҡортса һөйләгеҙ.

## Футбол

Футбол, пожалуй, самая распространенная игра с мячом. Ею одинаково увлекаются и в городе, и в деревне. Словом, всюду организованы занятия по футболу.

Хорошо организованные занятия по футболу, во-первых, благотворно влияют на здоровье, во-вторых, развивают у ребят быстроту и силу, в-третьих, воспитывают внимание и сообразительность, смелость и решительность, в-четвертых, формируют способность быстро ориентироваться, в-пятых, прививают чувство дружбы и коллективизма, в-шестых, повышают дисциплину.

Конечно, футбол — довольно сложная игра. Чтобы хорошо играть в футбол, необходимо в совершенстве владеть разнообразными техническими приемами.

**16.** Уйынды физкультура дәресендә, ял ваҡытында йәки экскурсияға сыҡҡанда уйнап ҡарағыҙ.

Башҡорт халҡында спортҡа һөйөү бәләкәйҙән һалына. Бер төрлө уйындар балаларҙы хеҙмәткә өйрәтһә, өлкәндәр тормошона әҙерләһә, икенселәре балаларҙа етеҙлек, иғтибарлыҡ, сослоҡ үҫтергән һәм физик тәрбиә биргән. Һеҙгә, уҡыусылар, шундай уйындарҙың береһен тәкдим итәбеҙ.

## Оялы күҙ бәйләш

Ҙур асыҡ майҙанда уйнайҙар. Күҙен бәйләр өсөн бер баланы һанашмаҡ менән һайлайҙар. Уның күҙен бәйләгәнсе, һәр кем үҙенә оя таба: тирә-яғын оя итеп һыҙып ҡуя. Һуңынан күҙе бәйләнгән кеше башҡаларҙы эҙләй башлай. Ул эҙләгәндә берәү ҙә ояһынан сығырға тейеш түгел. Эҙләүсе эҙләгәндә, оялағы кеше, ситкә сыҡмайынса, эйелеп-бөгөлөп ҡала. Эҙләүсе берәүһен тапһа, табылған кешенең исемен дә әйтергә тейеш.

Балалар күмәкләп ошолай ти:

— Буйың һинең зифа икән,
Күҙең-ҡашың ҡара икән.
Ҡуян кеүек боҫоп торған... —

тип туҡтап ҡалалар, ә эҙләүсе табылған кешенең исемен әйтә:

— Фатимаҡай, һин икән!

Әгәр ҙә исемен дөрөҫ әйтһә: «Күҙеңде ас», — тиҙәр. Дөрөҫ әйтә алмаһа: «Дөрөҫ түгел, дөрөҫ түгел», — тип ҡул сабалар. Әгәр эҙләүсе таныһа, хәҙер инде табылыусының күҙен бәйләйҙәр. Уйын шулай дауам итә.

**һалына** — закладывается
**сослоҡ** — ловкость, проворность
**майҙан** — площадка
**бәйләр өсөн** — для завязывания
**эҙләүсе** — искатель
**өлкәндәр тормошо** — взрослая жизнь
**етеҙлек** — быстрота
**күмәкләшеп** — все вместе
**һанашмаҡ** — считалка
**буйың** — *зд.*: твоя фигура
**таныһа** — если узнает

1. Уйындар тик күңел асыр өсөн генә кәрәкме? Улар балаларҙы нимәгә өйрәтә?

**17.** Үтелгәндәргә нигеҙләнеп, картина буйынса инша яҙығыҙ. План төҙөгөҙ.



«Иртә». Т. Яблонская картинаһы.

?

1. Картинала төп урынды кем алып тора? Ул ни эшләй? Ҡыҙҙың кәйефе менән иртәнге ҡояш араһында бәйләнеш бармы?
2. Бүлмә ниндәй? Унда нимәләр бар? Картинанан ҡыҙҙың ниндәй сифаттарын белә алабыҙ?
3. Картинанан сафлыҡ, матурлыҡ, таҙалыҡ бөркөлөп тора. Быны рәссам нисек бирә, ниндәй буяуҙар ҡуллана?

**18.** Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә итегеҙ, хәтерҙә ҡалдырығыҙ. Биш һөйләм төҙөгөҙ.

йөҙөү, саңғыла йөрөү, спартакиада үткәреү, ярыш ойоштороу, ҡотлауҙар, еңеүсе, күнекмәләр, төҙ атыу (мәргәнлектә ярышыу), трамплиндан һикереү, оҙонлоҡҡа (бейеклеккә) һикереү, милли көрәш, таҫтамал, ат сабыштары, арҡаға һалыу, матур фигуралар яһау, етеҙлек

**19.** Өҙөктө иғтибар менән уҡығыҙ. Унда ваҡиғалар эҙмә-эҙ бирелгәнме? План буйынса тексты үҙгәртегеҙ һәм һөйләгеҙ.

| |
|---|
| үҫмер<br>кәңәш<br>майҙан<br>етеҙлек |

Шуға ла һыу инергә бармаҫҡа булды. Осоусы түҙемле булырға тейеш. Илдар икенсе көндө лә һыу инергә барманы. Теге малайҙың уйнарға сыҡҡанын көтөп йөрөнө.

Салт аяҙ эҫе көн. Иртә булһа ла, ҡояш ҡыҙҙырырға тотонған. Күлгә һыу инергә барыр өсөн бынан да матур көн таба алмаҫһың.

Илдар күлгә китергә йыйынды. Тап шул саҡ күршеләге йортҡа бер машина килеп туҡтаны. Унан осоусы кейемендә бер офицер килеп сыҡты. Янында улы ла бар. Осоусы булырға хыялланған Илдар: «Был малай менән дуҫлашырға кәрәк. Бөгөн үк танышырға! Бергәләп самолетта осорға өйрәнербеҙ», — тип уйланы. *(Ф. Мәксүтов)*

**осоусы** — летчик, пилот
**осоусы кейемендә** — в форме летчика

## План

1. Аяҙ көн.
2. Офицер һәм уның улы.
3. Илдар һыу инергә барманы.

**20.** Тексты уҡығыҙ. Һеҙ ниндәй милли уйындар беләһегеҙ? Һөйләгеҙ.

## Милли уйындар

Халҡыбыҙҙа физик культура тарихы үткән быуаттар төпкөлөнә барып тоташа. Физик күнегеүҙәр, уйындар, күңел асыуҙар элек-электән махсус рәүештә лә ойошторолған, һәр төрлө байрам-йыйындарҙың мотлаҡ бер өлөшө лә булып торған. Көс, йылғырлыҡ, төрлө күнекмәләрҙә оҫталыҡ халыҡ араһында юғары баһаланып, тап шул сифаттары булғандар абруйлы ла, ихтирамлы ла һаналған.

Милли спорт һәм уйындар күпселектә кешене шәхес итеп тәрбиәләүгә ҡоролған. Улар, бер яҡтан, организмды сыныҡтырырға булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, берҙәмлек тойғоһо ла тәрбиәләгән. Шуның өсөн дә күпселек ярыштар күмәк ҡатнашыусыларға иҫәпләнгән.

Милли уйындарҙың күбеһе ат менән бәйле. Боронғо йола буйынса, һәр ир бала ете йәшендә һыбай йөрөй алырға тейеш булған. Халҡыбыҙҙа ат менән бәйле бәйге, ауҙарыш, күк бүре, ат егеү, ат уйнатыу, тау ҡырҡыу ярыштары билдәле.

Шулай уҡ көс һынашыу, таҫыллыҡ, сослоҡ, тапҡырлыҡ талап иткән уйындар ҙа киң таралған. *(Р. Әйүпов)*

**?** 1. Ниндәй сифаттары булғандар элек абруйлы ла, ихтирамлы ла һаналған?
2. Милли уйындар ни өсөн әһәмиәтле?
3. Милли уйындарҙың күбеһе нимәгә бәйле?
4. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең тәржемәһен һүҙлектән табығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**21.** Нөктәләр урынына белешмәнән кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, тексты уҡығыҙ. Һөйләгеҙ.

## Иппотерапия

Бөгөн медицинала «иппотерапия» тигән төшөнсә ... : был кеше күңелен, эске донъяһын ... менән аралашыу аша дауалау икән. Ә ... халҡында был дауалау быуаттар

төпкөлөнән килә, тимәк, ат менән дуҫ булған ... «ҡара күңелле» була алмай.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *башҡорт, бар, ат, кеше.*

? 1. Нимә ул иппотерапия? Һеҙ атта һыбай йөрөй беләһегеҙме?
2. Башҡорт аты тураһында нимәләр беләһегеҙ?

П **22.** «Һаулыҡ — ҙур байлыҡ» темаһы буйынса проект эше ҡороғоҙ.

**23.** Өҙөктө уҡығыҙ.

Һабантуй байрамдарын бөйөк тәнҡитсе һәм публицист Н. А. Добролюбов боронғо грэктарҙың Олимпия уйындары менән сағыштыра: «Жаль, что никто из поклонников национальной греческой гимнастики, за неимением живого примера в Греции, не съездит к нам в киргизские степи и Башкортостан. Там гимнастика процветает, своего рода Олимпийские игры с борьбой и лазаньем на шесты и бегом взапуски повторяются периодически; подвиги отличившихся воспеваются степными Пиндарами, и во славу их звучат туземные барбитоны и флейты, чебызги и кураи».

? 1. Н. А. Добролюбов һабантуй байрамын нимә менән сағыштыра?
2. Һабантуй йәки башҡа төр башҡорт уйындары тураһында тағы кемдәрҙең әҫәрҙәрен уҡығанығыҙ бар?

**24.** Ҡотлауҙы уҡығыҙ. Үҙегеҙ ҙә шундай ҡотлауҙар яҙығыҙ.




**аҡыллы** — умный (-ой)
**алсаҡ** — приветливый
**булып ҡал** — оставайся
**дауам итһен** — пусть продолжится

**25.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

Буранлы ҡыш етте. Бөтә ерҙе мамыҡ кеүек ап-аҡ ҡар ҡапланы. Урмандағы кейектәргә һәм ҡоштарға ауыр көндәр килде.

Ҡышын айыу менән терпе өңдәрендә йоҡлай. Төлкө, бүре, аҙыҡ эҙләп, урман һәм ҡырҙарҙа йөрөй. Ҡуянды дошмандарынан аҡ төҫө, оҙон ҡолағы, үткер күҙе һәм йүгерек аяғы һаҡлай. Мышы ҡышын ағас ҡайыры менән туҡлана, үлән, мүк соҡоп ашай. Ҡор, һуйыр ҡышты ҡар аҫтында үткәрә. Ҡыҙылтүш, ҡарабаш турғайҙар кеше йәшәгән ерҙәргә яҡыныраҡ килә. Иртәнән кискә тиклем урманда тумырҙҡа туҡылдауы ишетелә. *(«Мәктәп календары»нан)*

**?**

1. Текстағы аңлашылмаған һүҙҙәрҙе һүҙлектән ҡарап тәржемә итегеҙ.
2. Һорауҙарға яуап яҙығыҙ:
   а) Айыу менән терпе ҡышты нисек үткәрә?
   б) Төлкө, бүре нисек аҙыҡ таба?
   в) Ҡыш көнө ҡуян нисек йәшәй?
   г) Мышы ҡыш көнө нисек туҡлана?
   ғ) Ҡоштар ҡышты нисек үткәрә?

**26.** Бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

1. Спорт, Башҡортостан, иле, һөйөүселәр.
2. Һәр, шуға күрә, ҡалала, ғаилә старттары, ауылда, спартакиадалар, халыҡ уйындары, төрлө, үткәрелә.
3. Спартакиадаларға, йыйыла, халыҡ, быйдай, күп.
4. Тимәк, данлаған, донъя чемпиондары, Башҡортостанды, була, киләсәктә лә!
5. Арала, уҡыусылар, улар, һеҙҙең.

**27.** Тексты уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ. Спорт төрҙәре исемдәрен күсереп алығыҙ. Үҙегеҙ йәшәгән төбәктә үҫешкән спорт төрө тураһында һөйләгеҙ.

## Башҡортостан ҡалаларында спорт

Беҙҙең республика ҡалалары үҙҙәрендә спорт төрҙәрен үҫтереүгә күп көс һала.



Салауат ҡалаһы күп кенә саңғысылар һәм йөҙөүселәр тәрбиәләгән.

Белорет — тау саңғысыларын үҫтергән ҡала. Бында ҡышын бөтә Рәсәйҙән спортсылар килеп, күнекмәләр үткәрә.

Бөрөлә боронғо һәм матур спорт төрө — уҡ атыусылар тәрбиәләнә.

Мәләүездәге «Толпар» ипподромында ат спорты алға киткән.

Ишембай шахмат һәм шашка буйынса Рәсәй һәм донъя чемпиондары тәрбиәләгән үҙәккә әйләнде.

**боронғо** — древний
**уҡ атыусылар** — стрелки

**28.** Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнегеҙ, ике строфаһын ятлағыҙ.

## Яңы йыл менән!

Ап-аҡ ҡыш шаҡый тәҙрәне
Ҡарлы ел менән.
Ҡар һәм елдәр әйтә һымаҡ:
Яңы йыл менән!
Яңы йыл менән!

Көтөп алған ҡунағыбыҙ —
Шыршы шул инде,
Уның менән һәр йорт һайын
Яңы йыл килде.

Өй түрендә күркәм ҡунаҡ —
Йәшел кейемдән.
Оҙатып килгәндәр уны
Ҡуян, тейендәр.

Беҙ гөрләйбеҙ, беҙ йырлайбыҙ
Бөтә ил менән.
Дуҫтарға бәхет теләйбеҙ:
Яңы йыл менән!
Яңы йыл менән!

*(Ғ. Рамазанов)*

**шаҡый** — стучится **көтөп алған** — долгожданный

1. Яңы йыл байрамына һеҙ ниндәй бүләк алырға теләр инегеҙ?
2. Был байрамда ниндәй теләктәр әйтелә?
3. Класығыҙ менән Яңы йыл байрамына нисек әҙерләндегеҙ?

**29.** Тексты тасуири уҡығыҙ, уның буйынса һорауҙар әҙерләгеҙ. Олимпия еңеүселәренән кемдәрҙе беләһегеҙ? Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, уларҙың береһе тураһында һөйләгеҙ.

## Башҡортостан — чемпиондар иле

Башҡортостан ере бик күп Олимпия уйындары еңеүселәрен тәрбиәләне. Шундайҙар араһында Европа һәм донъя чемпионы — теннисcы Андрей Черкасов, биатлон буйынса донъя чемпионы — Галина Куклева, ике тапҡыр донъя еңеүсеһе — көрәшсе Александр Батталов, еңел атлетика буйынса донъя еңеүсеһе — Людмила Матвеева.

Боҙ өҫтөндә мотоцикл ярыштары буйынса беҙҙең яҡташыбыҙ Ғабдрахман Ҡадыров алты тапҡыр донъя чемпионы исемен яуланы! Ғабдрахман Ҡадыров — Башҡортостан спортсылары араһында легендар герой. Ул йәшәгән осорҙа Өфө боҙ өҫтөндә мотоцикл ярыштарының баш ҡалаһына әүерелә. *(«Мәктәп календары»нан)*

**яуланы** — завоевал
**ике тапҡыр** — дважды
**әүерелә** — превратился

Т **30.** Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ әйтегеҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә итегеҙ. Улар ярҙамында бәйләнешле текст төҙөгөҙ.

тырышлыҡ, яңғырай, еңеүсе, күнекмәләр, ярыш, үҫеш ала, һаулыҡ, бәйге, көрәш, алдынғы, беренсе урын, ауыр, ҡыйын

донъя чемпионы, яҡшы күңелле булыу, изге эштәр, иртәнге зарядка, һаулыҡ теләү, ат сабыштары, милли көрәш, ил байлығы, дөйөм үҫеш

**31.** Нөктәләр урынына белешмәнән тейешле һүҙҙәр ҡуйып яҙығыҙ.

## Яңы йылда

Зал уртаһында ҡуйы шыршы тора. ... туҡтауһыҙ ..., тирә-яҡты нурландыра. Шыршыны балалар уратып алған. ... йырлайҙар, бейейҙәр, ... һөйләйҙәр, төрлө ... уйнайҙар.



Бында Ҡыш ... ҙа килгән. Уға ... ҙа эйәргән. Улар беҙҙе Яңы йыл менән ... .

Б е л е ш м ә   ө с ө н   һ ү ҙ ҙ ә р : *улар, уйындар, Ҡарһылыу, ул, бабай, әйләнә, ҡотланы, шиғыр.*

**32.** Тексты уҡығыҙ. Кәрәкле ялғауҙар ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

Тәбиғәт күрке — һыу. Башҡортостанда йылға_____, күл_____, шишмә_____ күп. Башҡортостан____ иң ҙур йылғаһы — Ағиҙел. Ул Ирәмәл тауы һырттарынан башлана, Кама йылғаһына ҡоя.

**33.** Ребусты сисегеҙ. Яуабын дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ. Республикалағы иң ҙур күлдәр тураһында ике һөйләм уйлап яҙығыҙ.




**34. I.** Нөктәләр урынына ҡылымдарҙың ялғауҙарын тейешле затта, һанда, заманда ҡуйып яҙығыҙ. Мәҡәлде табып, аҫтына һыҙығыҙ, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Сәләмәт тәндә — сәләмәт рух, ти халыҡ. Һаулыҡты ҡайтанан булдырыуға ҡарағанда, ауырыуҙы иҫкәрт____ күпкә отошлораҡ. Спорт менән даими шөғөлләнән____ , айыҡ тормош алып бар____ — һаулыҡ нигеҙе.

Донъяла уртаса кеше ғүмере яҡынса 64 йәш менән билдә____ . Япония кешеләре иң оҙон ғүмерлеләрҙән һана____ . Ирҙәр унда уртаса — 76 йыл, ә ҡатындар уртаса 82 йыл йәшәй. Японлар майҙы аҙ ҡуллан____, балыҡты күп аша____ . Илдә һаулыҡ һаҡлауға күп иғтибар бүленә.
*(«Башҡортостан календары»нан)*

**!!** **II.** Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Нөктәләр урынына тейешле ҡылымдар өҫтәп яҙығыҙ. Мәҡәлдең аҫтына һыҙығыҙ, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Спорт менән даими шөғөлләнеүселәр кешегә тәбиғәт биргән ифрат ҙур мөмкинлектәрҙе раҫлай. Улар иң

бейеккә ..., иң шәп ..., иң мәргән ..., иң ауырҙы ..., иң көслөнө еңә.

Күпселек иһә шул фиҙакәр кешеләрҙе стадиондарҙа йәки телевизорҙан ғына күҙәтеп, уларға һоҡланыуҙан уҙмай. Байлыҡтың алды — тән һаулығы, ти халыҡ мәҡәле. Аҡса, донъя малы артынан ҡыуып, иң ҙур байлыҡты — һаулыҡты онОторға ... . Ә эште ябай нәмәнән — гимнастиканан башларға була. *(«Башҡортостан календары»нан)*

**35.** Диалогты уҡығыҙ.

— Можно мне записаться к вам на секцию?

— А сколько тебе лет?

— Тринадцать.

— Раньше ты занимался гимнастикой?

— Нет.

— Тогда я советую тебе выбрать другой вид спорта. Бег, плавание...

— Нет, я бы хотел записаться на гимнастику.

— К сожалению, для гимнастики ты немного опоздал.

— Миңә һеҙҙең секцияға яҙылырға буламы?

— Һиңә нисә йәш?

— Ун өс.

— Элек һин гимнастика менән шөғөлләндеңме?

— Юҡ.

— Улай булғас, мин һиңә башҡа спорт төрөн һайларға кәңәш итәм. Йүгереү, йөҙөү...

— Юҡ, мин гимнастикаға яҙылырға теләйем.

— Ҡыҙғаныска ҡаршы, гимнастика өсөн һин әҙерәк һуңлағанһың.

**36.** «Спорт — ул һаулыҡ» темаһы буйынса проект эше ҡороғоҙ. Өҫтәлмә материал ҡулланығыҙ.

**37.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Автор яңы йыл тыуғанда ниндәй хистәр кисерә? Һеҙ шундай мәлдәрҙә нимәләр кисерәһегеҙ? Һөйләгеҙ.

Яңы яуған ҡарға баҫып
Тағы яңы йыл килә!
Сыҡһам уны ҡаршыларға
Йә моңаям, йә көләм.

Ябалаҡлап яуа ҡарҙар,
Битемә ҡунып ирей.
Иҫке йылдан яңы йылға
Улар ҙа күсеп йөрөй.

*(Р. Ғарипов)*

# МИН ҺӘМ БЕҘҘЕҢ ҒАИЛӘ



## Әсәй күҙҙәре

Иң йомшаҡ ҡулдар,
Иң көслө иңдәр —
Тик әсәйҙәрҙә,
Юҡ уға тиңдәр.

Әсәйҙәр күҙе —
Иң матур күҙҙәр,
Әсәйҙәр һүҙе —
Иң наҙлы һүҙҙәр.

Улар бирәләр
Иң дөрөҫ кәңәш,
Улар булалар
Иң яҡшы серҙәш.

Иң нескә күңел,
Иң саф ҙур йөрәк,
Иң ҡайнар һөйөү,
Иң изге теләк.

Иң йылы ҡуйын —
Тик әсәйҙәрҙә.
Бәхет бар улар
Булған өйҙәрҙә.

Йәшәү йәмен һеҙ
Бирғән бит беҙгә,
Әсәйҙәр, рәхмәт,
Мең рәхмәт һеҙгә!

*(К. Шафиҡова)*

**кәңәш** — совет
**изге теләк** — доброе пожелание
**серҙәш** — наперсница
**нескә күңел** — нежная душа
**ҡуйын** — *зд.*: объятие

1. Шиғырҙың төп мәғәнәһе нимәлә?
2. Автор әсәйҙәрҙең ҡулдарын, күҙҙәрен нимәгә тиңләгән?
3. Һеҙ әсәйегеҙ тураһында ниндәй йылы һүҙҙәр әйтер инегеҙ?
4. Әсәй тураһында берәй йыр өйрәнегеҙ.

**1.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Төп фекерен аңлатығыҙ.

Беҙ аҡ мамыҡ, аҡ йондоҙ,
Ергә йәм-нур сәсәбеҙ;
Өшөмәһен Ер-Әсә,
Мамыҡ юрған ябабыҙ.

*(Ф. Рәхимғолова)*

1. Ни өсөн автор Ерҙе әсә менән тиңләгән?
2. Шиғырҙа йылдың ниндәй миҙгеле һүрәтләнгән?

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Глагол (ҡылым)** обозначает действие или состояние предметов, явлений и отвечает на вопросы **нимә эшләргә?** — что делать? что сделать? **нимә эшләй?** — что делает? что сделает? **нимә эшләне?** — что делал? что сделал? и др.

**Изменение глаголов по временам.**

*Хәҙерге заман (настоящее время):* уҡы**й**, яҙ**а** — читает, пишет.

*Үткән заман (прошедшее время):* һөйлә**не** — рассказал, күрһәт**те** — показал, әйт**кән** — сказал.

*Киләсәк заман (будущее время):* әйт**ер** — скажет, саҡыр**ыр** — пригласит, иртәгә кил**ә** — завтра придет (приедет), укол эшлә**р** — сделает укол.

**2.** Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнегеҙ һәм ятлағыҙ.

## Әсә һүҙе



Балам үҫһен ҙур булып,
Күҙҙәренә нур тулып.
Яҡтырып торһон йөҙө,
Ялтырап торһон эҙе.
Ҡулына алған тубы
Булһын бары тубырсыҡ —
Теленә алған һүҙе
Булһын бары уйынсаҡ.

*(«Башҡорт халыҡ ижады»нан)*

**нур** — луч
**йөҙ** — лицо

1. Әсәнең теләктәрен уҡып күрһәтегеҙ.
2. Башҡорт халҡында «Бәпес күрә барыу» йолаһы бар. Унда балаға матур-матур теләктәр теләйҙәр. Һеҙ ниндәй теләктәр теләр инегеҙ?
3. Ҡылымдарҙы билдәләгеҙ.

**3.** Түбәндәге һөйләмдәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡылымдарға өҫтәмә мәғәнә биргән һүҙҙәр өҫтәп яҙығыҙ.

Өлгө: *Ер йоҡоға талған. Ер, яҙ еткәнсе, йоҡоға талған.*

1. Әлфиә йоҡларға ятманы. 2. Рамаҙан һөйләне. 3. Урамда уйнаныҡ. 4. Урман тып-тын булып ҡалды. 5. Фәһим икмәген ашап алды.

**4.** Фәһемле һүҙҙәрҙе уҡығыҙ. Береһен ятлағыҙ һәм яттан яҙығыҙ. Үҙегеҙҙе тикшерегеҙ.

### Фәһемле һүҙҙәр

1. Белем алайым тиһәң ни саҡлы, һөй, хөрмәт ит, ярат китапты. *(Ғ. Туҡай)*

2. Үҙемдә булған бөтә яҡшылыҡтарым өсөн китаптарға бурыслымын. *(М. Горький)*

3. Донъяла аҡыллы һәм ырыҫлы булғың килһә, китап уҡы, китаптан айырылма, шунда бәхет табырһың. *(Нурмөхәмәт Йомрани)*

**5.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтегеҙ, төркөмдәргә бүлеп, айырып яҙығыҙ.

1) атай, әсәй, ғаилә, ҡағыҙә, ғорур, ғариза, матурлыҡ, аҡ, бәҫ, һырынты, апай, һырғалаҡ, бабай

2) ҡарағат, ҡаҙ, ҡаҙы, бәлеш, икмәк, сәй, һөт, ҡамыр, ҡымыҙ, ҡорот, эремсек, бутҡа

**6.** Нөктәләр урынына мәғәнәһе буйынса тап килгән һүҙҙәрҙе ҡуйып, мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Күсереп яҙығыҙ.

1. Ағасты ... биҙәй, кешене ... биҙәй.
2. Алтын ... йыйыла.
3. Ҡалған ... ҡар яуа.
4. Ете ... үлсә, бер ҡат ... .
5. Аҡыллыға ... да етә.
6. Ялҡауҙың көн дә ... ауырта.

**ым** — жест

Б е л е ш м ә   ө с ө н   һ ү ҙ ҙ ә р: *башы, хеҙмәт, киҫ, япраҡ, эшкә, ҡат, бөртөкләп, ым.*

**7.** Әкиәтте тасуири уҡығыҙ. Ни өсөн әкиәт «Ҡошҡа әйләнгән әбей» тип атала?

## Ҡошҡа әйләнгән әбей

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Булған, ти, уларҙың дүрт улы. Һәйбәт кенә йәшәп ятҡанда, әбей ҙә, бабай ҙа ауырып киткән. Бабай ауырып үлгән. Әбей ауырыған да ауырыған. Дүрт балаһының береһе уны ҡарамаған. Көн-төн уйнап тик йөрөгәндәр. Ҡарт әсәнең һыу эскеһе килгән, асыҡҡан.

Бер көндө ул балаларын саҡырып алған да:



— Инде оҙаҡ йәшәмәм. Донъя үҙегеҙгә ҡалыр. Шуға тиклем миңә һыу килтереп эсереп торһағыҙсы! — тип инәлгән.

— Мә, эс! — тип кемелер бер сүмес һыу биргән дә, әйләнеп, тағы уйынға тотонған...

Көҙ еткән. Ҡоштар йылы яҡтарға китә башлаған.

Ҡарт әсә: «Ҡоштар кеүек оса алһам икән... Улар берәй күл янына ялға туҡтар... Туйғансы һыу эсеп алырҙар», — тип уйлаған, ти.

— Кил, әйҙә осайыҡ! Ятма, зарығып!

Шул ваҡыт уның өҫтөнә бер тун килеп төшкән, ти. Әсә көс-хәл менән шул тунды кейеп, ҡошҡа әүерелгән дә тәҙрәнән осоп сығып та киткән, ти.

Һаман уйнап йөрөгән балаларҙың береһе:

— Әсәйебеҙ ҡош булып осто! — тип ҡысҡырып ебәргән.

— Әсәй!

— Ҡалдырма беҙҙе! — тип инәлгән, ти, башҡалары ла. Әсәләре артынан эй йүгерә, эй йүгерә, ти, былар.

— Һуң инде, балаҡайҙарым. Бәхил булығыҙ! — тигән әсә. Дүрт малай дүрт ерҙә илаған, ти. Тик бына бик һуң булған шул. Әсәне ваҡытында ҡәҙерләргә кәрәк.

**уның өҫтөнә** — на нее
**көс-хәл менән** — с трудом
**инәлгән** — умоляла
**ҡәҙерләргә** — ценить, дорожить
**бәхил булығыҙ!** — прощайте!

1. Әкиәттең йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Әсә ни өсөн ҡошҡа әйләнгән?
3. Әкиәт һеҙҙә ниндәй хистәр уятты?
4. Ошоға оҡшаш тағы ниндәй әкиәттәр беләһегеҙ?
5. Әкиәттең төп фекерен билдәләүсе һөйләмде күсереп яҙығыҙ.
6. Әкиәттән ҡылымдарҙы күсереп алығыҙ, заманын билдәләгеҙ.

**8.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Яттан яҙығыҙ.

## Оҡшаштар

Әсәй миңә — ҡояш кеүек,
Атайым — сикһеҙ Йыһан.
Дүртеһе лә үҙҙәрендә
Бөтмәҫ нур һәм наҙ йыйған.

*(Н. Сәлимов)*

**9.** Һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ.

Башҡортостан, Ватан, ҡомартҡы, ҡәҙерле, тәбиғәт, ғаилә, етмеш, ел, Илдар, Әлфиә, ҡош, өләсәй, серҙәш, Салауат

1. Бирелгән һүҙҙәр менән биш һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
2. *Ҡомартҡы* һүҙенең мәғәнәһен һүҙлектән табығыҙ. Был һүҙҙең хәрефтәренән кем күберәк һүҙ уйлап яҙыр?

**10.** Тексты уҡығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе һүҙлек дәфтәренә күсерегеҙ, тәржемә итегеҙ.

## Дуҫым, серҙәшем

Мин 7-се класта уҡыйым. Минең әсәйем төҙөүсе булып эшләй. Эше ауыр булһа ла, үҙ һөнәрен бик ярата. Мин әсәйемә һәр ваҡыт ярҙам итергә тырышам. Ул эштән ҡайтыуға иҙәнде йыуып, туҙанды һөртөп, өйҙө йыйыштырып ҡуям. Әсәйем бүлмә гөлдәрен үҫтерергә ярата. Был һөйөүе миңә лә күсте: мин кактустар тәрбиәләргә яратам. Әсәйем — минең серҙәшем дә: уға башҡаларға һөйләмәҫ

серҙәремде һөйләйем. Әсәйем миңә ҡыҙҙарға ғына хас ҡағиҙәләрҙе өйрәтә. Яратам мин әсәйемде.

**ҡыҙҙарға ғына хас** — присущие только девочкам
**сер** — секрет

**11.** Картинаның йөкмәткеһен һөйләгеҙ.



«Ярҙамсы». В. Меос картинаһы.

**12.** Диалогты тәржемә итегеҙ.

— Где ты купил эту книгу?
— В киоске.
— В том, который находится напротив Центрального рынка?
— Нет, этот киоск находится рядом с музеем.
— Мне тоже нужна эта книга. Успею ли я до обеда?
— А ты иди мимо кинотеатра, там ближе.
— Спасибо. До свидания.

**13.** Тексты уҡығыҙ. Икенсе абзацты нисек аңлайһығыҙ? Төп фекерен аңлатығыҙ.

## Атаһы менән балаһы

Атаһы улын яурынына ултыртҡан. Улы атҡа менгәндәй ҡыуана: сәпәкәйләй, мине күрәләрме тигәндәй, төрлө яҡҡа ҡарай. Атай елкәһе — уның өсөн хәҙер иң бейек нөктә.

Эйе, аталар балаларҙы күктәргә күтәрә, буйы менән дә күтәрә, уйы менән дә күтәрә. Ғүмер буйына күтәрә... Ә бала?

?

1. Текстағы һуңғы һөйләм ниңә һорау билдәһе менән тамамланған? Һеҙ нисек яуап бирерһегеҙ? Һөйләгеҙ.
2. Тексты нисек дауам итер инегеҙ?

**14.** Тексты уҡығыҙ. Нимә ул шәжәрә? Һөйләгеҙ. Үҙегеҙҙең ғаилә шәжәрәһен төҙөп ҡарағыҙ.

«Шәжәрә» — ғәрәп телендә «ағас» тигән һүҙ. Борон заманда беҙҙең олатайҙар ырыу-ҡәбиләне, нәҫел-нәсәпте, ата-бабаларҙың исемен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. «Ниңә ағас һымаҡ төшөргәндәр?» — тигән һорау тыуа. Ағас боронғо башҡорттарҙа һауаны, ерҙе, ер аҫтын берләштергән билдә булған. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың тормошон да сағылдырған. Тамыры — үткәнебеҙ, олоно — бөгөнгөбөҙ, ботаҡтары — киләсәгебеҙ. Ағас ни тиклем нығыраҡ, сыҙамлыраҡ булһа, ботаҡтары ла көслө була. Бына ни өсөн халҡыбыҙ шәжәрәне ағас рәүешендә яҙып ҡалдырған.

Шәжәрәләр — оло хазина. Улар быуындан быуынға иң ҡәҙерле нәмә булып күсә килгән.

**шәжәрә** — родословная
**рәүешендә** — в виде, в форме
**тыуа** — *зд.:* возникает
**тармаҡландырып төшөргәндәр** — рисовали ветвистыми
**быуындан быуынға** — из поколения в поколение
**нәҫел, ырыу** — род, племя
**нәҫел-нәсәп** — родственники

**15.** Гәҙәттә, ғаиләлә өй эштәрен һәр кемгә бүләләр. Һеҙ өйҙә нимә өсөн яуаплы? Был эште нисек башҡараһығыҙ? Телмәрегеҙҙә ҡылымдарҙы дөрөҫ ҡулланығыҙ.

**16.** Уйынды бергәләп уйнап өйрәнегеҙ.

## Һүҙҙәр үреү

«Әсәй» һүҙенең һуңғы хәрефе — «й». Ошо хәреф менән башланған һүҙ уйлағыҙ. «Йәшел». Ә хәҙер тағы был һүҙҙең һуңғы хәрефе менән башланған һүҙ уйлағыҙ. Шулай сиратлап дауам итегеҙ.

**17.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙең тәржемәһен һүҙлектән табығыҙ.

## Атай кәңәше

| |
|---|
| нур<br>ҡомартҡы<br>Йыһан<br>сыҙамлы |

Әҙер фекергә һин мауыҡма,
Үҙең уйла, үҙең аңла, бала!
Ялҡау уйлы кеше ғүмер буйы
Сит аҡылдың ҡоло булып ҡала.

Икеләнмә... Йәш ғүмерең
Шик йөгөнән бушаныр.
Үҙеңә үҙең ышанмаһаң,
Кем һуң һиңә ышаныр?

*(Ҡ. Даян)*

?
1. Шиғыр ни өсөн «Атай кәңәше» тип атала?
2. Шиғырҙың төп фекере нимәлә?
3. Һеҙ был шиғырҙы уҡығандан һуң, нимә аңланығыҙ?

**18.** Туғанлыҡты белдергән һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ, һүҙлектән ҡарап, тәржемә итегеҙ, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

1) өләсәй, олатай, ағай, апай, һеңлем, ҡустым, улым, ҡыҙым, ейән, ейәнсәр, ир, ҡатын

2) еңгә, еҙнә, килен, кейәү, ҡәйнеш, ҡоҙа, ҡоҙағый, балдыҙ, ҡайны, ҡәйнә, ҡайынбикә

?

1. Был һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. Ни өсөн һүҙҙәр айырып бирелгән тип уйлайһығыҙ?

**19.** Диалогты уҡығыҙ. Туғанлыҡты белдергән һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ. Географик атамаларҙы картанан күрһәтегеҙ.

— Таһир, мин һине тыуған көнөмә саҡырам. Сәғәт 2-гә кил, йәме?

— Рәхмәт, Сәғит. Мин барырмын, тик унда һинең яҡын туғандарың ғына йыйыла түгелме?

— Эйе, Аҡъярҙан — ағайым менән еңгәм, Йылайырҙан олатайым менән өләсәйем килә. Һине, дуҫымды, туғандарым янына саҡырам.

— Рәхмәт. Мин һинең тыуған көнөңә килермен.

?

1. Әйтегеҙ әле, Таһирға был байрамда күңелле булырмы?
2. Таһир дуҫы Сәғиткә ҡотлау открыткаһына нимәләр яҙыр икән? Һеҙ ҙә берәй дуҫығыҙҙың, туғанығыҙҙың тыуған көнөнә ҡотлау яҙығыҙ.

**20. I.** Диалогтарҙы уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән әйтегеҙ.

1. — Ләйсән, дәрестәрҙе эшләп бөткәс, әйҙә, киноға барайыҡ!

— Юҡ, Әлфиә, бара алмайым. Ҡустымды балалар баҡсаһынан алырға кәрәк.

2. — Алло! Был Ғәлимовтар фатирымы?

— Эйе.

— Мин Даян. Дамирҙың дуҫы. Зинһар, уны телефонға саҡырығыҙ әле.

— Ул өйҙә юҡ. Спорт һарайына бассейнға китте.

— Улай булғас, Дамир ҡайтҡас, үҙе миңә шылтыратһын.

— Ә ул һинең телефон номерыңды беләме?

— Эйе, белә. Рәхмәт һеҙгә, һау булығыҙ.

**II.** Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, диалог төҙөгөҙ.

Юҡ. Булдыра алмайым. Ваҡытым юҡ. Мин риза. Сәғәт нисәлә? Майҙанда, һәйкәл янында. Бара алмайым. Дәрестәрҙе әҙерләмәгәнмен.

**21.** Тексты уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ. Тексты диалог формаһына әйләндерегеҙ. Һеҙ ниндәй түңәрәккә йөрөйһөгөҙ, унда нимәләр эшләйһегеҙ?

Беҙ дуҫым Илшат менән башҡорт теле түңәрәгенә йөрөйбөҙ. Унда дөрөҫ һөйләшергә өйрәнәбеҙ, башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте тураһында китаптар уҡыйбыҙ, инша яҙабыҙ.

Ай һайын «Эй матур тел» тигән стена газетаһы сығарабыҙ. Унда башҡорт яҙыусыларының һәм шағирҙарының туған тел тураһында һүҙҙәрен, үҙебеҙ ижад иткән шиғыр һәм хикәйәләрҙе яҙабыҙ, ребус, кроссвордтар төҙөйбөҙ. Газетаны сығарыуҙа башҡорт теле түңәрәгенә йөрөүселәрҙең барыһы ла ҡатнаша.

**мәҙәниәт** — культура
**ижад** — творчество

**22.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе файҙаланып, үҙегеҙ тураһында һөйләгеҙ. Автобиографияғыҙҙы яҙып өйрәнегеҙ.

14 йәш, ғаилә, тиҙҙән, сәғәт, кеҫә телефоны, телефон шылтырай, дәрестәр башлана, бүлмә, иртәнсәк, һәр ваҡыт, яҙыу өҫтәле, матур, көй, теш таҙартыу, карауат, үтекләү, йыуыныу, ҡабаланырға яратмау, ашау, дуҫтар күп, шөғөлләнеү, һөнәр, спорт ярыштары, сығыштар яһау, хыялланыу

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

ғаилә, ваҡ, һауыт-һаба, сәғәт, дауа, мөғжизә, ваҡыт, бер ваҡыт, әхирәт, ҡомарҡы, хазина, серҙәш, сүмес, өшөгән, сынаяҡ, һеңлем, еҙнә, ҡоҙа, килен, еңгә, ауылдаш, яҡташ

**23.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Яттан яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ.

## Матур көн

Ынйыы-ынйыы ҡарҙар яуа,
Ғәжәп матур көн бөгөн!
Ҡулға тотоп алғы килә
Ҡарҙың һәр бер бөртөгөн.

Бәүелеп-бәүелеп төшә,
Ҡар яуа — матур ниндәй!
Әйтерһең дә, кемдер күктә
Ҙур иләктән он иләй.

*(С. Әлибай)*

!! **24.** Тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһе буйынса дөрөҫ тәртипкә килтерегеҙ. Өҙөктө һөйләгеҙ, һүрәттәге балаларға исем ҡушығыҙ.









Минең дуҫтарым көн дә өйгә ниндәй эш бирелгәнен аңлатты, шуға, бик күп дәрес ҡалдырһам да, иптәштәрем менән бергә етенсе класты тамамлай алдым.

Ял көнө дуҫтарым менән йылғала боҙҙа шыуырға киттек. Көн аяҙ, тыныс. Ҡапыл аяҡ аҫтында ниндәйҙер шартлау ишеттем дә һалҡын һыуға төшөп тә киттем. Боҙло һыуҙа аяҡ-ҡулдарым ҡатҡандай булды. Ҡурҡыуымдан күҙ алдарым ҡараңғыланып китте. Ярай әле, дуҫтарым ололар килгәнсе ярҙам күрһәтте, юҡһа был хәлдең нимә менән бөтөүен уйлауы ла ҡурҡыныс.

Мин был хәлдән һуң оҙаҡ ҡына ауырып яттым. Врач көн аша килеп торҙо. Өләсәйем һәр ваҡыт янымда булды. Ул врачтың бөтә күрһәтмәләрен теүәл үтәп барҙы: әллә ниндәй уколдар яһаны, дарыу, үлән сәйҙәре эсерҙе. Иң ҙур һәм шифалы дауа — өләсәйемдең ягымлы тауышы, мөғжизәле әкиәттәре, йомшаҡ ҡулдары, төрлө булған хәлдәр тураһында ҡыҙыҡлы хикәйәттәре ине.

**ҡурҡыуымдан** — от страха
**күҙ алдарым ҡараңғыланып китте** — потемнело в глазах
**хәл** — происшествие
**теүәл** — точно

## Беләһегеҙме?

«Кроссворд» һүҙе инглиз теленән алынған. Тәүге кроссворд 1913 йылда АҠШ-та «Нью-Йорк герольд» гәзетаһында баҫыла. Беҙҙең илдә «Огонек» журналында 1929 йылда сыға. Республикала уны «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы беренсе булып 1966 йылда тәҡдим итә. Нумерлы сатраштарға тейешле һүҙҙәрҙе табып яҙыуҙан торған башваткыс уйын «кроссворд сисеү» тип атала.

**25.** Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

## Әсә!

Ер йөҙөндә иң гүзәл, иң ғәзиз һүҙ — әсә. Шул һүҙ менән баланың теле асыла, һәм ул бөтә телдәрҙә лә берҙәй наҙлы яңғырай.

Әсәнең мәрхәмәтле, шәфҡәтле ҡулдары белмәгән эш юҡтыр ул донъяла. Әсә йөрәге — иң тоғро һәм һиҙгер йөрәк, балаға булған мөхәббәт хисе унда бер ҡасан да һүрелмәй, балаһының яҙмышына ҡағылған бер генә нәмәне лә әсә йөрәге вайымһыҙ үткәрә алмай. Һәр кем — уйындан башҡаны белмәгән сабыйҙар ҙа, тормош кисергән сал сәсле өлкәндәр ҙә — әсә наҙына, уның мөләйем ҡарашына мохтаж. Әсәйеңә мөхәббәтең ни тиклем көслө булһа, тормошоң да шул ҡәҙәр шатлыҡлы һәм яҡтыраҡ була. *(З. Воскресенскаянан)*

**ғәзиз** — родной, дорогой
**мөләйем ҡараш** — добрый взгляд
**һиҙгер** — чуткий
**мөхәббәт хисе** — чувство любви
**мохтаж** — нуждается
**яңғырай** — звучит
**шәфҡәтле** — участливый, сострадательный
**һүрелмәй** — не утихает
**сабый** — ребенок, младенец

Икенсе абзацтың 2-се һөйләмен яттан яҙығыҙ.



*Фәүзиә Рәхимғолова (1921—1996) Ишембай районы Йәнырыҫ ауылында тыуған.*

*Мәғариф бүлегендә инспектор, мәктәптә уҡытыусы була. «Пионер» (хәҙерге «Аманат»), «Башҡортостан ҡыҙы» журналдарында эшләй.*

*Фәүзиә Рәхимғолова 26 китап авторы.*

## Беҙҙең әсәй

Кем тегә матур күлдәктәр,
Кем яһай аҫыл биҙәктәр?
Ул — беҙгә иң яҡын кеше,
Ул, белһәгеҙ, — беҙҙең әсәй.

Кем тәмле аштар бешерә,
Гел һине иҫкә төшөрә?
Ул — беҙгә иң яҡын кеше,
Ул, белһәгеҙ, — беҙҙең әсәй.

Ҡайҙа барһаң, күҙ алдында,
Һәр саҡ күңелеңдә йәшәй.
Ул — беҙгә иң яҡын кеше,
Ул, белһәгеҙ, — беҙҙең әсәй.
Беҙҙең әсәй!

**аҫыл** — красивый
**иҫкә төшөрә** — вспоминает

1. Был шиғырға композитор Данил Хәсәншин көй яҙған. Йырҙы өйрәнегеҙ.
2. «Һәр саҡ күңелеңдә йәшәй» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
3. Әсәйегеҙ менән генә уртаҡлашыр серегеҙ бармы?
4. Өсөнсө строфаны яттан яҙығыҙ.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Союзы (теркәүестәр)** служат для соединения отдельных слов и предложений. По роли, выполняемой в предложении, союзы подразделяются на
сочинительные союзы (теҙеү теркәүестәре) и
подчинительные союзы (эйәртеү теркәүестәре).

**Сочинительные союзы (теҙеү теркәүестәре)**, подразделяются на следующие подгруппы:

а) соединительные (йыйыу теркәүестәре):
**да, дә, та, тә, ҙа, ҙә, ла, лә, һәм** — и, ни;
**менән** — с; **тағы, тағы ла** — также, опять, еще;
**шулай уҡ** — а также;

б) противительные (ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре):
**ә** — а; **ләкин** — но, однако; **тик** — но; **шулай ҙа** — но, однако;
**әммә** — а, но, однако; **фәҡәт** — только; **юҡһа** — иначе;

в) разделительные (бүлеү теркәүестәре): **йә** — или; **йәки** — или; **берсә** — то; **йәиһә** — или; **бер** — то, либо; **әллә** — то, то ли, либо;

г) пояснительные (аныҡлау теркәүестәре): **хатта** — даже, **бәлки** — то, либо, ибо.

**26.** Фәйзрахман Исмәғилевтең картинаһын иғтибар менән ҡарағыҙ. Уҡытыусы ярҙамында инша яҙығыҙ. Ни өсөн картина «Йылға буйында» тип атала? Тәбиғәтте тасуирлағыҙ. Ни өсөн картинаның күп өлөшөн һыу, әбей, малай образдары алып тора? Әбей менән малай нимә тураһында һөйләшә, нимә тураһында уйлай икән? Уларҙың кейеменә, йөҙөнә иғтибар итегеҙ.



«Йылға буйында». Ф. Исмәғилев картинаһы.

Белешмә өсөн һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр: *ҙур таштар, сыуаҡ көн, күңелгә яҡын, тормош аҡҡан һыу кеүек, олатаһы, һуғышта үлгән, шатлыҡтарҙы ла, ҡайғыны ла күп күргән, быуындар бәйләнеше, киләсәк матур, тыныслыҡ, өмөтлө.*

**27.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәрҙе ҡуйып, легенданы уҡығыҙ. Һөйләргә өйрәнегеҙ. Теркәүестәрҙе билдәләгеҙ.

## Етегән йондоҙ

Бик борон заманда ер бәләкәй генә, күк тә ерҙән саҡ ҡына ҙурыраҡ булған. Кешеләр ер йөҙөндә күбәйә башлаған, кейектәр ҙә күбәйгән, ә ер әкренләп ҙурая барған; ... киңәйгәс, күк тә ҙурайған.

Ул заманда бөтә халыҡ бер ҡаҙандан ашаған. Алып батыр килеп сыҡҡан да ҡаҙанды күтәреп эскән. Ни эшләмәк

кәрәк? Тотонғандар ҙур ... яһарға. Ҡаҙаны булғас, сүмесе лә кәрәк бит инде. Ҡаҙанды көмөштән ҡойғандар, сүместе алтындан яһағандар.

Теге Алып килгән дә ҡаҙанды күтәреп ҡараған. «Ярағаң», — тип, урынына ултыртҡан да сүместе ҡулына алған. «Быныһы бик еңел икән», — тип, һауаға сорғотоп, тотоп алайым тиһә, ... юҡ: әйләнеп-әйләнеп оскан да йондоҙҙар араһына инеп боҫҡан.

Алып сүмесе әле лә бар. Ете йондоҙ булып ялтырай ул: сүместең төбө — дүрт йондоҙ, тотҡаһы — өс йондоҙ, бөтәһе етәү. Үҙе һәр саҡ әйләнеп тора. Алып сүмесенең ауыҙы кистән өҫтә була, ә иртәнгә һырт яғы өҫкә сыға.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *ер, ҡаҙан, сүмес.*

**һырт** — тыльная сторона
**сорғотоу** — бросать вверх

Легенда буйынса һүрәт төшөрөгөҙ.

П **28.** «Минең ғаиләм» темаһына проект эше ҡорогоҙ.

**29.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Теркәүестәрҙе күрһәтегеҙ.

## Атай менән өләсәй

Степа ағай кеүек бейек
Минең атай.
Аҙымы ҙур, бер метрҙы
Ул бер атлай.
Тимерсе ул.
Илле бергә
Етте йәше.
Уны эҙләп килә безгә
Көн дә кеше.
Бөтмәй уның кемдәргәлер
Кәңәш һүҙе.
Аптырайым, нисек күпте
Белә үҙе.
Үҙе атай, үҙе бала,
Быны йомаҡ.
Өләсәйгә: «Әсәкәй!» — тип
Ул өндәшә.
Иркәләнеп, көлөп кенә
Ул һөйләшә.
Ә өләсәй: «Балаҡай», — тип
Һөйөп ала.
Миңә ҡыҙыҡ: үҙе атай,
Үҙе бала...

*(Ш. Бикҡол)*

**аҙым** — шаг
**кәңәш** — совет
**иркәләнеп** — ласкаясь
**ҡыҙыҡ** — интересно

?

1. Ошо шифырға тап килгән мәкәл-әйтемдәр әйтегеҙ. Мәҫәлән: *Әсә кеше баҫҡан һәр урын* — ожмах.
2. Әсәйегеҙгә нисек итеп өндәшәһегеҙ?

**30.** Һүҙлек диктантына әҙерләнегеҙ.

ҡусты, атай, әсәй, һеңле, ҡоҙа, ағай, апай, өләсәй, үгәй әсә, бер туған апай, ике туған һеңле, еҙнә, еңгә, кейәү, килен, шәжәрә, ҡомартҡы, олатай

!!

**31.** Йыһат Солтановтың «Ҡәнәфер сәскәһе» хикәйәһенән өҙөктө уҡығыҙ. Хикәйәне үҙ һүҙҙәрегеҙ менән дауам итегеҙ.

## Ҡәнәфер сәскәһе

Бөгөн Фәриҙә мәктәптәге һуңғы ҡыңғырау шылтырауын түҙемһеҙлек менән көтөп алды, өйгә яҙғы күбәләктәй талпынып ҡайтты. Уны шатлыҡ шулай итте — иртәгә оло байрам, әсәйҙәрҙең байрамы! Киске арып ҡайтасаҡ әсәһен Фәриҙә матур бүләк менән ҡаршыларға уйлағайны. Бына ул өйгә инеп, сумкаһын ҡуйып, ҡатыҡ ҡына ҡапҡылап алыр ҙа сәскә магазинына йүгерер, әсәһенә ҡып-ҡыҙыл ҡәнәфер сәскәһе һатып алыр...

Өйҙө тап-таҙа итеп йыуып, форточканы асып елләтеп алғансы, үҙәк майҙандағы сәскә магазины ябылыуға бер нисә сәғәт кенә ваҡыт ҡалғайны...

**түҙемһеҙлек менән** — с нетерпением
**ҡәнәфер сәскәһе** — гвоздика

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

1) аҫыл, ғәзиз, мөғжизә, мөхәббәт, наҙлы, яҡтыраҡ, гүзәл, һөнәр, мохтаж, һиҙгер, ихтирам, тимерсе, йылмайып, мискә, толом

2) кәңәш итеү (биреү), сал сәсле, мөләйем ҡараш, сабый, әсәй, шифалы ҡулдар, ҡояштай балҡый, ҡәнәфер сәскәһе, бүләк итеү, тәртипле бала, төпкө бүлмә, тере сәскә

**32.** Ребусты сисегеҙ.



| |
|---|
| күрһәтмә<br>майҙан<br>шәфҡәтле<br>Раштыуа |

**Т** **33. I.** Тексты уҡығыҙ. Унда ниндәй проблема күтәрелә? Был һорау буйынса фекерегеҙҙе белдерегеҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә итегеҙ.

## Ниндәй бүләк бирәләр?

Бүләк биреү йолаһы һәр илдә төрлөсә. Мәҫәлән, Японияла хризантемалар биреү тыйыла — был император ғаиләһендә генә рөхсәт ителә.

Францияла ҡатын-ҡыҙға **хушбуйҙы** иң яҡын кешеһе генә бүләк итә ала.

Ҡытайҙа бер ваҡытта ла сәғәт бүләк итмәйҙәр, сөнки был һүҙ ҡытайса **«ерләү»** һүҙе менән ауаздаш.

Латин Америкаһында осло ҡырлы әйбер биреү ошо кеше менән бәйләнешеңде боҙоу тигәнде аңлата.

Шыршы аҫтына бүләктәр һалыу ҡайҙан һәм ҡасан килеп сыҡҡанын беләһегеҙме? Египет пирамидаларында яңы **батшалыҡ** осоронда **археологтар** ваза таба. Уға яҡынса 3 мең йыл була. Унда былай тип яҙылған: «Йылдың яҡшы асылыуы менән!» Шулай уҡ башҡа төрлө бүләктәр ҙә табыла: маймылдарҙың бронза фигуралары, өҫтәренә яңы йылға арнап биҙәк төшөрөлгән **таш һындар**.

Башҡа төрлө фараз да йәшәп килә: **Раштыуаға** бүләктәр биреүҙе волхв халҡы уйлап сығара. Улар Ғайсаға (Иисус) алтын, хуш еҫле **ыҫмала** бүләк итә.

Боронғо Римда Яңы йылдың беренсе көнөндә туғандарына һәм яҡындарына бүләккә емеш-еләк һәм ҡорт балы биргәндәр. Улар аҡрынлап алтын менән алышынған. Иң **ҡыйбатлы** бүләктәрҙе император алған. *(«Мәктәп календары»нан)*

**II.** Күрһәтелгән ситуацияларҙа үҙеңде нисек дөрөҫ тоторға?

1. Класта «Бүләкте нисек һайларға?» тигән проблема тикшерелә. Тыуған көнгә (атайыңа, әсәйеңә, олатайыңа, өләсәйеңә, һеңлеңә, ҡустыңа, ағайыңа, апайыңа) нимә бүләк итергә була икәне тураһында фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
2. Һеҙҙең дуҫығыҙ бүләккә сәскә гөлләмәһе бүләк итергә кәрәкмәгәнде әйтә, сөнки сәскә бер-ике көндән һулый һәм иҫтәлеккә ҡалмағанды белдерә. Һеҙ уның менән килешәһегеҙме? Дуҫығыҙ менән бәхәсләшегеҙ.
3. Ҡайһы бер кеше ҡыйбатлы бүләк кенә яҡшы була, тип уйлай. Һеҙ улар менән килешәһегеҙме?

**34.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Яҙ билдәләренән шиғырҙа нимәләр әйтелгән? Был шиғырҙы ниндәй тон менән уҡырға кәрәк?

## Яҙ килә

Ерҙе күмеп гөлдәргә,
Яҙ килә, яҙ!
Дәртле йәш күңелдәргә
Наҙ килә, наҙ!

Күк йөҙөндә көлә ҡояш,
Беҙгә бағып,
Ҡоштар ҡайта тыуған яҡҡа,
Йөрәк ҡағып.

Күгәрсендәр, күгәрсендәр
Йырлай нисек!
Сәскә атты кеүек күк тә,
Ал нур эсеп.

Тып-тып итеп түбәләрҙән
Тамсы тама,
Һәр тамсының үҙендә бер
Ҡояш яна.

Ерҙе күмеп гөлдәргә,
Яҙ килә, яҙ!
Беҙҙең шат күңелдәргә
Наҙ килә, наҙ!

*(Р. Назаров)*

# СӘНҒӘТ ОҪТАЛАРЫ



*Мәшһүр башҡорт композиторы Хөсәйен Әхмәтов (1914—1993) бай тормош һәм ижад юлы үткән. Ул Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған.*

*Бәләкәйҙән үк халыҡтың көй-моңон тыңлап үҫкән. Йәшләй етем ҡалғас, Урал йылғаһында һал ағыҙа, Тау сәнәғәте мәктәбендә, Ҡазан музыка техникумында, Мәскәү дәүләт консерваторияһында белем ала.*

*Тырыш һәм талантлы композитор йөҙҙән ашыу халыҡ йырын нотаға һалған һәм «Башҡорт халыҡ йырҙары» тигән китап сығарыуҙа ҡатнашҡан, Мәскәүҙә «Оҙон көйлө башҡорт халыҡ йырҙары» тигән китап сығарған. Халыҡ араһында яратып ҡабул ителгән 300-ләп йырҙың авторы Хөсәйен Әхмәтов ҙур күләмле әҫәрҙәр ҙә ижад иткән. Уның «Тау бөркөтө», «Замандаштар», «Нәркәс» тигән опералары бар.* (Р. Ниғмәтуллин)

## Тыуған ауылым

Тыуған ауылым Һаҡмар буйҙарында,
Шунда үтте минең бала саҡ.
Һаҡмар тулҡындары, ҡурай моңо
Йөрәгемдә мәңге ҡаласаҡ.

Атай-әсәй һиндә ғүмер иткән,
Сал Уралым, йәмле Һаҡмарым;
Мин онотмам һеҙҙе бер ваҡытта,
Тыуған ауылым, тыуған яҡтарым.

**Һаҡмар буйҙарында** — на берегу Сакмары
**бала саҡ** — детство

1. Йырҙың һүҙҙәрен хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.
2. Хөсәйен Әхмәтовтың тыуған яғын картанан табып күрһәтегеҙ.

**1.** Тексты тәржемә итегеҙ. Кәрәкле теркәүестәрҙе ҡулланығыҙ, уларҙың аҫтына һыҙығыҙ.

## Что такое Родина?

Родина. Как вы представляете ее? Это место, где вы родились, впервые увидели мир и начали познавать его. Сначала это был ваш дом, потом улица, поле, лес. Вы росли, и ваши знания о Родине обогащались. Чтобы больше знать о Родине, надо хорошо изучать свою республику. *(По М. Хисматову)*

**2.** Өҙөктө уҡығыҙ. Уҡығанда күҙ алдына килгән картинаны һөйләп биригеҙ.

Ҡыш. Ер өҫтөн — һалҡын ҡар, йылғаларҙы ҡалын боҙ ҡатламы ҡаплаған. Ҡар аҫтында ла, боҙ өҫтөндә лә йәшәү тынып ҡалған һымаҡ. Өҫтән ҡарағанда ғына был шулай тойола, йәшәү бер ҡасан да туҡталмай. Ер ҡар аҫтында ла һулыш ала, һыуҙар аға, йоҡомһораған балыҡтар талғын ғына йөҙә. *(Б. Бикбай)*

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Подчинительные союзы (эйәртеү теркәүестәре):**

**сөнки** — потому что

**шуға, шуға ла, шуға күрә** — поэтому

**тимәк** — значит

**шулай булғас, шуның һөҙөмтәһендә** — в результате этого

**әгәр, әгәр ҙә** — если

**йәғни** — то есть

**гүйә** — словно һ. б.

Союзы усиливают значение, содержание предложения.

**3.** Йәйәләрҙе асып, күсереп яҙығыҙ. Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ.

1. Кәүҙәһе күл (дә), ҡойроғо ҡоро (ла).
2. Эҫе (лә), һыуыҡ (та) ҡурҡытмай мине.

3. Мунса (ла) бар, өй (ҙә) юҡ, урман (да) бар, ҡыр (ҙа) юҡ.

4. Кешеләрҙе алып оса, үҙе ҡошҡа оҡшамаған; сатыр кеүек йәйелһә (лә), ел-ямғырҙан һаҡламай.

5. Бер уйлаһаң, иҫ китерлек: кәрәк булһа, ташлайҙар; кәрәге бөтөү менән, күтәрә (лә) башлайҙар.

Теркәүестәр ҡулланып, йомаҡтарҙың яуаптарындағы һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ. Уларҙы тәржемә итегеҙ.

**4.** Тасуири уҡығыҙ.

Төн сигенде. Урман яғынан арыған юлсы күренде. Ҡарашы бер аҙ моңһоу, тик ғорур, өмөтлө. Уның торошонан инде илде иңләп-буйлап бик күп ерҙәр үтеүе, тик эҙләгәнен һаман тапмағанын һиҙергә була.

Әммә тынғыһыҙ Юламандың уйынан кире ҡайтырға һис иҫәбе юҡ. Ул һаман алға ҡарай, алға атлай. *(Ә. Вахитов)*

1. Теркәүестәрҙе билдәләгеҙ.
2. *Сигенде, юлсы, ҡарашы, моңһоу, ғорур, һиҙеп була, тынғыһыҙ* һүҙҙәрен һүҙлек ярҙамында тәржемә итегеҙ.

**5.** Уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Һин буш ваҡытта нимә эшләйһең?
2. Музыка тыңларға ярата һыңмы? Ниндәй музыка тыңлайһың?
3. Башҡорт композиторҙары тураһында һөйләшегеҙ. Ниндәй композиторҙарҙы, уларҙың ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?
4. Ниндәй ҙә булһа музыка ҡоралында уйнай беләһеңме?
5. Башҡорт халҡының милли ҡоралы булып һаналған ҡурай тураһында нимә беләһең?
6. Ниндәй түңәрәктәргә йөрөйһөң. Унда нимә эшләйһең?

**музыка ҡоралында** — на музыкальном инструменте

**6.** Һөйләмдәрҙе, тейешле хәрефтәр һәм теркәүестәр өҫтәп, күсереп яҙығыҙ.

Ҡ__мыҙ__а у__нау — теш өс__н яҡш__ гимнастика, ... ул т__штәрҙе нығыта, ... тын юлдарын ки__әйтә. ... физик ... психологик торошҡа тәьҫир итә: барма__тар__а нервылар әүҙемләшә ... һа__лыҡҡа я__шы тәьҫир итә.

**Теркәүестәр:** һәм, шуға ла, йәнә, һәм, шулай уҡ.

**тәьҫир итә** — влияет, действует

**Беләһегеҙме?**

**Һай, ҡумыҙы, ҡумыҙы!**

Ҡумыҙ — бик боронғо һәм бөтә Ер шарына таралған музыка ҡоралдарының береһе. Уны Европала, Алыҫ Көнсығышта, Көньяҡ Америкала һәм Африкала, Волга буйы һәм бик күп төрки халыҡтарында — бөтәһе 97 милләттә осратырға мөмкин. Тик уны төрлө ерҙә төрлөсә атайҙар, төҙөлөшөндә лә ҙур булмаған айырмалар бар. Мәҫәлән, сыуаштар уны — ҡапас, үзбәктәр — чанг-кобуз, украиндар — дрымба, итальяндар — иренле арфа, японлар мукури тип йөрөтә. Рәсәйҙә был инструмент элек-электән «варган» исеме менән билдәле. Бер халыҡ легендаһына ышанһаң, был инструмент ғүмерен йәшен һуҡҡан ағастан башлаған икән. Шуға ла, элек ағастан һәм һөйәктән эшләнгән ҡумыҙҙарҙың да булғанын иҫкә алһаң, кескәй генә ябай был ҡоралдың ҡайһы быуаттарҙа барлыҡҡа килгәнен аңлап була. Еҙ, баҡыр, ҡорос ҡумыҙҙарҙы кешеләр металл таба башлағас эшләгән.

Беҙҙең республикала ҡумыҙ бөгөн дә төрлө концерт, конкурс, смотрҙарҙа киң ҡулланыла. *(Г. Галина)*

**милләт** — нация, национальность
**еҙ** — медный, латунный
**атайҙар** — называют
**ҡорос** — сталь
**йәшен** — молния
**айырма** — разница

1. Ҡумыҙ ҡайһы илдәрҙә таралған?
2. Ҡумыҙҙың төрлө халыҡта таралған булыуы нимә менән бәйле?
3. Ҡумыҙҙы күргәнегеҙ, уның яңғырауын ишеткәнегеҙ бармы? Инструмент табырға тырышығыҙ һәм уйнап ҡарағыҙ.

**7.** Тексты уҡығыҙ. Кем ул Роберт Заһретдинов?

## Ҡумыҙсы Роберт Заһретдинов

Милли музыка ҡоралы — ҡумыҙҙың популярлаша барыуында Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Роберт Заһретдиновтың роле бик ҙур. Ул бәләкәйҙән ҡумыҙҙа уйнау серҙәрен аса башлай. Тәбиғәт күренештәренә оҡшатып уйнарға өйрәнә.

Роберт ағай баянда ла уйнай. Өфө музыка педагогия училищеһында оҙаҡ йылдар баян класында эшләй һәм был инструмент өсөн 300-ҙән ашыу пьеса ижад итә.

Ә шулай ҙа Роберт Заһретдинов — иң элек оҫта ҡумыҙсы. Уның иң ҙур уңышы — 1991 йылда Яҡут-Сахала ЮНЕСКО ойошторған II Халыҡ-ара конгреста ҡатнашып, «Донъяның виртуоз ҡумыҙсыһы» исеменә лайыҡ булыуы. Унда 22 илдән килгән 200 башҡарыусы араһынан беренсе урынды һәм приз ала ул! Был приз — алтын ялатылған платинанан авторҙың үҙенә генә исемләп эшләнгән ҡумыҙ! Америка һәм Япония конструкторҙарының ижад емеше.



Тауышы бик көслө: хатта микрофонһыҙ ҙа ҙур залды яңғыратып уйнап була. Конгреста ул «Хәтирә», «Кәкүк» кеүек башҡорт халыҡ көйҙәрен һәм үҙе ижад иткән «Ауыл күренештәре», «Урал иртәһе»н — барлығы 21 әҫәр уйнай. Зал уны алҡыштарға күмә. Сәхнә артында уны журналистар, хәбәрселәр уратып ала... Американдар шунда уҡ «Ҡымыҙ тарихы» тигән фильм төшөргән. *(Г. Галина)*

**отоп ала** — запоминает
**иң элек** — в первую очередь
**уратып ала** — окружили
**оҡшатып уйнарға** — играть подражая
**алтын ялатылған** — позолоченный

1. Роберт Зәһретдиновтың иң ҙур еңеүе тураһында һөйләгеҙ.
2. Текстан теркәүестәрҙе табығыҙ.

**8.** Уҡығыҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә итегеҙ. Һүҙлек диктантына әҙерләнегеҙ. Был һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

милли, милләт, ҡорал, ҡумыҙ, оҫта, оҡшатып уйнау, бай тарихлы, варган, халыҡ күңеле, лирик биҙәктәр, файҙалы, музыкаға булған мөхәббәт, әүәҫ, ижад емеше

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Словосочетание (һүҙбәйләнеш)** — это сочетание двух (и более) знаменательных слов, связанных между собой по смыслу и грамматически. Например, **алма баҡсаһы, матур сәскәләр.**

Словосочетание, как и слово, служит названием предмета. Отличие их в том, что слово имеет широкое, общее значение. Например, слово **өй** — дом обозначает любой, всякий дом как строение;

конкретные разновидности слова **өй** — дом обозначаются словосочетаниями:

**бер ҡатлы өй** — одноэтажный дом,
**ағас өй** — деревянный дом и т. д.

**9.** Һүҙбәйләнештәрҙе тәржемә итегеҙ. Үҙегеҙгә оҡшаған һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

1) выступление участников, участники кружка, художественная самодеятельность, выступление на концерте, праздничный концерт, произвести на зрителей, сильное впечатление

2) мастерски исполнить башкирские и татарские народные танцы; песни русских, башкирских композиторов; башкирские и русские народные песни

3) каждый номер, номер концерта, долго аплодировать, самодеятельные артисты

**?** **10.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Класташтарығыҙ йыр, бейеү, төрлө музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәткән түңәрәктәргә йөрөймө?
2. Һеҙҙең ҡалала (ауылда) балалар өсөн сәнғәт мәктәбе бармы? Булһа, кемдәр ниндәй түңәрәккә йөрөй?
3. Байрамдарҙа атай-әсәйҙәр өсөн концерт ҡуяһығыҙмы?
4. Һеҙҙең мәктәпкә (лицейға, гимназияға) Өфөнән йәки башҡа ҡалаларҙан сәнғәт оҫталары килгәне, сығыш яһағаны бармы? Ниндәй сәнғәт оҫталарын беләһегеҙ?
5. Класташтарығыҙ араһында киләсәктә үҙен сәнғәткә арнарға теләүселәр бармы?

**11.** Түбәндәге диалогты тултырығыҙ. Яуаптар тулы булһын.

— Булат, һаумы. Һине күптән күргәнем юҡ. Хәлдәрең нисек?

— ...

— Арыу ғына. Бына әле үҙешмәкәр түңәрәктәрҙең смотрына китеп барам. Мин унда думбырала уйнайым. Булат, һин бында оҙаҡ булаһыңмы?

— ...

— Үҙем төшөргән һүрәт тураһында һинең менән һөйләшергә ине. Фекереңде белгем килә.

— ...

**12.** Түбәндәге һөйләмдәрҙе теркәүестәр ҡулланып киңәйтегеҙ.

1. Урамда һалҡын ҡыш.
2. Байрам килеп етте.
3. Әсәнән бөйөгөрәк кеше юҡ.
4. Донъяла һөнәрҙәр күп.
5. Ҡоштар ҡайтыуға күп ҡалманы.
6. Аквариумдағы балыҡтарҙы ҡустым тәрбиәләй.
7. Китап — һинең дуҫың.
8. Әсәй эштән ҡайтыуға һеңлем менән өйҙө йыйыштырып ҡуйҙыҡ.
9. Беҙҙең ғаилә газета-журналдарға яҙылды.

## Мәшһүр бейеүсе Рәшиҙә Туйсина



*Данлыҡлы бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшиҙә Туйсина Баймаҡ районында 1942 йылдың йәмле яҙында донъяға килә.*

*Ул атаҡлы Фәйзи Ғәскәров ансамбленә алыныр өсөн имтиханда ҡатнаша һәм 17 йәшендә ошо ансамблдә эшләй башлай. «Гөлнәзирә», «Ете ҡыҙ», «Бишбармаҡ», «Заһиҙә», «Көйәнтә» бейеүҙәре менән гастролдәрҙә йөрөй.*

*Бейеү ансамбле менән Рәшиҙә Туйсина ярты донъяны урап сыҡты.*

*Швецияла Ишмулла Дилмөхәмәтов менән уның тураһында бер газета шулай яҙҙы: «Артист (И. Дилмөхәмәтов) флейтаға оҡшаш таяҡтан — ҡурай тип аталған халыҡ инструментынан ғәжәп моңло тауыш сығарҙы. Илаһи бер моң аҫтында күҙ яуын алырлыҡ сәхнә кейемендәге бейеүсе Рәшиҙә Туйсина, йомшаҡ ҡына баҫып, һәр кемде үҙенә*

*ҡаратты һәм үҙ иленең һоҡланғыс бейеүҙәре менән таныштырҙы».*

*Рәшиҙә Туйсина әлеге көндә лә йәш артистарҙы бейергә өйрәтә, матур бейеүҙәр һала, халҡыбыҙҙың тарихын, уның йолаларын, ғөрөф-ғәҙәтен, иң яҡшы сифаттарын бейеү теле менән тамашасыларға еткерә.*

**имтихан тапшыра** — сдает экзамен
**урап сыҡты** — объездила
**йола** — обычай, обряд
**ғөрөф-ғәҙәт** — обычаи и нравы
**үҙенә ҡаратты** — *зд.*: привлекла к себе внимание
**сәнғәт** — искусство
**күҙ яуын алырлыҡ** — ослепительно красивый

1. Рәшиҙә Туйсина тураһында быға тиклем беләһегеҙме? Бейегәнен күргәнегеҙ бармы?
2. Тағы ла ниндәй оҫта бейеүселәрҙе беләһегеҙ? Шуларҙың береһе тураһында сығыш яһарға әҙерләнегеҙ.

**13.** Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙе тәржемә итегеҙ, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Һүҙбәйләнештәр ҡулланып, текст төҙөгөҙ.

оҫта бейеүсе, иҫ китерлек, күҙ яуын алырлыҡ, алҡыштарға күмә, йыр-моңға мөхәббәт, тарихты данлай, Тыуған илебеҙ ғорурлана

**14.** Тексты уҡығыҙ.

Танец как своеобразный язык возник раньше слова. История башкирского танца уходит в глубь веков. Первые танцы были связаны с судьбой человека, его трудом, с его наивными представлениями об окружающем мире. О чем рассказывали первые танцы? Наверное, о том, как человек берет оружие, чтобы идти на охоту, или о том, как трудится на своем поле.

В башкирских танцах сохранились движения, подражающие бегу коня, скачкам. Женщины изображали в танце работы по хозяйству, приготовление пищи, прядение.



В танце нашли отражение характер, темперамент, идеалы народа, его отношение к добру и злу.

?

1. Бейеү тураһында башҡорт телендә һөйләгеҙ.
2. Түбәндәге һүрәт буйынса фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
3. Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, «Ете ҡыҙ» бейеүе тураһында һөйләгеҙ.

**15. I.** Түбәндәге темаларға диалогтар төҙөгөҙ.

1. «Театрҙа».
2. «Мөғжизә көткәндә».
3. «Яңы йыл кисәһендә».
4. «Касса янында».
5. «Артистар менән осрашыу».

| |
|---|
| юлсы<br>ҡорос<br>еҙ<br>алҡыштар |

**II.** Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдары булған ҡурай һәм ҡумыҙҙы сағыштырығыҙ. Уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары тураһында һөйләгеҙ.

сәхнә, мөғжизә, шәхес, алҡыштар, моң, көй, моңло, яғымлы, ҡыңғырау, милләт; данлы улы (ҡыҙы), оҫта бейеүсе (ҡумыҙсы), Ватаныбыҙҙы данлау, хөрмәт итеү, Тыуған илгә тоғролоҡ, һайрар ҡоштар, көслө ихтыярлы, талантлы шәхес

# ИСЕМЕҢ МАТУР, КЕМДӘР ҠУШҠАН?

## Исемдәрҙә — ил тарихы

Бала тыуа — донъяға яңы кеше килә. Күп ата-әсә балаға исемде алдан уйлап, туғандары менән кәңәшләшеп ҡуша. Исем ҡушҡанда уның яңғырашына, мәғәнәле булыуына, русса-башҡортса әйтелешенә иғтибар итәләр. Бала исемен ғүмер буйы йөрөтә, исем кешенең бер сифатына әйләнә. Ҡыҙҙар исеменә ҡарағанда, малайҙарға исем ҡушыуҙа ҙур яуаплылыҡ ята, сөнки уларҙың исеме киләсәктә тағы ла бер-нисә кешенең исеменә әйләнә.

**сифат** — качество
**кәңәш** — совет
**алдан уйлап** — продумывая заранее

**1.** Белешмә өсөн һүҙҙәрҙе ҡулланып уҡығыҙ. Күсереп яҙығыҙ.

Башҡорт исемдәренең тәрбиәүи мәғәнәһе лә бар. ... бәләкәйҙән исеменең ... белеп, исемен яратып үҫһә, унда үҙенең ... ҡарата ғорурлыҡ уяна. Һәр кеше исемен ... йөрөтһөн, боҙмаһын, үҙгәртмәһен, оялмаһын, ... атай-әсәй был ... яратып, матур теләктәр менән ҡуша. Шуға ла халыҡта «исемеңә тап төшөрмә», «исемеңде сығарма» тигән һүҙҙәр бар.

Башҡорт халҡы элек-электән яңы тыуған балаға исем ҡушыуға бик яуаплы ҡараған. Исем ҡушыу ғаиләнең генә түгел, ә бала йәшәгән төбәктең байрамына әйләнгән. Һәр кем йәш балаға, исем туйы менән ҡотлап, бүләктәр алып килер булған. Ә баланың ата-әсәһе ҡунаҡтарға бүләк әҙерләгән.

**уяна** — *зд.*: возникает
**йөрөтһөн** — пусть носит
**боҙмаһын** — пусть не портит
**үҙгәртмәһен** — пусть не меняет

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *сөнки, бала, милләтенә, мәғәнәһен, ғорур, исемде.*

1. Һеҙҙең класта Гөлназ, Гөлдәр һәм «гөл» һүҙе менән килгән башҡа исемдәрҙе — Гуля, Зөлфиә, Зөлфиреләрҙе — Зуля,

Миләүшә, Мәҙинәләрҙе Муля тип йөрөтмәйҙәрме? Был дөрөҫ буламы?

2. Һеҙ «Исем туйы» байрамын күргәнегеҙ бармы?

**2.** Исем ҡушҡанда теләгән теләктәрҙе уҡығыҙ. Үҙегеҙгә оҡшағандарын яҙып алығыҙ һәм мәғәнәһен аңлатығыҙ.

1. Ата-әсәңә иш булып үҫ!
2. Ауыҙыңа бал да май: телең балдай татлы булһын, эшең майҙай шыма барһын!
3. Изгелекле, игелекле бала бул!
4. Ватаныңды данлар бала бул!
5. Исемең үҙеңде үҫтерһен!

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Бәйләүестәр** — Послелоги

В башкирском языке в отличие от русского нет предлогов, их значения передаются **послелогами**. Например:

**менән** — с, совместно с;
**өсөн** — за, из-за, благодаря, для, ради, чтобы;
**кеүек, шикелле, һымаҡ** — как, словно, подобно;
**табан, ҡарай** — к, по, по направлению;
**тиклем, ҡәҙәр, саҡлы** — до, вплоть до;
**бирле** — с, с тех пор;
**башҡа** — кроме;
**һуң** — с, после, затем и др.

**Послелоги** сочетаются с именами существительными, местоимениями и всегда следуют за ними.



**3.** Диалогты уҡығыҙ. Үҙегеҙ ҙә «гөл» һүҙе менән башланған ҡатын-ҡыҙ исемдәрен яҙығыҙ.

— Гөлфиә, Гөлфирә, ниңә һеҙҙең икегеҙгә бер исем ҡушҡандар? Һеҙ игеҙәк булғанғамы?

— Эйе, Настя, беҙ игеҙәк булғанға оҡшаш исем бирелгән. Тик беҙҙең исемдәр бер төрлө түгел.

— Икегеҙ ҙә гөл инде.

— Эйе. Башҡорт телендә «гөл» һүҙе менән исемдәр бик күп, ә исемдең икенсе өлөшөнөң дә мәғәнәһе бар. Мәҫәлән, Миңлегөл, Гөльямал, Гөлбикә, Наҙлыгөл.

— Һеҙҙең исемдәр ҙә шулаймы?

— Эйе. «Гөлфиә» — фарсы һүҙе, «гөлгә оҡшаш» тигәнде аңлата, ә «Гөлфирә» — башҡорт теленә һуңғараҡ ингән — «гөл һатыусы» мәғәнәһен бирә.

**4.** Бирелгән һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ, бәйләүестәрҙе күрһәтегеҙ.

тыныслыҡ өсөн, көн һайын, йылға аша, батырҙар хаҡында, йыл буйы, Илдар менән, өйгә тиклем, ҡыш буйына

**5.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр йә бәйләүестәр ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. Уларҙың ниндәй килеш талап итеүен билдәләгеҙ.

1. Урманға ... беҙҙе Мансур оҙатты. 2. Йортонан иртә сығыуына ..., Юлиә киноға һуңланы. 3. Олатайым мине мәктәпкә ... оҙатты. 4. Айрат Азаматҡа ... ҙурыраҡ. 5. Көн һыуыҡ булыуға ..., улар мәктәпкә килгәйне. 6. Атайым юл ... йырлап барҙы. 7. Беҙҙең мәктәпкә ... аҙыҡ-түлек магазины бар. 8. Уҡытыусы ағай Шүлгәнташ мәмерйәһе ... сәғәт буйы һөйләне.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *хаҡында, саҡлы, ҡарамаҫтан, ҡарағанда, тиклем, буйы, ҡарамаҫтан, ҡаршы.*

**6.** Йәйәләрҙе асып, дөрөҫ итеп уҡығыҙ.

1. Беҙ былтыр көн һайын дәрестән (һуң, тыш) урманға бара инек тә кискә (ҡәҙәр, өсөн) ағас орлоҡтары, сәтләүектәр йыя инек.

2. Шуның (арҡаһында, өсөн, тыш) беҙ орлоҡ йыйыу планын ваҡытынан (алда, тыш) үтәнек һәм башҡаларға өлгө күрһәттек.

3. Ошо файҙалы эшебеҙ (өсөн, айҡанлы, тураһында) беҙгә мәктәп дирекцияһы рәхмәт белдерҙе.

**орлоҡ** — семена
**сәтләүек** — желудь, орех

**7.** Уҡығыҙ. Һеҙ текстағы һүҙҙәр менән ризаһығыҙмы? Икенсе абзацты күсереп яҙығыҙ. Үҙегеҙҙе тикшерегеҙ.

Исем кешенең яҙмышына тәьҫир итә, тиҙәр. Исем — кешенең визит карточкаһы, ниндәй илдән, ниндәй милләттән икәнен күрһәтеп тора.

Кешенең исеме үҙе менән бергә үҫә, ҙурая бара. Һәр кем үҙенең исеме матур яңғыраһын өсөн, әлбиттә, бәләкәйҙән алып күп көс һалырға: яҡшы уҡырға, матур эштәр башҡарырға, Тыуған иле өсөн хеҙмәт итергә тейеш.

**8.** Был исемдәрҙең яҙылышын һәм мәғәнәһен хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Айһылыу — ай + һылыу (айлы төндә тыуған)
Гөлнәзирә — гөл кеүек, өлгө булырлыҡ
Зөһрә — йондоҙ исеме, матур, балҡып тора
Сулпан — таң йондоҙо
Сөмбөл — август айы исеме, ашлыҡ башаҡтары
Айбулат — ай + булат (ҡорос)
Айтуған — ай тыуғанда тыуған
Таңһылыу — таңда тыуған
Зөлхизә — ай исеме
Сәлимә — сәләмәт, иҫән-һау
Гөлбикә — гөл һымаҡ ҡыҙ
Буранбай — буранда тыуған бала

Әлеге көндә киң таралған исемдәр:

Алина — Айлина исеменән алынған — ай һымаҡ
Ғәлиә — бөйөк
Динә — дөрөҫ, ғәҙел
Айҙар — бәхетле, айлы төндә тыуған
Илдар — илен һөйөүсе
Рөстәм — баһадир, көслө

Т **9.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Һинең исемең нимә аңлата? Һине кем хөрмәтенә, ни өсөн шулай атағандар?

2. Класығыҙҙа «Исемең матур, кем ҡушҡан?» тигән иртәлек үткәрергә әҙерләнегеҙ. Ул иртәлекте ҡасан, ҡайҙа

үткәрер инегеҙ? Үҙегеҙҙең ҡалала (районығыҙҙа) йәшәгән билдәле шәхестәрҙән кемдәрҙе саҡырырға планлаштыраһығыҙ? Уны үткәреү тураһында һөйләгеҙ.

3. Һеҙҙең ғаилә шәжәрәһе бармы? Булһа, кемдә һаҡлана? Ата-бабаларығыҙҙың береһе хаҡында атай-әсәйегеҙҙән һорашып, һөйләргә әҙерләнегеҙ.

**Беләһегеҙме?**

Ҡарт ҡарға ғына аҡ суҡышлы була. Ә йәш ҡарғаның суҡышы ҡап-ҡара.

Йәмле йәй айҙарында төнө буйы сутылдашып сыҡҡан һандуғастарҙың «карттары» матур һәм оҫта һайрай. Йәш һандуғастарҙың тауышы көсһөҙ, оҫталыҡтары ла самалы була. *(«Мәктәп календары»нан)*

**10.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Текстағы һорауға яуап бирегеҙ. Был көндә һеҙ нисек шаяртаһығыҙ?

## 1 апрель менән!

1 апрель көнө бер-береңде шаяртыу ғәҙәте ҡайҙан килгән? Был бик боронғо ғәҙәт. Уны апрель — йылдың иң үҙгәреүсән, тотороҡһоҙ айы булыуы менән аңлатырға теләгәндәр.

Һауа торошо апрелдә кешеләрҙе әленән-әле аптыратып ҡуя. Шуға ла айҙың беренсе көнө шаярыу, мәрәкә менән билдәләнә, имеш. Ләкин былай аңлатыу дөрөҫ түгел. Апрель ысын яҙ айы тип иҫәпләнгән көньяҡ илдәрендә лә был ғәҙәт күптән йәшәп килгән. Боронғо индустарҙа шаярыу, мәрәкә көнө булып — 31 март, боронғо Римда иһә ошо уҡ көн «аңралар байрамы» тип иҫәпләнгән. Был ғәҙәт боронғолоҡ төпкөлөнән хәҙерге Европа халыҡтарына ла күскән. *(А. Григорян)*

П **11.** «Исемдәрҙә ил тарихы» темаһы буйынса проект эше ҡороғоҙ. Өҫтәлмә материал ҡулланығыҙ.

# БОРОН-БОРОН ЗАМАНДА...

**1.** Тексты тасуири уҡығыҙ һәм «Нимә ул әкиәт?» тигән һорауға яуап бирегеҙ.

Әкиәт — халыҡ ижадының бик боронғо һәм киң таралған жанры. Һеҙҙең күбегеҙ өлкәндәрҙең әкиәт һөйләгәнен ишеткәне бар. Ул, ғәҙәттә, «борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай» тип башлана һәм «әле лә йәшәп яталар, ти» тип тамамлана. Ошондай традицияла башланыу һәм тамамланыу әкиәткә хас алым: ул тыңлаусының иғтибарын тиҙ генә йәлеп итер өсөн шулай бирелә.

Йөкмәткеһенә ҡарап, башҡорт халыҡ әкиәттәре өс төркөмгә бүленә: тылсымлы (волшебные), тормош-көнкүреш (бытовые) һәм хайуандар тураһындағы (о животных) әкиәттәр.

**2.** Әкиәтте тасуири уҡығыҙ. Ни өсөн әкиәт «Ҡан-ҡәрҙәш» тип атала?

## Ҡан-ҡәрҙәш

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда бер ауылда йәшәгән, ти, бик яуыз хан. Ул, үҙенең сәсен алдырыу өсөн, аҙна һайын бер егетте саҡырта икән. Килгән егеттәрҙең береһе лә өйҙәренә ҡайтмаған: хан уларҙың башын ҡырҡтырып торған.

Шул ауылда әбей менән бабай йәшәгән. Улар бик ярлы булған. Сират кесе улдарына еткән. Улдары китер көндө әсәһе ҡара ондан, үҙенең күкрәк һөтөн ҡушып, күмәс бешергән һәм улына биреп ебәргән.

Бер заман егет хан һарайына барып еткән. Үткер бысаҡ тотторған да хан егеткә:

— Сәсемде ал! — тип бойорған.

Хан тажын һалыу менән, егеттең иҫе киткән: яуыздың түбәһендә кәзәнеке кеүек мөгөҙ һерәйеп тормаһынмы?! Сәсен алдырып бөткәс, хан икенсе бүлмәгә сығып киткән. Егет асығып киткән һәм әсәһе биреп ебәргән күмәсте ашай башлаған.

Шул ваҡыт хан килеп ингән дә:

— Нимә ашайһың? Миңә лә бир әле, ауыҙ итеп ҡарайым, — тигән.

Күмәстең бер киҫәген егет ханға тотторған. Ҡап-ҡара был күмәсте хан ашап бөткән дә:

— Бик тәмле икән! Нимәнән бешерелгән һуң был? — тип һораған.

— Алабута ононан, әсәйем үҙенең күкрәк һөтөн ҡушып бешерҙе.

Хан аптырап ҡалған. «Әсәһенең һөтө менән бешерелгәс, мин хәҙер был егет менән ҡан-ҡәрҙәш булдым бит. Уның ҡанын ҡойорға минең хаҡым юҡ!» — тип уйлаған ул.

**яуыз** — злой
**сәс алдырыу** — брить голову
**сират** — очередь
**күкрәк һөтө** — грудное молоко
**күмәс** — пресный хлеб
**бысаҡ** — нож
**таж** — корона
**иҫе киткән** — удивился (он)
**алабута** — лебеда
**ҡан-ҡәрҙәш** — родной по крови
**мөгөҙ** — рог
**асығып киткән** — проголодался (он)
**ауыҙ итеп ҡарайым** — попробую
**аптырап ҡалған** — растерялся, не знал что и делать (он)

1. Хан ниндәй булған?
2. Егеттең атаһы менән әсәһе нисек йәшәгән?
3. Әсәһе егеткә нимә биреп ебәргән?
4. Ни өсөн хан егетте үлтермәгән? Фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

**3.** Уҡығыҙ. Сәскә исемдәрен тәржемәләре менән айырып яҙығыҙ.

одуванчик, һары мәтрүшкә, бәпембә, ҡыңғырау сәскә, подснежник, мать-и-мачеха, зверобой, күгәрсен күҙ, гвоздика, ҡәнәфер сәскә, колокольчик, незабудка, үгәй инә үләне, душица, меңьяпраҡ, шиповник, подорожник, подсолнух, умырзая, юл япрағы, мәтрүшкә, гөлйемеш, көнбағыш, тысячелистник

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Киҫәксәләр** — Частицы

В башкирском языке частицы имеют особую значимость.
Классификация **частиц**
а) Вопросительные частицы (һорау киҫәксәләре): **-мы, -ме, -мо, -мө** — ли.
б) Усилительные частицы (көсәйтеү киҫәксәләре): **та; тә; да, дә; ҙа, ҙә; ла, лә** — и.
в) Предположительные частицы (икеләнеү киҫәксәләре): **-дыр/-дер, -дор/-дөр, -ҙыр/-ҙер, -ҙор/-ҙөр, -лыр/-лер, -лор/-лөр, -тыр/-тер, -тор/-төр** — видимо, вероятно, по-видимому.
г) Частицы **иң, бик** (очень, самый) выражают высшую степень качества: **Иң** бейек йорт. — Самый высокий дом.
д) Частица **түгел** выражает отрицание:
Мин студент **түгел.** — Я не студент.

Т **4. I.** Тасуири уҡығыҙ. Шиғыр тураһында нимәләр әйтер инегеҙ? Фекерегеҙҙе әйтегеҙ һәм дәлилләгеҙ.

Зәңгәр тауҙар илендә
Йәшәгән, ти, бер болан.
Ябай болан булмаған,
Алтын мөгөҙлө булған.

Болан бик етеҙ булған,
Бейек тауҙарҙы һөйгән.
Киртләс-киртләс үрҙәрҙе,
Ҡаяларҙы үҙ күргән.

*(Ә. Таһирова)*

!! **II.** Әкиәтте уҡығыҙ. Йәйәләр эсендәге ҡылымдарҙың ҡайһыһын ҡуйһаң, дөрөҫ була? Әкиәтте дауам итегеҙ.

## Кем аҡыллыраҡ?

Борон заманда бер бабай менән айыу (дуҫлашты, дуҫлашҡан). Улар бергәләп шалҡан (сәстеләр, сәскәндәр). Бына уңышты йыйыу ваҡыты (етте, еткән). ...

**?** 1. Әкиәт ни өсөн «Кем аҡыллыраҡ?» тип атала?
2. Айыуҙы нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Тасуирлап һөйләгеҙ.

**5.** Тексты уҡығыҙ һәм тәржемә итегеҙ. Һеҙ кеше характерында ниндәй сифаттарҙы үҙ итәһегеҙ? Текска нигеҙләнеп, башҡорт телендә дауам итегеҙ.

Часто к Анне Тимофеевне Гагариной — матери первого космонавта — приходили пионеры. Однажды они спросили у нее: «Анна Тимофеевна, какие качества в характере человека вы больше всего цените?»

— Какие качества? Доброта, смелость, мужество. Вот таким был Юра. Он был очень смелый, очень добрый с самого детства. В школе всегда старался помочь отстающему товарищу. Заступался, когда кто-нибудь обижал человека. Не давал никогда в обиду младшего или слабого.

*(Г. Цепулин)*



*Факиһа Һаҙый ҡыҙы Туғыҙбаева 1950 йылдың 1 ғинуарында Бүздәк районының Ҡаңны ауылында тыуа. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай.*

*Факиһа Туғыҙбаеваның «Мең ялҡыны» тигән тәүге шиғырҙар китабы 1980 йылда донъя күрә. Унан һуң бер-бер артлы «Күҙ ҡараһы», «Йондоҙ асам», «Сәғәт моңо», «Фатихамды бирәм һиңә», «Минең ҡошом Һомай» шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтыҡтары баҫылып сыға.*

*Шағирә балалар әҙәбиәтендә лә ихлас эшләй. Ул «Шаҡмаҡлы дәфтәр», «Яңы күлдәк», «Болонда уйнай сәскәләр», «Алтын аҫҡыс — бүләккә!» тигән шиғыр, хикәйә, әкиәт китаптары авторы. Факиһа Туғыҙбаеваның рус телендә «Хлеб да соль», «Камень счастья» исемле шиғырҙар йыйынтыҡтары бар.*

*1992 йылда шағирә «Сәғәт моңо» китабы өсөн Рәми Ғарипов исемендәге әҙәби премияға лайыҡ булды. 1995 йылда «Фатихамды бирәм һиңә» китабы өсөн уға Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә.*

*Факиһа Туғыҙбаева — Башҡортостандың халыҡ шағирәһе.*

## Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?

Һалҡын көҙ көнө. Айыу балаһын һуңғы тапҡыр уйнарға сығарҙы. «Оҙаҡ йөрөмә, улым, ҡуян дуҫың менән әҙерәк уйна ла ҡайт», — тине.

Тайыштабан, ҡойолған япраҡтарҙы ҡыштырлатып, тар һуҡмаҡ буйлап атланы. Ниңәлер йоҡоһо килә уның. Нимә булды икән? Ҡыҙыҡ.

Яҡында ғына берәү әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе. Айыу балаһы уны шунда уҡ таныны. Былай шәп итеп Оҙонҡолаҡ ҡына һыҙғыра белә. Үҙе лә ялт итеп, Тайыштабан белмәгән ниндәйҙер нәмә тотоп, ҡыуаҡлыҡ эсенән килеп сыҡты.



— Нимә булды? — тип һораны ул Тайыштабандан. — Күҙҙәреңде сак асып тораһың, ауырыйһыңмы әллә?

— Юк, ауырымайым. Ә һинең кулда нимә?

Оҙонғолак аптырап:

— Шуны ла белмәйһеңме?.. Сана бит был, һин түгел, минең бәләкәй кустым да белә уның нимә икәнен. Ысынлап күргәнең юк инеме?

— Күргәнем юк шул. Уның менән нимә эшләйҙәр? Бал кортоноң ояһына менә торған баҫкыс түгелме?

Куян рәхәтләнеп көлдө, дуҫының юкка ғына үпкәләп бармағанын белә ул.

— Санаға ултырып, тауҙан шыуалар, — тип аңлатты Оҙонғолак. — Тик тиҙерәк кар яуһын ине!.. Их, рәхәт тә һуң тауҙан елеүҙәре! Кош осоп барамы ни! Э-һей!

— Оҙонғолак, минең дә санала шыуғым килә!

— Көҙ санала шыуып булмай. Кар яуғас та мин һине тауға саҡырырмын, яраймы?

Кыш килде. Бейек тау итәген кар капланы. Урман ап-ак булып тынып калды. Иртә менән иптәштәрен эйәртеп, Оҙонғолак бейек тауға йүгерҙе.

— Э-һей!..

— Эй!..

Төрлө матур саналар, бер-бер артлы ярыша-ярыша, тауҙан елде. Күңелле лә инде кыш көнө, кар туҙҙырып, аҫка атылаһың да тағы тауға йүгерәһең.

— Э-һей!..

— Эй!..

Оҙонғолактың иҫенә капыл Тайыштабан килеп төштө. «Тайыштабанға әйтергә бөтөнләй онотканмын бит, көтәлер инде», — тип уйланы ул һәм, санаһын һөйрәп, кар өҫтөндә эҙ калдыра-калдыра, дуҫына ашыкты.

Оҙонғолак элеккесә, тәҙрә төбөнә барып етеү менән, һыҙғырып ебәрҙе. Тик дуҫы, ниңәлер, күренмәне. Тағы һыҙғырҙы, тағы көттө. Ишек тә шакыны, ләкин берәү ҙә тауыш бирмәне. Оҙонғолак уйға калды.

Ниңә Тайыштабан уйнарға сыкманы икән? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**һуңғы тапҡыр** — в последний раз
**һыҙғырып ебәрҙе** — свистнул
**ялт итеп** — быстро, ловко
**ҡыуаҡлыҡ эсенән** — из-под кустарника
**ауырыйһыңмы әллә?** — болеешь что ли?
**ишек шаҡып ҡараны** — постучал в дверь
**баҫҡыс** — лестница
**үпкәләп бармай** — не обижается
**аҫҡа атылаһың** — катишься вниз
**ҡапыл иҫенә төштө** — вдруг вспомнил
**ашыҡты** — заторопился
**уйға ҡалды** — задумался

?

1. Тайыштабан Оҙонғолаҡты ҡасан осрата?
2. Оҙонғолаҡ Тайыштабанға нимә күрһәтә?
3. Тайыштабан ни өсөн сананың нимә икәнен белмәй?
4. Оҙонғолаҡ Тайыштабанды урамға нисек саҡыра?
5. Тайыштабан менән Оҙонғолаҡтың үҙ-ара мөнәсәбәте һеҙгә оҡшанымы?
6. Автор ҡуйған һорауға яуап бирегеҙ.

| тылсымлы |
|---|
| тун |
| яҙмыш |
| ғәҙәт |

**6.** Беренсе бағаналағы һөйләмдәргә ҡарап, икенсе бағаналағыларҙы тултырып яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| **1. Ғинуарҙа көндәр бик ҡыҫҡа булды.** | **Февралдә көндәр ... башлай.** |
| **2. Ғинуарҙа ҡояш йылытмай.** | **Февраль аҙағында ҡояш ерҙе ... башлай.** |
| **3. Ғинуарҙа ҡар ап-аҡ була.** | **Февралдә ҡар ... башлай.** |

**7.** Йомаҡтарҙы уҡығыҙ. Яуаптарын табып, яҙығыҙ. Хайуандарҙың береһе тураһында һөйләгеҙ.

1) Йәйен — урманда батша,
Ҡышын — ҡарҙан да аҫта.



2) Алғы аяғы ҡыҫҡа,
Сабырға ул бик оҫта,
Һоро тунын һала ла
Аҡ тунын кейә ҡышҡа.



3) Ҡойроғо көлтә кеүек,
Яратҡаны — сәтләүек,
Ҡыуышҡа яһай өйөн,
Был ни, әлбиттә, ... .





4) Ҡыҙыл билле ҡыҙ килде,
Ҡыланды ла юғалды.



5) Энәһе бар — тотоп булмай,
Энәһе менән тегеп булмай.

**Үҙегеҙҙе тикшерегеҙ**

1. Әкиәттәрҙең әһәмиәте нимәлә?
2. Башҡорт халыҡ әкиәттәрен беләһегеҙме? Бер әкиәттең йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
3. Ниндәй яҙыусыларҙың әкиәттәрен уҡығанығыҙ бар?

**Ял минуттарында**

ЛЫҠҘЫ, ҠА, ККҮ, ОҺРО, ШӘЛЙЕ, ААҠР, ЫҺАР, ЛА

Һеҙгә был һүҙҙәр аңлашыламы? Юҡтыр, сөнки унда хәрефтәр аҙашҡан. Уларҙы үҙ урындарына ҡуйһағыҙ, төрлө төҫтәр табырһығыҙ.

**Көләмәстәр**

Музейҙы ҡарап сыҡҡас, бер малай атаһынан:

— Атай, ниңә бөтә данлыҡлы кешеләр музейҙа йәшәгән ул? — тип һорай икән.

* * *

Уҡытыусы дәрескә һуңлаған уҡыусынан:

— Ниңә һуңланың? — тип һорай.

— Атайымдың, уҡырға бер ваҡытта ла һуң түгел, тигәнен ишетеп ҡалғайным, — тип яуап бирә уҡыусы.

# БЕРҘӘМЛЕК, ДУҪЛЫҠ, ТЫНЫСЛЫҠ



*Шәриф Биккол (1924—1995) Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарлыман ауылында тыуған. Ул Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан шағир.*

*Шәриф Биккол балалар өсөн бик күп шиғырҙар, пьесалар ижад иткән, оҙаҡ йылдар «Пионер» (хәҙерге «Аманат») журналында эшләгән.*

*Шәриф Биккол — республиканың Ғәлимов Сәләм исемендәге премия лауреаты.*

## Тыныслыҡ кәрәк

Әле хәтерҙә, хәтерҙә ул көндәр —
Ерҙе иңрәткән һуғыш йылдары.
Мәңге сисмәҫкә шаҡарҙыҡ беҙ
Яуыз дошмандың ҡанлы ҡулдарын.

Тормош хаҡына, киләсәк хаҡына
**Көлдән, күмерҙән ерҙе әрсенек.**
Күпме етемдәр атаһын-улдарын
Иҫкә алалар һаман әсенеп.

Ҡорос ҡул менән беҙ тыныс хеҙмәткә
Ерҙә мәңгелек һәйкәл ҡоябыҙ.
Инде һис ҡасан ҡот осҡос ялҡынға
**Ерҙе үртәргә ирек ҡуймабыҙ.**

**хәтерҙә** — в памяти
**хаҡына** — ради
**шаҡарҙыҡ** — вывернули (руки)
**иңрәү** — стонать
**ялҡын** — пламя
**әрсенек** — *зд.:* очистили
**етем** — сирота
**әсенеп** — с горечью
**ҡот осҡос** — страшный
**үртәргә** — спалить

1. Шиғырҙың төп идеяһы ниндәй юлдарға һалынған?
2. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән юлдарҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

**1.** Тексты уҡығыҙ һәм абзацтарға бүлегеҙ. Тәржемә итегеҙ.

## Дуҫлыҡ

«Дуҫлыҡ» һүҙе кеше араһындағы иң изге мөнәсәбәтте аңлата. Дуҫлыҡ маҡсаттарға ирешергә, ауырлыҡтарҙы бергә еңеп сығырға, берҙәм йәшәргә ярҙам итә, ижад итергә ҡанат ҡуя. Дуҫлыҡ ептәре өҙөлмәһен өсөн, билдәле ҡағиҙәләрҙе үтәргә кәрәк: бер-береңә ышанырға, таянырға, иғтибарлы булырға; дуҫыңдың эштәре, тормошо менән ҡыҙыҡһынырға, ундағы яҡшы сифаттарҙы үҙләштерергә, үҙеңдәге шундай уҡ сифаттар менән уртаҡлаша белергә; үҙ-ара ярҙам итешергә, талапсан булырға, дуҫыңдың етешһеҙлектәренә битараф ҡалмаҫҡа, кәмселектәрҙән ҡотолорға ярҙам итергә. Ауыр һынауҙарҙы үтеп сыҡҡан дуҫлыҡ ҡына йәшәргә хаҡлы. *(В. Баймырҙина)*

**изге мөнәсәбәт** — доброе отношение
**ышанырға** — верить
**һынауҙар үткән** — прошедший испытания
**өҙөлмәһен өсөн** — чтобы отношения не разорвались
**ҡанат ҡуя** — окрыляет
**талапсан булырға** — быть требовательным

1. Дуҫлыҡ ҡағиҙәләрен дәфтәрегеҙгә күсереп яҙығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.
2. Дуҫығыҙ менән һеҙҙең аралағы мөнәсәбәт ошо ҡағиҙәләргә буйһонамы?
3. Тексҡа һорауҙар әҙерләгеҙ.
4. *Дуҫ, дуҫлыҡ* һүҙҙәре менән һөйләмдәр уйлағыҙ.

**2.** Тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

Хәрби м___кт___пте тамамлағас, 21 й___шлек офицер Миңлеғәле Ғөбәйҙуллин фр___нтҡа китте. Ул пулеметсылар взводы к___мандиры булды. Херсон ҡ___лаһына килеп еткән частарға юл асырға кәрәк ине. Өс дзоттың икеһен юҡ иттеләр. Ә береһе ут ямғ___рын һибә бирҙе.

Бына алда — амбразура. Миңлеғәле, һуңғы көсөн йыйып, яраланған ары___лан кеүек ырғып, дошман дзотына

кәүҙәһе менән ташл__нды һәм пулеметтың ут ямғырын туҡтатты. Батыр Ғөбәйҙуллиндың йөрәге Херсон ҡалаһын фашистарҙан азат итергә яр__ам итте. Ә исеме мәңгелек дан алып, т__уған иленә әйләнеп ҡайтты. *(Ғ. Ғүмәр)*

**тамамлағас** — когда закончил **ташланды** — бросился
**азат итергә** — освободить

1. Миңлеғәле Ғөбәйҙуллин ниндәй батырлыҡ күрһәткән?
2. Бындай батырлыҡты Миңлеғәле Ғөбәйҙуллиндан алда кем эшләгән?
3. Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов) тураһында нимәләр беләһегеҙ?
4. Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ: *ут ямғыры, яраланған арыҫлан кеүек ырғып, кәүҙәһе менән ташланды*.
5. Һуңғы ике һөйләмде уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ.

**3.** Тексты тасуири уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ.

Башҡортостанда Советтар Союзы Геройҙары күп. Ә ике тапҡыр Герой бераү генә. Ул — летчик Муса Гәрәев. Муса мәктәптә үк башҡаларҙан әйткән һүҙен үтәүе, эште еренә еткереүе, намыҫлы булыуы менән айырылып торған. Осоусылар мәктәбендә лә ул үҙен өлгөлө итеп күрһәтә. Ҡурҡыу белмәгән егет һуғышта ла һынатмай. Ике йыл ярым эсендә Муса Гәрәев 250 хәрби осош яһай. Был 250 тапҡыр һуғыштан еңеп ҡайтыу тигән һүҙ.

1. Кем ул Муса Гәрәев?
2. Мәктәптә ул башҡаларҙан нимәһе менән айырылып торған?
3. Һуғышта уға был сифаттары ярҙам иткәнме?
4. Илебеҙҙә тыныслыҡ булһын өсөн, беҙ, кешеләр, нимә эшләргә тейешбеҙ?
5. Бәйләүес, теркәүестәрҙең аҫтына һыҙығыҙ, тәржемәһен белегеҙ.

**4.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Улар нимә тураһында? Мәғәнәләрен аңлатығыҙ һәм яттан яҙығыҙ.

Батыр бер үлер, ҡурҡаҡ мең үлер.
Батыр егет — яу күрке, сәсән егет — ил күрке.
Егетлек бүрек кейеүҙә генә түгел.

**5.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Дуҫтарым күп

Ал алъяпҡыс быуҙым да,
Ҡулдарымды йыуҙым да
Ваҡ бәлештәр бешерҙем
Алма менән кишерҙән.

Иптәштәрем күп минең,
Йәшәйҙәр төрлө яҡта,
Килегеҙ, тип, байрамға,
Саҡырғайным ҡунаҡҡа.

Ауылдан да киләләр,
Ҡаланан да киләләр.
Дуҫтарым минең һыйҙы
Яраталар, беләләр.

Әҙер булды бәлешем,
Ҡаҙ ите лә turалды.
Ваҡ бәлешкә ярар, тип,
Тиреп алдым баланды.

Бишбармаҡҡа ҡаҙанда
Ҡаҙылыҡ бешеп ята.
Һыуһыныңды баҫырға
Ҡымыҙым да бар хатта.

Аҡъярҙан Гүзәл килә,
Себерҙән — Айсыуаҡтар,
Ташкенттан — Көнсыуаҡтар,
Ҡайһыһы бик йыраҡтан.

Бөрйәндән — Сәлимәләр,
Инйәрҙән — Әминәләр,
Арғаяштан — Хәҙисә,
Тағы ла әллә нисә.


SPORT

| |
|---|
| мәңгелек<br>талапсан<br>мөнәсәбәт<br>һынатмай |

Ҡайһыһы поезд менән,
Ҡайһыһы йөҙөп килер,
Ҡайһыһы һә тигәнсе
Күктәрҙән осоп елер.

Дуҫтарым күп, күп минең,
Киң, матур булғас илем.

*(К. Кинйәбулатова)*

**алъяпҡыс быуҙым** — повязала фартук
**балан** — калина
**һый** — угощение
**ваҡ** — мелкий
**тиреп алыу** — собрать
**йөҙөп килер** — приплывут
**күк, һауа** — небо

1. Автор нимә менән ғорурлана? Уның ниндәй шиғырҙарын уҡығанығыҙ бар?
2. Географик атамаларҙы картанан күрһәтегеҙ һәм яҙып алығыҙ.
3. Кеше исемдәрен күсереп яҙығыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
4. Башҡорт халыҡ аштарын, эсемлектәрен һанап сығығыҙ.
5. *Алъяпҡыс, Аҡъяр* һүҙҙәренең яҙылышын аңлатығыҙ.
6. Һеҙҙең дуҫтарығыҙ бармы? Улар ҡайҙа йәшәй?

## Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!

**Модальные слова (мөнәсәбәт һүҙҙәр)** выражают:

а) утверждение или отрицание:

**эйе** — бар; **юк** — нет; **әлбиттә** — конечно; **ысынлап та** — действительно, на самом деле; **дөрөҫ** — верно; **түгел** — нет, не; **ярай** — ладно и др.;

б) долженствование, необходимость:

**кәрәк** — надо, нужно; **тейеш** — должен, должно, необходимо;

в) возможность: **мөмкин** — можно; **ярай** — можно;

г) призыв, просьба: **зинһар** — пожалуйста; **рәхим итегеҙ** — добро пожаловать, извольте, пожалуйста; **ғәфү итегеҙ** — извините; **ҡуй, ҡуйығыҙ** — оставь, оставьте;

д) предположение, сомнение, неуверенность: **ахырыһы** — кажется; **буғай** — кажется, по-видимому; **шикелле** — вроде, точно, кажется; **бәлки** — наверное; **күрәһең** — очевидно и др. **Бәлки**, бөгөн килерҙәр. — Возможно, сегодня приедут.

**!!** **6.** Һүрәт буйынса бәйләнешле текст төҙөгөҙ. Ситуацияға ҡарашығыҙҙы белдерегеҙ.



**7.** Шиғырҙы уҡығыҙ. Шиғырға нигеҙләнеп, умырзая тураһында һөйләгеҙ. Нисек уйлайһығыҙ, шиғырҙа һүрәтләнгән күренештәрҙе йылдың ниндәй миҙгелендә күҙәтергә мөмкин?

## Умырзая

Аҡ йомортҡа ҡабығынан
Моронлаған бәпкә һымаҡ,
Ҡарҙы тишеп үҫеп сыҡҡан
Һары сәскә, йәшел ҡыяҡ.

Ҡыҫҡа ғүмерле булырын
Белмәйенсә, умырзая,
Ҡыуаныстан тирә-яҡты
Һоҡландырып, эй, йылмая.

Бүләк итә кешеләргә
Яңы йырҙар, өмөт, шатлыҡ.
Таждарының һәр бәбәге —
Үҙе илһам, үҙе сафлыҡ.

*(Г. Юнысова)*

**8.** Бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

1. Йылыта, ҡояш, көндән-көн, нығыраҡ.
2. Бәләкәй, күренә, тәүге, йырғанаҡтар.
3. Бара, йәнләнә, көндән-көн, тәбиғәт.
4. Шаулап, ҡар һыуҙары, аға, тауҙарҙан.
5. Сыҡты, сәскәләр, тәүге, ҡалҡып.

**9.** Йәйәләрҙе асып уҡығыҙ, һөйләгеҙ. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе табығыҙ.

## Тауышһыҙ Талип

Бер көн Талип клас(кә, ҡа) күңел(һыҙ, һеҙ) килеп инде. Ни өсөн(дер, дөр) муйыны(на, ңа) ике ҡат шарф, өҫтөнән мамыҡ шәл (дә, да) урағайны. «Талип, әллә ауырый(һың, һын)мы?» — тип уратып алды(м, ҡ).

Талип тамағ(ын, ың) төртөп күрһәтеп, аңлат(та, ырға) маташа. Ангина(мы, ме) әллә, тигәнгә, эйе тигәнде аңлатып, башын ҡаҡты. Ысынлап та, хәле бик ауыр(дыр, ҙыр) инде, тауыш(о, ы) бөтөнләй бөткән. Беҙ уны ысын күңел(дән, дәң) ҡыҙған(дым, дыҡ).

Клас(кә, ҡа) Әминә апай инде. Беҙ Мәжит Ғафуриҙың «Ҡыҙыл байраҡ» тигән шиғырын яттан һөйлә(п, й) башла(ным, нығ).

Бына Талипҡа ла сират етте. Ул таҡта алды(на, ңа) сыҡты ла тапаныпп тора башла(нығ, ны). Бер аҙҙан ғыжылдаған тауыш ишетелде.

— Апай, Талип(ҡа, тың) тауыш(е, ы) бөткән — ангина, — тине Ғата.

Әминә апай, тауыш(ын, ың) арыуланғас һөйләрһең, тип, Талипҡа ултыр(тты, ырға) ҡушты.

Тап шул ваҡыт беҙҙең мәктәп эргәһенә бер машина килеп туҡтаны. Кабина(ның, нан) сумаҙан тотҡан бер һалдат һикереп төш(төк, тө). Мин уны Талип(ты, тың) ағаһы Мәхмүт икәнен танып ҡалдым. Талип (та, ты) тәҙрәгә күҙ һалды һәм һикереп торҙо(ла, лар), бөтә клас(ты, та) яңғыратып: «Ура! Мәхмүт ағай(ың, ым) ҡайтты», — тип

ҡысҡырып ебәрҙе. Талип(тың, төң) көслө тауышынан тәҙрә быялалары «зың» итеп ҡуйҙы, таҡта(ға, ның) яҙып торған Әминә апай(ҙы, ҙың) ҡулынан аҡбуры төшөп китте. *(Р. Мөхәммәтов)*

**күңелһеҙ** — невеселый
**маташа** — пытается
**сират етте** — дошла очередь
**быяла** — стекло
**һикереп төштө** — спрыгнул
**күҙ һалды** — посмотрел
**ҡапыл** — вдруг

1. Тексты өлөштәргә бүлегеҙ, уларға исем бирегеҙ.
2. Тексты диалог формаһына әйләндереп сәхнәләштерегеҙ.
3. Текста ниндәй яҙыусы тураһында әйтелә? Кем ул?
4. Талип ни өсөн муйынын шарф, мамыҡ шәл менән ураған икән? Шул турала һөйләгеҙ.
5. Текстан мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе табығыҙ.
6. Текстың йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**10.** Бирелгән ваҡиғаларға диалогтар төҙөгөҙ, мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе ҡулланығыҙ.

1. Уҡыусы мәктәп коридоры буйлап йүгереп үтә, уны дежур туҡтата. Улар араһында һөйләшеү (диалог).

2. Уҡыусы дәрескә һуңлап инә. Унең менән уҡытыусы араһында һөйләшеү.

3. Уҡыусы физкультура дәресенә спорт кейемен киймәй килгән. Уҡытыусы менән уҡыусы араһында һөйләшеү.

**11.** Бирелгән мәҡәлдәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Бер мәҡәлде ҡулланып, әңгәмә ойоштороғоҙ. Мөнәсәбәт һүҙҙәр ҡулланығыҙ.

1. Дуҫтың дуҫлығы яуҙа беленә.
2. Ҡош — ҡанат менән, кеше дуҫлыҡ менән көслө.
3. Яңы ҡолаҡсын бүрек таптым тип, иҫкеһен ташлама.
4. Дуҫлы кеше юғалмаҫ.
5. Айырылмаҫтай дуҫыңа ауыр һүҙ әйтмә.
6. Ил өҫтөндә йөҙ дуҫың булһын.
7. Күпте яманлаған дуҫһыҙ ҡалыр.

2-се, 6-сы мәҡәлдәрҙе яттан яҙығыҙ.

**12.** Һөйләмдәргә мөнәсәбәт һүҙҙәр өҫтәп уҡып ҡарағыҙ.

Дуҫлыҡ булғанда, донъя яҡтыра, йәмләнә, йәнләнә. Кешенең ышаныслы таянысы булыу — яҡшы күренеш. Таяныр кеше — дуҫ бит ул. Дуҫлыҡ ололарға ғына түгел, балаларға ла бик кәрәк. Бәләкәйҙән башланған дуҫлыҡ ғүмергә дауам итә, ундай кешеләр иң бәхетлеләрҙән иҫәпләнә. *(Ф. Рәхимғолова)*

1. Фәүзиә Рәхимғолова тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
2. Һеҙҙең ышаныслы дуҫығыҙ бармы?



*Шағир Сафуан Әлибай (1941—2014) Салауат районы Тирмән ауылында тыуған.*

*Сафуан Әлибай балалар өсөн дә, өлкәндәр өсөн дә яҙған. Уның шиғырҙарына бик күп йырҙар яҙылған. 1996 йылда «Тылсымлы шар» тигән китабы Андерсен исемендәге Халыҡ-ара Маҡтаулы дипломға лайыҡ булды.*

## Дуҫтарым

Минең шундай дуҫтарым бар,
Дуҫтарым төрлө-төрлө,
Һәр береһе — ҙур яңылыҡ,
Һәр береһе — мең серле.

Мин ҡайҙа ғына барһам да,
Улар ҡаршыма сығыр,
Береһе әкиәт һөйләр,
Береһе һөйләр шиғыр.

Уларҙың бар эш-һөнәргә,
Уйнарға өйрәткәне.
Киләсәккә илтә улар,
Һөйләп бирә үткәнде.

Улар менән көтмәгәндә
Әйләнәм мин юлсығa:
Бүлмәлә ултырған көйө
Донъяны урап сығам!

Береһе — һандар һарайы,
Сисәм сер-хисаптарын...
Мине һис яңғыҙ ҡалдырмаҫ
Дуҫтарым — китаптарым.

**яңылыҡ** — новость
**илтә** — ведет
**һарай** — дворец
**серле** — таинственный (-ая, -ое)
**яңғыҙ ҡалдырмаҫ** — зд.: не оставят одного

1. Шиғырҙа автор ниндәй дуҫтар тураһында һөйләй?
2. Ә һеҙҙең шундай дуҫтарығыҙ бармы?
3. *Мең серле, ҡаршыма сығыр, киләсәккә илтә, бүлмәлә ултырған көйө, донъяны урап сығам, һандар һарайы, яңғыҙ ҡалдырмаҫ* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен нисек аңлайһығыҙ?

**13.** Һүрәттәр урынына һүҙҙәр ҡулланып, тексты уҡығыҙ.

## Ҡайын һыуы

 аҫтында  араһынан 
сығып ята. Эргәһендә генә  шыбырлай. Унда 
ҡыуанып һайрай. Тау буйындағы аҡланда  
менән ҡайындың туҙын аҡтарҙы.  ҡурҡып ҡасты.

 оҙаҡ иланы, тамсылап һыуы аҡты.  ҡайын һыуы эсте. Август айы етте. Ҡояш ҡыҙҙыра. Балыҡтан ҡайтып килгән  бик һыуһаны. Баяғы  янына килделәр. Үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмай торҙолар: шишмә урынында  ғына ята. Шишмә ҡороғайны. Тау битләүендәге ҡайын һарғайған япраҡтарын ҡоя ине.

*(С. Әлибайҙан)*

?

1. Тексты һөйләгеҙ.
2. Ҡайын ағасы ниңә ҡороған?
3. Һеҙҙең ҡайын һыуы эскәнегеҙ бармы? Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?
4. Һеҙҙең яҡта шишмәләр бармы? Уларҙың исемдәре нимә аңлата? Ололарҙан һорап белегеҙ.
5. Шишмәләр ҡоромаһын өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?

**14.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Болон

Йәшел хәтфә кеүек матур болон
Нурҙар сәсеп ята донъяға,
Һығылып үҫкән талдар араһынан
Көмөш таҫма кеүек һыу аға.

Леп-леп итеп оса күбәләктәр,
Сутылдашып һайрай ҡоштары,

Ал, ҡыҙыл, аҡ, һары сәскә менән
Биҙәкләнгән үлән баштары.

*(М. Ғафури)*

?

1. Ни өсөн шиғыр «Болон» тип атала?
2. Ни өсөн «Болон нурҙар сәсеп ята донъяға» тип яҙылған? Аңлатығыҙ.

**15.** Тексты күсереп яҙығыҙ. Төп фекерен аңлатығыҙ.

## Урман — ҙур байлыҡ

Ҡайҙа ғына ҡарамағыҙ, ағастан яһалған әйберҙәр күрәһегеҙ. Күп кенә йорттар ағастан һалынған. Өҫтәл, ултырғыс, парталарҙы ла ағастан яһағандар. Ағастан хатта дарыу яһайҙар. Ә урманда һауа ниндәй саф була! Унда тын алыуы еңел. Урман һауаны таҙарта.

Урманда ҡоштар һәм йәнлектәр йәшәй. *(Н. Мусиндан)*

**16.** Өҙөктәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе табығыҙ. Бирелгән портреттарға нигеҙләнеп, дуҫығыҙҙың, класташығыҙҙың портретын һүрәтләгеҙ.

Юлдаш — Ҡыҙырастың киреһе. Ул буйға Ҡыҙырастан бер башҡа бейек булып үҫкән. Төҫкә лә Ҡыҙырастан башҡасараҡ: оҙонса яңаҡлы, ҡырлы танаулы, тулҡынланып торған ҡара сәсле, уйсан түңәрәк күҙле. Уның ҡап-ҡара ҡалын ҡаштары ҡарлуғас ҡанаттары кеүек. Яурындары киң, ҡулдары көрәк кеүек. *(З. Биишева)*

Рөстәм — ҡалын кәүҙәле, киң яурынлы, ҡуңыр йөҙлө егет. Мөһабәт кәүҙәле егеттәрҙең барыһы ла шулай буламы икән, белмәйем, әммә Рөстәмгә башҡаларҙан һәр яҡлап өҫтөн булыуы килешеп тора. Ул ҡыланмай, әҙәпле, кеселекле итеп һөйләшә.

Рәсимә — сибек кенә кәүҙәле, ҡаҡса битле, ҡара сәс толомоноң осона матур бантик таҡҡан, ҡояшҡа уңып бөткән ябай күлдәк кейгән. Ул асыҡ сырайлы, ҙур ҡара күҙҙәре уйынсыҡ кеүек йылтлап торған зирәк ҡыҙыҡай. *(Ф. Иҫәнғолов)*

**кирене** — *зд.:* противоположность
**яңаҡ** — скулы, щека
**тулҡынланып торған** — волнистые
**уйсан** — задумчивый
**ҡарлуғас ҡанаттары кеүек** — как крылья ласточки
**сибек** — *зд.:* худенькая, худощавая
**өҫтөн булыуы килешеп тора** — превосходство ему идет
**ҡуңыр йөҙлө** — смуглое лицо
**асыҡ сырайлы** — открытое лицо
**ҡыланмай** — не кривляется

**17. I.** 1) Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Улар нимә исеме?

айыу, төлкө, жираф, маймыл, бүре, ҡуян, морж, фил, арыҫлан, юлбарыҫ, һеләүһен, терпе, ҡоралай

2) Һүҙҙәрҙе түбәндәгесә төркөмләп яҙығыҙ.

Беҙҙең яҡтағы йәнлектәр: айыу, ...
Башҡа ерҙәге йәнлектәр: жираф, ...

**17. II.** Йылда нисә миҙгел бар? Уларҙы иҫеңдә ҡалдыр.

Ҡыш айҙары: декабрь, ғинуар, февраль.
Яҙ айҙары: март, апрель, май.
Йәй айҙары: июнь, июль, август.
Көҙ айҙары: сентябрь, октябрь, ноябрь.

1. Ни өсөн бер ай исеменең аҫтына һыҙылған? Аңлатығыҙ.
2. Һеҙ ниндәй айҙа тыуғанһығыҙ? Быйыл тыуған көнөгөҙ аҙнаның ниндәй көнөнә тура килә? Дөрөҫ итеп һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**18.** Тексты уҡығыҙ. Беренсе абзацтағы һөйләмдәрҙе тәртипкә килтереп, күсереп яҙығыҙ. Икенсе абзацты һөйләмдәргә бүлегеҙ.

## Ярҙам

Ял, лагерҙа, ине, балалар, итәләр. Буйында, лагерь, Дим, урынлашҡан. Район үҙәгенән, түгел, ул, алыҫ. Ҡыҙылъяр, тора, ауылы, лагерҙан, күренеп.

Беренсе отрядта — 7-се класс уҡыусылары улар тиҙ дуҫлашты бер ваҡыт балалар урманға еләккә китте юлда ҡапыл Айраттың аяғын йылан саҡты шул саҡ Фәриҙә башындағы яулығын сисеп алып, Айраттың аяғын ҡыҫып бәйләп ҡуйҙы шунан йыландың ағыуын ауыҙы менән һурып, ергә төкөрҙө Айратты лагерға алып ҡайттылар Фәриҙә иптәшен шулай үлемдән ҡотҡарҙы.

| |
|---|
| өмөт<br>ҡапыл<br>серле<br>уйсан |

**район үҙәге** — районный центр
**күренеп тора** — видно
**йылан саҡты** — ужалила змея
**ауыҙы менән һурып** — высосав
**төкөрҙө** — выплюнула

**Т** План буйынса тексты һөйләгеҙ.

1) Лагерь.
2) Беренсе отрядта дуҫлыҡ.
3) Айратты йылан саҡты.
4) Фәриҙә иптәшен ҡотҡарҙы.

**?**
1. Бәләгә тарыған кешегә ярҙам күрһәткәнегеҙ булдымы?
2. Картанан Дим йылғаһын күрһәтегеҙ. Ул ҡайҙан башлана?
3. Ошо тексҡа тап килгән мәҡәлдәрҙе әйтегеҙ. Текст буйынса һорауҙар әҙерләгеҙ.

**19.** Һеҙ сит ил уҡыусыһы менән электрон почта аша хат алышаһығыҙ, ти. Ул үҙенең дуҫы тураһында яҙып ебәргән. Һеҙ үҙегеҙҙең дуҫығыҙ тураһында нимәләр яҙыр инегеҙ? Ҡайһы илдәге уҡыусы менән хат алышырға теләр инегеҙ?

**20.** Диалогты дауам итегеҙ.

— Уҡыусылар, бөгөн китапханаға китаптарҙы дауаларға барабыҙ.

— ...

— ...

**21.** Уҡығыҙ. Кем ул Пушкин? Тексты ҡулланып, уның бала сағы тураһында башҡорт телендә һөйләгеҙ.

## Пушкин и книги

Книги Пушкин любил с детства. По словам его младшего брата, он, еще мальчиком, проводил бессонные ночи, тайком забираясь в кабинет отца, и без разбора «пожирал» все книги, попадавшиеся ему под руку.

По рассказу отца Пушкина, Александр уже в самом младенчестве проявлял большое уважение к писателям. Однажды Николай Михайлович Карамзин был в гостях у родителей Пушкина. И весь вечер мальчик, сидя напротив писателя, вслушивался в его разговор, не спускал с него глаз.

Обладая необыкновенной памятью, Пушкин уже на одиннадцатом году великолепно знал французскую литературу. Девяти лет он читал «Илиаду» и «Одиссею». Своей начитанностью мальчик поразил своих лицейских товарищей. *(По А. Гессену)*

### Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!

**Междометия (ымлыҡтар)** — особые слова, выражающие чувства.

Они бывают **простые** и **сложные.**

**Простые: ә-ә-ә** — а-а-а, **эй-й-й** (удивление); **аһ, и-и-и** (радость); **ах, ай, уй** (испуг); **ух, эх** (сожаление); **һы, һи** (удивление).

**Сложные: ай-һай** (сомнение); **уй алла** — о боже и др.

К междометиям примыкают звукоподражательные слова, которые не выражают ни чувств, ни побуждений к действию, а передают крики животных и птиц, звуки неживой природы:

**сип-сип** — подражание писку цыплят;

**бес-бес** — кис-кис;

**даңҡ-доңҡ, даңҡ та доңҡ, шарт-шорт, шатыр-шотор** — подражание сильному звуку, возникающему при ударе чем-либо твердым.

**22.** Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ, ымлыҡтарҙы билдәләгеҙ.

1) Ҡыт-ҡытыҡ, ти, ҡытыҡ, ти,
Тибенеүе ҡыҙыҡ, ти.
Әйтеп ҡуймағыҙ яҙыҡ,
Әлеге ҡош ул ... .



2) — Мин барыһын уятам, — тип
Ҡысҡыра, — кикирикүүүк!
Бара торған ерегеҙгә
Һуңлап ҡуймағыҙ берүк!
Һис кәрәк түгел бәхәс,
Был булыр инде ... .



3) Көнө буйы туҡ та туҡ,
Ағастан ҡорт табып туҡ.
Ағасты йырған ҡортҡа
Иң ҙур дошман ... .



4) Бар белгәне ҡар ҙа ҡар,
Бер туҡтауһыҙ ҡар даулар.
Ниндәй ҡош мохтаж ҡарға?
Ни булһын инде — ... .



5) Сырыҡ-сырыҡ сырҡылдай,
Бәҫле ботаҡҡа ҡунып.
Сырыҡ-сырыҡ, үҙ телендә
Ниҙер һөйләй ҡыуанып.
Ниҙәр генә һөйләһә лә,
Аңламайым шул телен.
Шуны беләм: йылы эҙләп,
Ташлап китмәй үҙ илен.
Кисерһә лә күп этлек,
Иленән китмәй ... .



*(Х. Мөсәлин)*

6) Яңғыратып һыу буйҙарын
Һайрай, алһыу таң тыуғас,
Моңло, дәртле ... .



Иҫегеҙгә төшөрөп, тағы ла бер йомаҡ яҙығыҙ.

**23.** 1) Эт, бесәй, ат, һыйыр, ҡаҙ, өйрәкте башҡортса нисек саҡыралар, ҡыуалар?

2) Әтәс, тауыҡ, күркә нисек ҡысҡыра? Башҡа ҡоштар нисек һайрай?

3) Башҡорт телендәге саҡырыуҙар, ҡыуыуҙар рус телендәгенә тап киләме?

**24.** Белешмә өсөн бирелгән һүҙҙәрҙе башҡорт теленә тәржемә итеп, шаҡмаҡтарға тура килтереп яҙығыҙ.




Белешмә өсөн һүҙҙәр: *заяц, ежик, лось, медведь, лиса, галка, дятел, олень.*

**25.** Һеҙ ниндәй ҡоштарҙы беләһегеҙ? Ҡош исемдәрен тәржемә итеп, бер ҡош тураһында һөйләгеҙ.

ласточка, соловей, жаворонок, грач, кукушка, лебедь

**26.** Һөйләмдәрҙең икенсе өлөшөн табығыҙ. Күсереп яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| 1) Сыйырсыҡтар килгәнсе үк, иҫке ояларын төҙәтеп, | беҙҙең ҡанатлы дуҫтарыбыҙ. |
| 2) Улар | бөжәктәрҙе ашайҙар. |
| 3) Ҡоштар — | яңыларын яһап, ағастарға, ҡыйыҡтарға ҡуйырға кәрәк. |

П

**27.** «Ҡоштар — беҙҙең дуҫтарыбыҙ» тигән темаға проект эше ҡороғоҙ.

**28.** Һүҙлек диктантына әҙерләнегеҙ.

ҡоштар, изгелек, яҡшылыҡ, ҡара сәсле, ҡуңыр йөҙлө, ҡарлуғас, ҡанат, оҙон толомло, ярҙам итеү, намыҫлы, әҙәпле, дуҫ, әхирәт, ағас, тәбиғәт, һалҡын һыу

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

1) ҡыҙыу, зәңгәр, шишмә, һарғайған, яуап, ғәрләнеү, илай, Аҡъяр, Фәриҙә, Бөрйән, алъяпҡыс, мәсьәлә, тыныслыҡ

2) иғтибарлы булыу, ҡанат ҡуя, таяныс булыу, ҡайын шыбырлай, сыр-сыу килә, ҡайын һыуы, тәртипле кеше, аптырап ҡалыу, мәктәп ҡаршыһында, хеҙмәт һөйөү

**29.** Башватҡыста хеҙмәт тураһында мәҡәл йәшеренгән. Уны табығыҙ. Асҡысы — алфавитта.

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 8, | 4, | 8, | 26, | 14, | 8, | 34, | 8, | 4, | 40, |
| 8, | 26, | 17, | 8, | 34, | 26, | 21, | 23, | 16, | 21, |
| 31, | 21, | 18, | 40, | 23, | 7, | 40, | 1, | 7. | |

# ЙӘМЛЕ ЙӘЙ

## Йәй

Йәй — рәссам.
Ер өҫтөнә
Мең биҙәктәр яһап сак.
Йәй — моңло йыр.
Ҡоштар ярһып,
Сәсәй-сәсәй һайрар сак.

Йәй — ул ҡояш.
Йылы нурға
Һәр ҡыяҡ үрелер сак.
Еләк-емештең ҡыҙарып
Бешер ҙә өҙөлөр сак.

Йәй — ул сәскә.
Ялан-ҡырҙың
Йәйғор төҫөн һайлар сак.
Сәскә һутынан йыйылған
Балы менән һыйлар сак.

Йәй — йылға,
күлдәр ярында
Ҡырсынташтар ҡайнар сак.
Һыуҙа сума-сума йөҙөп,
Балыҡ булып уйнар сак.

*(З. Ҡотлогилдина)*

**рәссам** — художник
**һайлар сак** — время выбора
**һут** — сок, нектар
**ҡыяҡ, япраҡ** — лист
**ҡырсынташ** — щебень
**сума** — ныряет
**сума-сума** — ныряя
**һыйлар сак** — время угощать

1. Шағирәгә йәй оҡшаймы? Фекерегеҙҙе шиғыр юлдары менән иҫбат итегеҙ.
2. Класташтарығыҙ менән строфаларҙы бүлешеп алығыҙ ҙа шиғыр буйынса һүрәттәр төшөрөгөҙ.

**1.** Ҡағиҙәләргә ниҙәр етешмәй? Тултырып уҡығыҙ.

1. Һөйләмдә берәй эш, ваҡиға тураһында хәбәр ителһә, уның аҙағына ... ҡуйыла.

2. Һөйләмдә берәй нәмә тураһында һоралһа, ... ... ҡуйыла.

3. Һөйләмдә көслө тойғо, ғәжәпләнеү, саҡырыу булһа, ... ... ҡуйыла.

**2.** Һүрәтте иғтибар менән ҡарағыҙ. Йәй тураһында һөйләгеҙ. Һеҙгә йәй ниңә оҡшай? Йәйгә ниндәй пландарығыҙ бар? Йәй тик ял ваҡыты ғынамы?



**3.** Тексты уҡығыҙ. Ҡылымдарҙы табығыҙ. Заманын, һанын, затын билдәләгеҙ.

Бына тағы сағыу ҡояшы, йәмле көндәре, хуш еҫле сәскәләре, йылы, шифалы ямғырҙары менән йәй килеп етте.

Балалар мәктәптәрҙә уҡыуҙы тамамланы. Еҙ ҡыңғырау уларҙы йәйге иң күңелле ялға оҙатты. Улар көҙгә көс йыйып, яңы өмөттәр, яңы пландар менән тағы мәктәптәренә килерҙәр. Ә хәҙергә хуш, һау бул, мәктәп!

**4.** Түбәндәге һүҙҙәрҙән хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

1) Башлана, июнь, йәй, айынан.
2) Ат, Башҡортостаным, гүзәл, сәскә.
3) Үҫә, юл буйында, юл япрағы.

**5.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Ямғыр яуа

Ямғыр яуа, ерҙе йыуа —
Яҙҙың башланды эше.
Йәшелләнеп ер йәшәрер,
Ҡыуаныр һәр бер кеше.

Бар тәбиғәт яңырыр ҙа
Балҡытыр бар донъяны.
Яңы күлдәк кейер алда
Йыуынмайса буламы?

*(Б. Байым)*

?

1. Шиғырҙың үҙегеҙгә оҡшаған бер строфаһын ятлағыҙ һәм яттан яҙығыҙ.
2. Ямғыр яуғанда, һеҙ ниндәй хистәр кисерәһегеҙ?
3. Тәбиғәткә ямғыр ни өсөн кәрәк?
4. *Яңы күлдәк кейер алда*
   *Йыуынмайса буламы?*

Был юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

**6.** Тексты уҡығыҙ. Йәйә эсендәге ялғауҙарҙың тейешлеһен һайлап алып, һүрәттәрҙе һүҙҙәр менән алмаштырып, тексты күсереп яҙығыҙ. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

## Үҙе сәскә, үҙе сәғәт

Батыр менән Гөлнәзирә урман(ға, да)  йыйырға китте. Икеһе (лә) тиҙерәк йый(ырға, ергә) тырышты.

— Әйҙә, ҡайтайыҡ,  килә, — тине .

— Ҡайҙан белә(һең, һен) уны? Бер болот та юҡ бит, — тип ныҡышты .

— Бына бит  күҙҙәрен йомған.

Ысынлап та, тиҙ(ҙән, дән)  яуа башланы.

— Сәскә барометр кеүек икән, — тип аптыраны  .

— Сәскәләр(гә, ҙе) ҡарап, ваҡытты (ла, ҙа) белеп була.

 иртәнге 7-лә таж япраҡтар(ын, ың) аса. Ә картуф сәскәһе иртәнге 7-лә асыла (ла, лә) көндөҙгө 3-тә йоҡлай башлай.  ҡайтыр(ға, гә) сыҡты. «Тиҙерәк картуф сәскәһен ҡарар(ға, гә) ине.  нисә икән?»

*(«Аҡбуҙат» журналынан)*

**болот** — облако
**йомған** — закрыл, сомкнул

1. Тағы ниндәй сәскәләрҙең серен беләһегеҙ? Һөйләгеҙ.
2. Үҙегеҙгә оҡшаған берәй сәскәнең һүрәтен төшөрөгөҙ.

**7.** Нөктәләр урынына белешмәнән кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, тексты уҡығыҙ. Тәржемә итегеҙ. Текст исеменең һорауына яуап бирегеҙ.

## Кем ялҡау?

Уҡыуҙар бөттө, йәй килеп ... . Бер ... иртәнсәк Розалияның әсәһе ... китеп барғанда, уға күрше ҡыҙы Хәлиҙә осраны. Ҡулына ... тотоп, мәктәпкә китеп бара ине ул.

— Ниңә улай ... көнө уҡырға йөрөйһөң, ҡыҙым?
— Көҙгө һынауға ҡалдырҙылар ҙа, — тип ... Хәлиҙә.
— Улай икән!

— Апай, ә Розалия ни эшләй? — тип ҡыҙыҡһынды Хәлиҙә.

— Ни эшләһен, йоҡлай әле ул, ... бит.

— Эй ялҡау, — тип һығымта яһаны ... ҡыҙы. — Мин бына ялҡау булмаған, әллә ҡасан уҡ торҙом! *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

**көҙгө һынау** — осенние экзамены
**һығымта** — вывод
**күрше ҡыҙы** — соседская девочка

Б е л е ш м ә  ө с ө н  һ ү ҙ ҙ ә р: *күрше, йәй, эшкә, яуапланы, каникул, етте, көн, портфель.*

**8.** Диалогтарҙы дауам итегеҙ.

1. — Дамир, мин һинең менән хушлашырға индем. Йәйге каникулды ауылда йәшәгән өләсәйемдә үткәрергә уйлайым.

— ...

— ...

2. — Уҡыусылар, йәй көндәрендә коллекциялар, гербарийҙар эшләргә онотмағыҙ.

— ...

— ...

3. — Урал, походҡа сәғәт 10-да китәбеҙ, һуңлама.

— ...

— ...

**9.** Шиғырҙы уҡығыҙ, күсереп яҙығыҙ.

Ерҙәр йәшәрә,
Үләндәр үҫә.
Иртә, кис ергә
Аҡ ысыҡ төшә.

Сыға болоттар,
Яуа ямғырҙар.
Үҫә үләндәр,
Йәмләнә ҡырҙар.

*(М. Ғафури)*

1. Шағир йылдың ҡайһы миҙгелен һүрәтләгән? Уны ниндәй юлдарҙа күреп була?
2. Шиғырҙы ятлағыҙ һәм яттан яҙығыҙ.

**10.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Ни өсөн ул «Ҡырмыҫҡалар» тип атала? Һеҙ тексты нисек атар инегеҙ? Фекерегеҙҙе иҫбат итегеҙ.

## Ҡырмыҫҡалар

— Туҡта, ни эшләйһең?

Ғәлим йүгереп килеп, Рауилдың ҡулынан таяғын тартып алды.

— Ҡырмыҫҡа ояһын бутайым, — тине малай. — Ҡыҙыҡ бит. Ҡайҙа барырға белмәй йүгерешәләр. Башһыҙҙар.

— Әллә бик рәхимһеҙ, әллә бик наҙан кешеһең инде, — тине Ғәлләм ағай һәм һөйләп алып китте. — Ҡырмыҫҡалар зарарлы бөжәктәрҙе юҡ итә, ерҙең тупрағын йомшарта, ашлама индерә. Ана, ҡара, ҡырмыҫҡа иләүе янында ағастар ҙа, үләндәр ҙә яҡшыраҡ үҫкән. Урман таҙа һәм матур булһын өсөн, һәр гектар ерҙә ошондай дүрт иләү булырға тейеш. Ә бер иләү ҡырмыҫҡа йәй эсендә дүрт-биш миллион бөжәкте үлтерә.

Рауил тағы ла «сәнскеле» һорау бирҙе:

— Иләүҙе ҡырмыҫҡалар шулай картаға ҡарап төҙөйҙәрме?

— Быныһы һинең менән минең эш. Иләүҙәр әҙ булған урынға уларҙы күсереп ултыртырға кәрәк. Башҡа илдәрҙә шулай эшләйҙәр ҙә. Был эштә уҡыусылар ҙур ярҙам күрһәтә.

Ғәлим туҡтап ҡалды:

— Ҡара әле!..

Ергә сүгәләнеләр һәм ни күрәләр: бер ҡырмыҫҡа, икенсеһен күтәреп, иләүҙән сыҡты ла ергә ҡуйҙы, уның тирәһендә тағы бер нисәһе йүгергеләп йөрөй башланы.

— Быныһы — ауырыу, — тип аңлатты ағаһы, — ә тегеләре — хирургтар. Теге ҡырмыҫҡалар, ауырыуға морондарын һоноп, аяҡтары менән нимәлер эшләй. Уларға ана тағы бер нисәһе «ярҙам итеп» китә.

Бер аҙҙан «хирургтар» ауырыуҙы ул ҡыҫылып торған юныҫҡынан ҡотҡарҙы. Ә тегеһе, иркен һулап, башын сайҡап алды ла, «хирургтар»ға рәхмәт әйткәндәй, бер нисә ҡат улар тирәһендә әйләнде һәм үҙ эшенә йүгерҙе.



Бына һиңә мә! Былар аңлы бөжәктәр икән! Тик һөйләшә генә алмайҙар.

— Улар тел менән түгел, ә ишаралар менән аңлаша. Мәҫәлән, сак ҡына күтәрелеп, ауыҙын асһа, «иғтибар итегеҙ» тигәнде аңлата. Йүгереп килеп, иптәштәренең башына өҫтән аҫҡа һуға икән, тимәк — тревога! Бер профессор ҡырмыҫҡаларҙың егерменән ашыу сигналдарын күҙәтеп торған, тик ул дүртәүһен генә аңлата алған...

Бына элегерәк бер мәҡәлә уҡығайным. Уны яҙған кеше һыу буйында йөрөгәндә кескәй генә канау аша «тере күпер» күрә. Ул күперҙе бер-береһенә аяктары, ауыҙҙары менән тотонған ҡырмыҫҡалар яһаған. Шул күперҙән өс тәүлек буйына ҡырмыҫҡалар үткән, һәр береһе берәй йөк алып барған. Әгәр аңлаша алмаһалар, был күперҙе нисек төҙөрҙәр ине! Шуныһы билдәһеҙ: уны төҙөргә кем команда биргән дә, инженеры кем? Күперҙең бер өлөшө һыу аҫтында булған. Шулай иптәштәре өсөн үҙҙәрен ҡорбан иткәндәр ҡайһы берҙәре. Ана ҡайҙа ул ысын дуҫлыҡ, иптәшлек! Ә һин — башһыҙ, имеш... *(Н. Ҡотдосов, Х. Әйүпов)*

**таяҡ** — палка
**ашлама** — удобрение
**бутайым** — мешаю, перемешиваю
**башһыҙ** — безмозглый
**рәхимһеҙ** — безжалостный
**йомшарталар** — разрыхляют
**сәнскеле** — колючий
**сүгәләнеләр** — присели
**юнысҡы** — щепка
**аңлы** — умный
**башын сайҡап алды** — помотал головой
**ҡырмыҫҡа ояһы, иләүе** — муравейник
**саҡ ҡына күтәрелеп** — чуть приподнявшись
**тере күпер** — живой мостик
**наҙан** — безграмотный
**өлөш** — часть
**ишара** — знак, жест
**канау** — канава
**тәүлек** — сутки
**ҡорбан иткәндәр** — пожертвовали

?

1. Рауил нимә эшләй?
2. Ғәлләм ағай ҡырмыҫҡалар тураһында нимә белә?
3. Бер иләү ҡырмыҫҡа күпме бөжәкте юҡ итә?
4. Ҡырмыҫҡалар «ауырыу»ҙы нисек дауалай?
5. Ҡырмыҫҡалар телендә «тревога», «иғтибар итегеҙ» нисек аңлатыла?
6. «Тере күпер» тураһында һөйләгеҙ.
7. Ҡырмыҫҡалар тураһында нимәләр беләһегеҙ? Һөйләгеҙ.
8. Тексты өлөштәргә бүлегеҙ һәм планын төҙөгөҙ.
9. План буйынса һөйләгеҙ, һүрәттәр төшөрөгөҙ.
10. Урманды, урмандағы тереклекте һаҡлар өсөн, һеҙ нимәләр эшләргә тейешһегеҙ?

**11. I.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Ни өсөн улар ике бағанаға айырып яҙылған? Һығымта эшләгеҙ.

| | |
|---|---|
| ҡорт | көрт |
| һоло | һөлөк |
| борос | бөрө |
| бойор | бөйөр |
| бойоҡ | бөйөк |

шифалы
өмөт
ҡырмыҫҡа
иләү
рәхимһеҙ

**II.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Һығымта эшләгеҙ.

вагон, велосипед, ваза, трамвай, Вәли, ваҡыт, Ватан, Вәхит, вальс, вертолет, Вәкил, ватыҡ, автомобиль, Ваһап, Вәсилә, ваҡ

**12.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Төп фекерен аңлатығыҙ. Күсереп яҙығыҙ.

## Тыуған яҡтар

Һәр кем үҙенең тыуған яғы менән ғорурлана. Ул кешегә матур ҙа, күркәм дә булып күренә. Ҡайҙа ғына булмаһын, кеше үҙ ерен һағына. Кешеләр тыуған ерҙәре, ауылдары, һыуҙары тураһында бик күп йырҙар ижад иткән. Кеше тыуған ерен яратып ҡына ҡалмай, уның йәмен дә арттыра, байлығын да, тәбиғәтен дә һаҡлай.

?

1. Үҙегеҙ йәшәгән ҡала (ауыл) тураһында һөйләгеҙ. Ул ни яғы менән һеҙгә ҡәҙерле?
2. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәре аҫтына һыҙығыҙ.

!!

**13.** Һүрәтте ҡарағыҙ һәм был ҡыҙҙың урманда кемгә, ниндәй байрамға сәскәләр гөлләмәһе йыйыуы тураһында һөйләгеҙ. Сәскә исемдәрен дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.



**14.** Диалогтарҙы дауам итеп, үлән, сәскә йыйыу ҡағиҙәләре, уларға ҡарата һаҡсыл ҡараш булдырыу тураһында һөйләгеҙ.

1. — Ҡарағыҙ әле, был аҡланда күпме матур сәскә үҫә! Әйҙәгеҙ, уларҙан таж яһайыҡ. Уй, ҡайһылай матур була!

— ...

— ...

2. — Хәлиҙә, әйҙә, кем күберәк сәскә йыйыр икән!

— Фәниә, сәскәләрҙе күп өҙмәйек, улар бит тормош йәме.

— ...

— ...

**15.** Тексты тәржемә итегеҙ. Яңы һүҙҙәрҙе һүҙлек дәфтәренә яҙығыҙ.

## Самое важное

Человек не может выбирать себе наружность, но зато он имеет возможность выбрать более важную вещь — характер. Мы можем сделать себя такими, какими нам хочется быть. Очень важно быть настойчивым и упорным. Таким людям все удается лучше, чем слабохарактерным.

С детства приучайте себя не отступать перед трудностями, доводить дело до конца, это войдет в привычку, и, когда вырастете, у вас будет великолепное качество — настойчивость. *(С. А. Лавочкин)*

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

1) сағыу, ҡыңғырау, күңелле, таң, борғо, яңғырай, туғай, биҙәк, йәйғор, балыҡ, ҡыяҡ, Гөлнәзирә, бәпембә, аҡ сәскә, ялҡау, ҡырмыҫҡа, ауырыу, рәхмәт, тәүлек, ысын, гөлләмә, ҡояш, һауа, болот

2) бутай башланы, бер-береһе өсөн, «тере күпер», ҡырмыҫҡа иләүе, бейек күтәрелгәндәр, таралышып бөткәндәр, төрлөһө төрлө яҡҡа, ҡотлау менән, үлән йыйыу ҡағиҙәләре, Ер йәме

**16.** Тема буйынса кем күберәк һүҙҙе хәтерендә ҡалдырҙы? Яҙығыҙ.

**17.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Лагерь иртәһе

Ал таң яңы һыҙылды,
Таң ҡотлай төрлө ҡоштар.
Тау, урманды шаулата
Мең төрлө шат тауыштар.

Аҡ сатырҙар, сәскәләй,
Йәшел урман буйында.
Бына борғосо, уянып,
Борғо ала ҡулына.

— Тиҙ! Тиҙ! Ваҡыт торорға!
Борғосо борғо уйнай.
Тра-та-та, тра-та-та,
Яңғырай урман, туғай.

Бар балалар һалдаттай,
Тышҡа етеҙ ташлана.
Тра-та-та, тра-та-та,
Лагерь көнө башлана.

*(Б. Бикбай)*

**таң һыҙылды** — рассвет забрезжил
**сатыр** — палатка
**борғосо** — горнист
**һалдаттай** — как солдат
**ташлана** — *зд.*: выскакивают

1. Шиғырҙың бер строфаһын ятлағыҙ һәм яттан яҙығыҙ.
2. Шағир йәй менән нисек һоҡлана?
3. Лагерҙа ял иткәнегеҙ бармы? Һеҙҙә лә иртә (иртәнге ваҡыт) шиғырҙа әйтелгәнсә башлана инеме?

## Грамматика буйынса белешмә (6-сы класс)

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Ҡылым** — Глагол

**Глагол (ҡылым)** обозначает действие или состояние предмета и отвечает на вопросы **нимә (ни) эшләргә?** — что делать? что сделать? **нимә (ни) эшләй?** — что делает? что сделает? **нимә (ни) эшләне?** — что делал? что сделал? и т. д. Глагол (сказуемое) в башкирском языке ставится в конце предложения. Например:

Малай гитарала **уйнай.** — Мальчик играет на гитаре.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Рәүеш** — Наречие

**Наречия (рәүеш)** в башкирском языке характеризуются неизменяемостью, обозначают признак действия или признака, отвечают на вопросы **нисек? ни рәүешле?** — как? **ҡасан?** — когда? **ҡайҙа?** — где? **күпме? ни тиклем?** — сколько?

В предложении наречие большей частью выступает в функции обстоятельства:

**тиҙ** әйтте — быстро сказал(-а)
**матур** йырлай — красиво поёт
**кисә** күрҙем — вчера видел(-а)
**башҡортса** һөйләшә — говорит по-башкирски

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Һан төркөмсәләре** — Разряды числительных

**Количественные числительные (төп һандар)** отвечают на вопросы **нисә? күпме?** — сколько? Они не имеют аффиксов. Например:

**ике** уҡыусы — два ученика.

**Порядковые числительные (рәт һандары)** отвечают на вопрос **нисәнсе?** — который? и образуются присоединением к количественным числительным аффиксов **-нсы/-нсе, -ынсы/-енсе, -өнсө**: **икенсе** — второй.

В сложных числительных аффиксы **-нсы/-нсе, -ынсы/-енсе, -өнсө** прибавляются только к последнему числительному: ун биш**енсе** рәт — пятнадцатый ряд.

**Разделительные числительные (бүлем һандары)** образуются от основы количественных числительных с помощью аффиксов **-ар/-әр** (после согласных), **-шар/-шәр** (после гласных) и отвечают на вопрос **нисәшәр?** — по скольку?: алты**шар** — по шесть.

В сложных числительных аффиксы присоединяются к последнему слову: ун ике**шәр** — по двенадцать.

В названиях круглых сотен и тысяч аффиксы прибавляются к первому слову: **өсәр** йөҙ — по триста.

**Собирательные числительные (йыйыу һандары)** образуются от количественных числительных от одного до семи и десять с помощью аффиксов **-ау/-әү** и отвечают на вопрос **нисәү?** — сколько?: бер**әү** — один, алт**ау** — шестеро.

**Приблизительные числительные (сама һандары)** обозначают количество предметов примерно и отвечают на вопрос **нисәләп?** — приблизительно сколько? Образуются с помощью аффиксов **-лап/-ләп, -лаған/-ләгән.** Например: егерме**ләп**, егерме**ләгән** — около двадцати.

**Дробные числительные (кәсер һандары)** называют не целые числа. Они образуются синтетическим способом. При этом знаменатель ставится на первом месте в форме исходного падежа, а числитель — на втором в именительном падеже: **дүрттән өс** — три четвёртых.

Для выражения десятичных дробных числительных используются слова **бөтөн** — целый и **нуль** — ноль. При этом сначала ставится название целого числа в сочетании со словом **бөтөн** — целый, а затем дробная часть: **бер бөтөн ундан ике** — одна целая две десятых.

Для выражения количества в частях употребляется ещё слово **ярым** — половина. Количественные числительные вместе со словом **ярым** относятся также к дробным числительным: **биш ярым** — пять с половиной, **мең ярым** — тысяча пятьсот, полторы тысячи.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


**Яңынан мәктәпкә** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
VI класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Сифат дәрәжәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6

**Ауыл тормошо** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 17
Текст. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 21

**Башҡортостан буйлап сәйәхәт** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 31

**Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42

**Мин һәм беҙҙең ғаилә** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 60
Ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 61
Теркәүестәр. Теҙеү теркәүестәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74

**Сәнғәт оҫталары** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 80
Эйәртеү теркәүестәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
Һүҙбәйләнеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85

**Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 90
Бәйләүестәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 91

**Борон-борон заманда...** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 95
Киҫәксәләр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97

**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 103
Мөнәсәбәт һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 108
Ымлыҡтар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 118

**Йәмле йәй** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 122

Грамматика буйынса белешмә (6-сы класс) . . . . . . . . . . . . . . . . 133

Учебное издание

**Габитова** Закия Муллагалеевна
**Усманова** Минсылу Губайтовна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**Учебное пособие для 7 класса
для изучения башкирского языка (как государственного)
в общеобразовательных организациях
с русским языком обучения**

(на башкирском и русском языках)

Уҡыу баҫмаһы

**Ғәбитова** Зәкиә Муллағәле ҡыҙы
**Усманова** Миңһылыу Ғөбәйт ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн
башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн
уҡыу ҡулланмаһы**

Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.10.2017. Форматы 60×90 $^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы.
Киҫек-журнал гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 8,50+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 35,0.
Иҫәп-нәшер таб. 4,94+0,42 форз. Тиражы 34350 дана. Заказ 1.0202.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.